ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

10-16 март (буранай) 2018

№ 10 (792)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы иреклe

*Ҡатындарҙы мөхәббәтле күрһәтәсәк нәмә матурлыҡ түгел, гүзәл холоҡтор. Күп ҡатындарҙың матурлығы камил булмаһа ла, һәр кем алдында һөйкөмлө күренә һәм хөрмәтләп телгә алына. Шунең өсөн гүзәл холоҡло һәм миһырбанлы булығыҙ. Асыулы йөҙлө булмағыҙ. Асыулы йөҙ менән бер кемгә лә күренмәгеҙ. Асыуланған ваҡытта һөйләшмәгеҙ, бигерәк тә башҡаларға яуап биреүҙән һаҡланығыҙ. Сөнки асыуланғанда яуап биреү асыуҙы көсәйтә.*

***Ризаитдин нәсихәттәренән.***

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Их, һеҙ, матур ҡыҙҙар!**
Йәки Гүзәл заттарыбыҙҙы йәлләүем тураһында бер кәлимә
2-3

**Ҡатын-ҡыҙ - милләт әсәһе...**
5

**Тәнеңдә артыҡ аҙыҡтан,** йәнеңде бысраҡлыҡтан һаҡла!
8-9

**Хәҡиҡәт - ул беҙҙең асылыбыҙ,** был донъяла башҡорт ҡатыны булып йәшәүебеҙ
12-13

**ТВ-программа** 14









ҠОТЛАЙБЫҘ!

# ҠАТЫН-ҠЫҘҺЫҘ - ДОНЪЯ ҺАНҺЫҘ!




Хөрмәтле ҡатын-ҡыҙҙар, ҡәҙерле гүзәл заттарыбыҙ! Һеҙҙең барығыҙҙы ла яҙҙың күркәм байрамы - Бөтә донъя ҡатын-ҡыҙҙар көнө менән ҡайнар ҡотлайбыҙ. Бөгөн һеҙҙе барыһы ла тәбрикләй: ил, республика һәм баш ҡала етәкселәре, коллегаларығыҙ, ир-егеттәр, яҡындарығыҙ, ҡәҙерле кешеләрегеҙ, һөйгәндәрегеҙ, ағай-ҡустыларығыҙ. Һәм һеҙ уларҙы ихлас ҡабул итәһегеҙ, сөнки был һүҙҙәрҙең ысын күңелдән, йөрәк төпкөлөнән икәнен беләһегеҙ.Был байрам бер көнлөк кенә булһа ла, ҡатын-ҡыҙҙың асылы мәңгелек ул. Быны, бәлки, ҡайһы саҡ йәмғиәт тә, айырым кешеләр ҙә баһалап та етмәйҙер, әммә ҡатын-ҡыҙ үҙе яҡшы белә һәм шул асылы менән ир-егеттәр донъяһын аңлап та, кисереп тә, күтәрмәләп тә йәшәп килә.

"Киске Өфө" гәзите донъя күрә башлағандан алып халҡыбыҙҙың һоҡланғыс һәм эшлекле, һәләтле һәм аҡыллы, һөнәрле һәм абруйлы ҡатын-ҡыҙҙары хаҡында яҙҙы һәм яҙыуын дауам итә. Гәзит биттәрендә һеҙ ил инәһе булырҙай бихисап гүзәлдәребеҙ менән таныштығыҙ һәм улар хаҡында киләсәктә лә уҡырһығыҙ әле. Аллаға шөкөр, беҙҙең милләттең ғорурланырлыҡ ҡыҙҙары аҙ түгел. Ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙҙы байрам менән ҡотлап, уларға хыялдарында булған бар изге теләктәренең дә алдарына сығып тороуын, һау-сәләмәт, күтәренке рухта булып, ғаиләләренең, илдең күрке булып, именлектә һәм ҡәҙер-хөрмәттә генә көн итеүҙәрен теләйбеҙ. Ҡатын-ҡыҙы баһаланған, кәмһетелмәгән, һаҡлаулы һәм яҡлаулы булған милләттең ир-егеттәре лә данлы булыр. Инәһе көслөнөң - иләүе лә көслө, ти бит халыҡ мәҡәле.

**Ихлас теләктәр менән,**
**"Киске Өфө"ләр.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# Ғаиләгеҙҙәге әсәй, өләсәй тәрбиәһе хаҡында һөйләшеп алайыҡ әле...

***Спартак ИЛЬЯСОВ, тарихсы, йыраусы, БР Яҙыусылар берлеге ағзаһы:*** Донъябыҙҙы бар иткән дә, бал иткән дә - ҡатын-ҡыҙ, әсә. Кеше яҡты донъяға бар булыуы, ошо донъяла кеше булып йәшәүе менән иң тәүҙә ҡатын-ҡыҙға бурыслы. Милләт әсәләре булараҡ, беҙҙең ҡатын-ҡыҙ усаҡтан ут өҙмәйенсә, тормошобоҙға ҡот өҫтәй, зат-ырыуыбыҙ - нәҫелебеҙҙе дауам итә, балаларыбыҙҙы тәрбиәләй, рухиәтебеҙ хазиналарын һаҡлай. Ил өҫтөнә һынау килһә, уның афәтен, затырыу өсөн хәсрәтен иң тәүҙә ҡатын-ҡыҙ, әсә үҙ иңендә күтәрә. Шунын өсөн дә ир-егет ҡатын-ҡыҙҙың күңел тыныслығы һағында тороп, ил имен-леген дә һаҡлай, тигән һүҙ. Донъябыҙҙын йәне лә, йәме лә, тотҡаһы ла улар. Бөтәбеҙгә лә бәләкәйҙән таныш тойғо: әсәй өйҙә булмаһа, донъябыҙ шыҡһыҙ, һалҡын, ҡараңғы кеүек. Тәҙрәнән, юлдан күҙҙе алмайынса, бөтәбеҙ ҙә уның ҡайтҡанын көтәбеҙ. Ул ҡайтып инһә, өй эсе нурға тула, күңелдәр күтәрелә. Әсәйем (беҙҙә инәй тиҙәр) менән атайым икеһе лә уҡытыусы булып эшләне. Өҫтәүенә, талант эйәләре лә инеләр: әсәйем матур итеп йырлай, мандолинала уйнай, ә атайым скрипкала һыҙҙыра. Атайым Мөжәүир Әбделфән улы һуғышҡа киткәс, әсәйем Хәтимә Сәлимгәрәй ҡыҙы беҙҙе, 8 баланы, бер үҙе аҫраны. Һуғыштан һуңғы ауыр заман булыуға ҡарамаҫтан, атайым менән икеһе лә беҙҙе уҡытыуға ҙур көс һалдылар. Алтауыбыҙ юғары белемгә эйә булды, беҙҙең арала табиптар ҙа, уҡытыусылар ҙа, башҡа һөнәр эйәләре лә бар. Мин үҙем ауыл хужалығы белгесе булып, ғүмер буйы хужалыҡ етәксеһе вазифаһында эшләһәм дә, шағир әйтмешләй, аяҡтарым - ерҙә, күңелем йырҙа булды. Йыраусы, тип ҙурлай әле лә халҡым, рәхмәт инде. Ә минең рәхмәттәрем - әсәйемә, атайыма, өлкән инәйҙәремә. Халҡыбыҙҙың йыр-көйҙәре алып килде мине рухиәтебеҙгә. Элек бит баланы ғаилә генә түгел, бөтөн ауыл тәрбиәләне. Өмәгәме, аулаҡҡамы йыйылалар - мотлаҡ йыр һуҙыр, мөнәжәт әйтеп ултырыр ине инәйҙәр. Шунда уҡ йыр тарихын, боронғоно һөйләйҙәр. Беҙ, бәләкәй балалар, ауыҙ асып тыңлар инек уларҙы. Ҡартинәйемдең апаһы Сафуранан да күп йыр һәм риүәйәттәр отоп алдым. Ул беҙҙең Учалы районына йәнәш Арғаяштан йәйәүләп килеп етер ине хатта, туғандары өсөн өҙөлөп торҙо. Башҡорт милли хәрәкәте лидерҙарының береһе булған күренекле шәхесебеҙ - дәүләт һәм йәмәғәт эшмәкәре, Башҡортостан Үҙәк Башҡарма Комитет рәйесе Хафиз Ҡушаевтың әсәһе ине Сафура оло ҡартинәйем. Уларҙан мин онотолоп барған "Балбал", "Зарыҡай", "Кәкүккәй", "Ирәмәлкәй", "Туғанай", "Азамат" һәм башҡа бик күп йыр-көй, риүәйәттәр отоп алып, аҙаҡ башҡарып, халҡыма кире ҡайтарҙым. Тарихыбыҙҙы тәрәндән өйрәнеүгә лә ана шул йыр-мондарыбыҙ, көйҙәребеҙ аша килдем. Балаға туған мәҙәниәтенә һөйөүҙе бәләкәйҙән һәм ғаиләлә ата-әсә тәрбиәләргә тейеш. Өйөбөҙҙә туған телмәр, моңкөйҙәребеҙ яңғырап торһа, сабыйҙар әсәһенең бишек йырын тыңлап үҫһә, бөгөнгө көндә туған телебеҙ тирәләй олоғара проблема килеп сыҡмаған да булыр ине, бәлки.

**(Дауамы 3-сө биттә).**

12+

КИЛЕШМӘЙЕМ!

**Һуңғы осор йыш ҡына Ер йөҙөндәге иң гүзәл заттарыбыҙ - ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ хаҡында фәлсәфәләргә бирелеүсәнмен. Ғәзиз әсәйҙәребеҙ, һөйөклө хәләл ефеттәребеҙ, ҡәҙерле апай-һеңлеләребеҙ, ҡыҙҙарыбыҙ, ейәнсәрҙәребеҙҙе һәм башҡаларҙы тәшкил иткән йәмғиәтебеҙҙең бына ошо өлөшө тураһында уйланмаған бер ир-ат заты ла юҡтыр.**

# ИХ, ҺЕҘ, МАТУР ҠЫҘҘАР!

## Йәки Гүзәл заттарыбыҙҙы йәлләүем тураһында бер кәлимә



Әйе, беҙ уларҙы "гүзәл", "нәфис", ҡайһы берҙә "көсһеҙ" заттар тип тә атайбыҙ. Бәғзе ваҡыттарҙа наҙлы сәскәләргә тиңләйбеҙ уларҙы. Ә ниндәйҙер осраҡта бына ошо "көсһеҙ" заттарыбыҙ ир-аттар ҡулынан килмәҫлек эштәрҙе лә атҡарып ташлай ҙа баһа! Ауыр һуғыш мәлендә, ирҙәрҙең күпселеге яуға киткәс, тылдағы бөтә эштәрҙе үҙ иңенә йөкмәп, илдәге етештереү кимәлен мәртәбәләргә күтәргән кеше бит улар. Ҡулдарына ҡорал тотоп, ирҙәр менән бер рәттә яуҙа ҡатнашҡандары, һуғыш яланында иҫ киткес батырлыҡ күрһәткәндәре лә бихисап. Әле булһа Ер йөҙөндә ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ һәр төрлө эштәргә "егелеп" ғүмер һөрөүҙән дауам итә. Ҡайҙа ғына, кем генә булып эшләүҙәренә ҡарамаҫтан, һәммә эш уларҙың хәленән килә. Был хәҡиҡәттә һис инҡар итеп булмай. Әммә... "Көсө етә", тигәс тә, бына шундай нәфис гүзәлдәребеҙҙән һаман да "һабан һөйрәтеү" дөрөҫ буламы икән, тигән һорау мине һәр саҡ борсой.

Планетабыҙҙың ҡайһы мөйөшөн генә алып ҡараһаҡ та, ҡатын-ҡыҙ үҙ асылында ҡала инде ул. Уйым менән бер аҙ алыҫҡараҡ, сит яҡтарға барып байҡаштырып йөрөп килеүҙе лә кәрәк тип таптым. Телевизорҙан яңылыҡтар тапшырыуы һайын тиерлек Көньяҡ Кореяның экс-президенты Пак Кын Хенең ҡылған мутлыҡтары өсөн уға хатта ниндәйҙер ҙур енәйәт эше асыу хаҡында бер килке һөйләй торғас, ул меҫкенде ғүмерлек төрмәгә хөкөм итергә йыйыналар, тип ишеттем. Быға ышанғы ла килмәй бит, йәмәғәт! Мин үҙем сәйәси күҙәтеүсе түгелмен, хатта, дөрөҫөн генә әйткәндә, уның үҙ илендә ни менән булышҡаны хаҡында белгем дә килеп тормай. Бәғзеләргә, бәлки, бик ирмәк тә тойолор, әммә миңә бына ошо ҡатын бигерәк тә йәл. Телетапшырыуҙар мәлендә уны насарлап һөйләй башлауҙары менән шунда уҡ телевизорымды икенсе каналға күсереп тә ҡуя инем. Йөҙөнә, ҡиәфәтенә ҡарағанда башҡорт ҡатынына оҡшап ҡына торған, бигерәк тә яғымлы, мөләйем күренгән ошо гүзәл заттың насар кеше булыуына һис кенә лә ышанғым килмәй, ысын. Үҙем ир-ат вәкиле булғанға ла шундай алдаҡсы тойғолар тәьсирендә түгелменме икән, тигән иңәлесығалы уйҙарым да юҡ түгел. Бәлки, ысынлап та, кешеләрҙең күпселеге тормошта башҡаларҙы "тыштан ғына" күреп, ана шулай алданалыр, тигән фәлсәфәләргә лә төшөп китәм ҡайсаҡ...

Күптән түгел АҠШ-тың президенты булырға маташҡан Хиллари Клинтонды ла бик ныҡ йәлләгәйнем. "Товарищ Трамп"тан еңелгәс, Хиллари апай өсөн хатта борсолоп та алдым. Алсаҡ йөҙлө был ханымдың уңышһыҙлыҡтарын бер аҙ онотоп, "күңел яраһы" уңалып ҡына килгәндә, Марин Ле Пен исемле йәнә бер гүзәл зат сәйәсәт аренаһында пәйҙә булды. Рәсәй менән Францияның мөнәсәбәтен яҡшыртырға вәғәҙә иткән был ҡатын-ҡыҙҙы ла йәлләп, Макрон менән нисек алышҡандарын күҙәттем. Шул уҡ ваҡытта Ле Пендың президентлыҡҡа үтеүен дә теләмәнем, сөнки уның өсөн ғәйәт ҙур юғары вазифаны башҡарыуҙың ниндәй ауыр булырын күҙаллап ҡыҙғандым үҙен. Ярай әле, был апайыбыҙ ҙа еңелеп ҡуйҙы...

Әлегерәк Рәсәйебеҙҙең Әбей батшаһы хаҡында ла йыш ҡына уйлана инем. Бала сағымда уны, ниш-ләптер, үҙебеҙҙең өләсәйҙәргә оҡшата биреберәк, яулыҡ ябынған бер әбей һымағыраҡ итеп күҙ алдына килтерә инем. "Әбей", тигәндәре әллә ни әбей ҙә булмаған икән. Ярайһы ғына сибәр бер ҡатын итеп, уны киноларҙа күрһәтә башлағас, бына шул нәфис зат та минә йәл тойола башланы. Икнеҙ-сикһеҙ Рәсәй иле менән идара итә алыуына аптырай инем. Аляска ярымутрауын американдарға юҡ хаҡҡа ғына тиерлек һатып ебәргәне хаҡында ишетеп, үкендем. Әлеге ҡатын-ҡыҙ йомшаҡлығылыр инде, тинем. "Ярай, илебеҙ былай ҙа киң, еребеҙ етерлек", тип, ахырҙа, тынысланып ҡуйҙым...

Эй, нәфис ҡатын-ҡыҙҙар... "Хөкүмәт" тип аталған гигант машинаның руле артына ултырырға нисек ҡурҡмай улар, тип уйланам йыш ҡына. Бөтөн бер ил еңел генә йөрөтөп алып китерлек автомобиль ише генә түгел дә баһа... Бала сағымда берәй кешене, йә иһә хайуанды йәлләп илаһам, әсәйем мәрхүмә гел генә: "Эй, ошо малай, һәр нәмәне лә йәлләр ҙә йөрөр...", - ти торғайны. Ысынлап, та, барыһын да йәлләйем, йәмәғәт. Һинең йәлләүеңә, йомшаҡ ҡына итеп әйткәндә, иғтибар итмәйҙәр бит әле: ҡыҙҙарыбыҙҙың күпселеге, һис нәмәгә ҡарамай, һаман да эш тип яна, ҡайҙа булһа ла эшләргә ынтыла, кемдер әйтмешләй, "шытып сығып бара", ауыҙына май булғыры. Нәҡ теге элекке Советтар Союзы мәлендәге йырҙарҙа йырланғанса: "... матурҙар - алтын кеүектәр, эштә - ялҡын кеүектәр..." Шунлыҡтандыр, илебеҙҙең бихисап штат берәмектәренең бик күбен ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ биләй. Уҡытыусы, тәрбиәсе, табип, эшҡыуар... Тағы бер аҙ юғарыраҡ вазифалар - мәктәп директоры, дауалау учреждениеларының бәғзе бүлектәрен, киң матбуғат сараларын етәкләүселәрҙең күпселеге гүзәл заттарҙан тора. Йәнә бер аҙ үргәрәк менә биреп ҡараһаҡ, хатта унда ла ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ туп-тулы! Дәүләт Думаһында ла уларҙың булыуы, закон яһап ултырыусыларыбыҙға һәр төрлө аҡыллы кәңәштәр биргеләүе зарур икән. Үҙ эштәренә ифрат та яуаплы ҡараған бындай ҡатын ҡыҙҙарыбыҙ һәр ерҙә лә кәрәктер шул. Ғаилә тормошонда ла бәғзе ваҡыт ҡатынның ирҙәр эшенә ҡағылышлы ниндәйҙер бер "умный совет" биреп ебәрә бит. Ә үҙҙәренең өлкәһендә, һөйләп тораһы ла юҡ, ҡатын-ҡыҙ бигерәк тә яҡшы йүнәлеш биреүсән инде. Шуға күрә лә, "Дума" тигән ерҙә уларҙың булыуы - мотлаҡтыр, ахырҙа. Мәҙәниәт, мәғариф, тағы ла ниндәй министрлыҡты етәкләүсе ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ ҙа үҙ эштәрен уңышлы башҡара... Бына шулай һанай килә-килә, баштараҡ иҫкә алған сит илдәге ханымдар һымаҡ "хөкүмәт башына" ла килеп еттек, йәмәғәт! Ҡатын-ҡыҙһыҙ бер ерҙә лә тиерлек булмай икән дә баһа! Тик, әлеге әйткәндәй, хөкүмәт башлығы дәрәжәһен барыбер уларға биргем килмәй, көк хәтишь! Илебеҙҙә губернатор, президент булырға ынтылыусы гүзәлдәребеҙҙең булмауы менән дә ифрат ҡәнәғәтмен, сөнки, наҙлы заттарыбыҙҙы, әлеге әйткәндәй, "тәртә араһына екке" килмәй. Үҙемдең хәләл ефетемдә, мәҫәлән, президент итеп күрергә бер ҡасан да теләмәҫ инем (сер итеп кенә әйтәм, ул да ир-егеттәр менән бер сафта егерме йыл хәрби хеҙмәт емешен татыған кеше).

Бына шулай, үҙ-үҙем менән бәхәсләшә-тарткылаша, бер уйыма икенсеһен, үҙемдең хистәремә реаль тормош ысынбарлығын ҡапма-ҡаршы ҡуя килəм. Хөрмәтле ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙҙы кәмһетергә ниәтләй, тип, моғайын, бер кем дә уйламайҙыр. Эйе, тап киреһенсә, уларҙың күп кенәләрен ғәйәт ауыр йөктө үҙ иңендә йөкмәп китеп барған һылыуҙар һымаҡ итеп күреүем. Әммә ир халҡына тәғәйенләнгән йөктө һөйрәй алыуҙа, хатта күп кенә шундай юғары вазифаларҙы ирҙәрҙән кәм башҡармауҙа ғына торһа ине эш. Фекеребеҙҙе туплап, һәр яҡтан етди, тәрәнерәк итеп уйлап ҡараһаҡ, Аллаһы Тәғәлә ирҙе - көслө, бер аҙ тупаҫыраҡ, һалҡыныраҡ һәм ҡатыраҡ итеп итеп, ә ҡатын-ҡыҙ затын һәр тарафтан нескә һәм наҙлы итеп, хатта йөҙгә лә матур итеп яралтҡан бит. Бынан тыш, ир заты ғүмерҙә эйә була алмаҫлыҡ сифаттар бирелгән уларға. Мәҫәлән, бала табыу ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙға йөкмәтелгән. Был - үҙе бер бөйөк эш! Ә баланы наҙлап үҫтереү? Йәш сабый менән икеүҙән-икеү ҡалып, иртәнән-кискә тиклем, исмаһам, бер көнгә түҙә алырлыҡ бер ирҙе табып бу-

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Өфөлә Рәсәй Федерацияһы Президентының Волга буйы федераль округындағы тулы хоҡуҡлы вәкиле Михаил Бабич рәйеслегендә урмандарҙы файҙаланыуҙың һөҙөмтәлелеген арттырыу, шулай уҡ урман янғындарын иҫкәртеү һәм һүндереү өлкәһендә үҙара эш итеү буйынса кәңәшмә булды. Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов республикала Волга буйы федераль округы төбәктәрендә урман янғындарын күҙәтеү үҙәген асырға тәҡдим итте.

✓1-30 апрелдә юлдарҙа күсәргә йөкләнеш билдәләнгән сиктән арткан ауыр йөк транспорттарына сикләү индерелә. Был ҡар ирегән һәм һауа температураһы бер күтәрелеп, бер төшкән осорҙа айырыуса боҙолоп барған юл япмаһын һаҡлау өсөн кәрәк. Бынан тыш, йәйгеһен һауа температураһы +32 градустан юғары булған саҡта ауыр йөк ташыусы машиналарҙың хәрәкәте сикләнә (уларға бер аҙ һалҡын төшкәс төнгө 10-дан иртәнге 10-ға саҡлы йөрөү рөхсәт ителә).

✓2018 йылда чиновниктарға страховкалы пенсия ир-егеттәргә - 61, ҡатын-ҡыҙҙарға 56 йәштән тәғәйенләнә. Дәүләт һәм муниципаль хеҙмәткәрҙәргә пенсия йәше 2017 йылдың 1 ғинуарынан арттырыла башланы - йыл һайын алты айға. Һөҙөмтәлә 2026 йылға пенсияға сығыу йәше ирҙәргә - 65, ҡатындарға 63 йәште тәшкил итергә тейеш. Пенсия йәшен арттырыу дәүләт хеҙмәте осоронда ғына ҡаралған. Эштән киткәндән һуң, гражданин барыһы өсөн дә билдәләнгән пенсия тәғәйенләүҙе һорап мөрәжәғәт итергә хоҡуҡлы. Был проект, асылда, бөтә граждандар өсөн пенсия йәшен этаплап арттырыу старты, тип иҫәпләй эксперттар.

✓Яҡын киләсәктә баш ҡалабыҙ үҙәгендә түләүле парковкалар булырға тейеш. Әле белгестәр һәм юл хәрәкәте хәүефһеҙлеге эксперттары парковка урындары исемлеген төҙөй. Проект авторҙары фекеренсә, нигеҙҙә түләүле парковкалар Өфө ҡунаҡтарына ҡағыла. 28 февралдә түләүле парковкалар ойоштороу хаҡында положение ҡабул ителде. Шулай уҡ яҡынтирәләге йорттарҙа йәшәгәндәргә ҡала үҙәген бушатыуҙың ошондай саралары ҡағылмауы, ә парковкаларҙың 10 проценты инвалидтар, Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашыусылар һәм күп балалы ғаиләләр өсөн тәғәйенләнеүе билдәле.

ламы ошо донъяла? Тейешенсә бала наҙлау һәләте, оло сабырлыҡ тигән юғары сифаттар - тик әсә кешелә генә була. Бына шул айырманы ғына алып ҡарағанда ла, "ир - ир урынында, ә ҡатын - ҡыҙ урынында булырға тейештәр", тигән ҡәтғи ҡарарға киләһең...

Дөрөҫөн генә әйткәндә, көрәк, һәнәк, салғы, балта тотоп эш эшләүсе ҡатын-ҡыҙҙарға тыныс ҡына ҡарай алмайым. Бала сағымда, атайым эштә булғанда, аҙбарға мал тәрбиәләргә сыҡҡан әсәйемдең ауыр бесән күтәреүен күреп, йәлләй инем. Атайым үҙе лә уны, хатта еткән ҡыҙ булып үҫеп килгән апайымды ла, йәлләп, бесән сабыуға, хатта йыйыуға ла бер ваҡытта ла алып йөрөмәне. Бер аҙ үҫә төшкәс тә, янында үҙем булған осраҡтарҙа әсәйемә шул физик эште эшләтмәҫкә тырыштым. Ә хәҙерге көндә хәләл ефетемде баҡса эшенә йәлеп итмәҫкә тырышам. Шунда ла, ныҡышып, ҡайһы берҙә бара ул баҡсаға, әммә уға көрәк, тәпке һымаҡ ҡоралдарҙы бирмәйем. Минеңсә, быны ла ҡәҙерлеләребеҙҙең һәр төрлө эшкә булған хоҡуғын сикләү, тип ҡабул итеү ярамай.

Беҙҙең яҡ диалектында "әгәр мин булһам", тигән һүҙбәйләнеш йөрөй. Шуның һымаҡ, әгәр мин булһам, йәғни, минең мөмкинселегемдә булһа, һөйөклө ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙҙы ифрат та ауыр булған һәр төрлө хөкүмәт эшенә бер ваҡытта ла екмәҫ инем. Ә инде физик көс талап иткән эштәр тураһында әйтеп тораһы ла юҡ. Балалары һанына ҡарап, гүзәлдәребеҙгә "гүмерлек стипендия" түләр инем. Ғаилә усағын һүндермәй, бар кешелекте йәмләүсе ошо заттарыбыҙҙың шәхси тормоштағы эштәре лә һанап бөтөргөһөҙ бит! Бына шундай яуаплы, хатта ауыр бурыс йөкмәтелгән гүзәлдәребеҙгә Аллаһы Тәғәлә ныҡлы иман, һаулыҡ, сабырлыҡ бирһен, тип һорайым. Ғүмер бер генә килә бит! "Киске Өфө"нөң "Килешмәйем" рубрикаһында минең менән килешмәүсе ирҙәрҙең сығыштары килеп сығырына ла әлләни шикләнмәйем. Уларҙы ла уҡырға әҙермен.

Һүҙ аҙағында. Яҙыусы Әхмәр Үтәбай, мәргән фәйләсүф булараҡ, сираттағы мәҡәләләренең береһендә хөкүмәт парламентындағы ҡатын-ҡыҙҙы һалҡын һәм таҙа булған Йылайыр йылғаһының бурьяғыраҡ, әммә йылымыс булған Һаҡмарға ҡушылған урыны менән сағыштырҙы. Йылы Һаҡмар гүзәл заттарыбыҙҙың тыумыштан булған йомшаҡлығына ишара булһа, һалҡын Йылайыр - хөкүмәт кешеһенә хас була торған ҡәтғилек. Бик йәтеш сағыштырыу! Хатта бына шундай ғәжәйеп, ҡапма-ҡаршылыҡлы сифаттарҙы бергә туплауға һәләтле булған шәпле, көслө, ҡапылда ел-ямғырға бирешмәҫтәй ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙҙы ла барыбер наҙлы сәскә һымаҡ итеп күрәм, уларҙы ла барыбер ҡыҙғанам. Ҡәк хәтишь...

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**

# Ғаиләгеҙҙәге әсәй, өләсәй тәрбиәһе хаҡында һөйләшеп алайыҡ әле...

**(Башы 1-се биттә).**

***Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА, яҙыусы, Ш.Бабич исемендәге республика йәштәр премияһы лауреаты, Башҡортостандың атҡаҙанған матбуғат һәм киң мәғлүмәт хеҙмәткәре:*** Беҙҙе, ғаиләләге алты баланы, ике гүзәл зат тәрбиәләне, тип әйтә алам. Башҡорт ғаиләләренә хас булғанса, атайымдың әсәһе Камила ҡәрсәм беҙҙең менән торҙо. Атай-әсәй эштә саҡта, әлбиттә, йорт-ҡураны һәм бала-сағаны ҡарау уға төшә ине. Беҙ әҙәби әҫәрҙәрҙә өләсәйҙәрҙең ейән-ейәнсәрҙәрен әпәүләп, өлтөрәп торған итеп яҙғандарын уҡырға күнеккәнбеҙ. Юҡ, минең ҡәрсәм талапсан да, уҫал да ине. Үҙе лә эшкә әрһеҙ булды, беҙҙе лә йомшаны. Мин хатта, нишләп ҡәрсәм китаптағы шикелле йомшаҡ түгел икән, тип уйлай торғайным. Ләкин ана шул ныҡлыҡ, ҡәтғилеге, ғәҙеллеге беҙҙә бирешмәҫ рух, ихтыяр көсө тәрбиәләне лә инде. Ҡәрсәм йыш булмаһа ла боронғо саҡтарҙы һөйләп ала торғайны. Милләтебеҙ тарихы менән ҡыҙыҡһыныу уятты ул. Беҙҙең ҡәрсәй тик башҡортса кейенә ине. Балитәкле күлдәк, камзул. Башҡортса, мосолманса тәрбиә алғайны ул. Шуға ла тел сафлығы менән айырылып торҙолар. Тауыштарында беҙҙең телгә генә хас моң булды. Үҫәргән һөйләше менән айырылып торҙо боронғо инәйҙәр. Хәҙерге һымаҡ, урыҫтан ингән һүҙҙәр менән телдәре сыбарланмағайны. Бына шундай саф бер мөхит эсендә үтте беҙҙең бала саҡ. Ҡәрсәм беҙҙе үҙе менән ҡунаҡҡа йөрөтә торғайны. Туған-тыумасаһы күп районыбыҙҙа. Беҙ уның менән Ҡараһыуҙа, Бүрелә, Сиктә булдыҡ. Туғандары ҡәрсәмде ныҡ яраталар ине. Иң оло туғандары булараҡ, уға хөрмәт иҫ киткес ҙур булды. Матур итеп ҡунаҡ саҡырышыуҙар, инәйҙәрҙең сөкөрләшеп һөйләшеп ултырыуҙары үҙе бер әкиәт донъяһы һымаҡ хәтерҙә ҡалған. Тарих менән дә, ырыу-зат менән дә, милләт менән дә бәйләүсе көс бит ул ҡәрсәй-өләсәйҙәр. Һәм иң шәп тормош мәктәбе! Шуға ла ата-әсәләр Аллаһы Тәғәләнән бирелгән ошо бәйләнешкә иғтибар бирһендәр ине.



Әсәйем Шәфиға ғүмерен балалар уҡытыуға арнаны. Шуға ла мәктәп тормошон эстән бик яҡшы беләм, тип әйтә алам. Телгә, әҙәбиәткә һөйөү мәктәп йылдарында һалынды. Беҙ күп бала булғас, бөтөн эште бергәләшеп эшләй торғайныҡ. Хеҙмәт бүленеше булды, шунһыҙ ярамай. Мин күберәк мал-тыуар янында булдым. Апайым йорт эштәрен башҡарҙы. Ҡайһы бер эштәрҙе ярыш һымаҡ үткәрәбеҙ. Мәҫәлән, ярышып билмән эшләйбеҙ, унан дәрескә ултырабыҙ, бына шундай коллектив рух йәшәне өйҙә. Күп балалы ғаиләнең көсө лә, матурлығы ла шунда. Әсәй өйгә ҡайтып инһә, өй эсе нур менән тула. Уның матур итеп теккән кейемдәрен кейҙек, уның йырҙарын тыңлап үҫтек. Ошо башҡорт мөхите беҙҙе сәләмәт һәм даланлы итте. Һәр башҡорт ғаиләһендә балаларҙың туған тел моңонда һуғарылып үҫеүен теләйем. Туған телебеҙ - йән дауаһы, күңел шифаһы, рух бөйөклөгө. Милләтем ошо бәхеттән айырылмаһын. Хәҙерге әсәләргә ҡәрсәй-өләсәйҙәребеҙҙең иман ныҡлығын теләйем. Шул саҡта бер ниндәй заман ғәрәсәттәре беҙҙе милли тамырҙан айыра ла, шиңдерә лә, ҡорота ла алмаҫ.

***Гөлшат ЮНЫСОВА, Баймаҡ ҡалаһы:*** Ғаиләләге баш балаға, ғәҙәттә, иғтибар һәм иркәләүҙәр мул тейһә лә, уның зыяны юҡтыр, тип уйлайым. Сөнки баш балаға иртәрәк өлкәнәйеп, үҙаллылыҡҡа өйрәнергә һәм башҡа туғандарына апай йә ағай ролен башҡарырға тура киләсәк. Шуға ла иркәләү-әпәүләүҙәр мине боҙманы: өс туғаныма апай булып йөрөйөм әле эре генә. Әсәйемдең өгөт-нәсихәттәрен көтөп ултырмайым, ниҙәр эшләргә кәрәклеген белеп торам. "Үҙем кеүек үҙаллы минең ҡыҙым,"- тип һөйөнә әсәй ҙә. Ә шулай ҙа әҙәп ғәҙәттәренә, эшкә өйрәтә һәм мин уның нәсихәттәренә һәр саҡ ҡолаҡ һалам. Әсәйем үҙе лә тырыш, эше менән һүҙе - бер, алдына алғанын эшләмәйенсә ҡуймай. Минең турала ла шулай тиҙәр. Өләсәйемдең дә баш ейәнсәре мин. Шуға микән, миңә өлкәндәргә ҡараған кеүек үк мөнәсәбәттә ул. Сүселдәп, бәпләп тормай бер ҡасан да. Өләсәйем Фәннүр Солтанголова хаҡында ентекләберәк һөйләгем килә, сөнки мин уны бик яратам, уның янында рәхәт һәм тыныс. Ул Ишбирҙе ауылында йәшәй, күп йылдар ауыл хакимиәтендә эшләп, хаҡлы ялға сыҡты . Шулай булһа ла уның өйөнән кеше өҙөлмәй. Йомош менән дә, кәңәш һорап килеүселәр ҙә күп. Аҡыллы ул минең өләсәйем. Тормошта булып торған ҡатмарлыҡтарҙы сабыр кисерә, аңлай һәм ғәфү итә белә, кем хаҡындалыр насарлап һөйләгәнен ишеткәнем дә юҡ. Хәл-ваҡиғаларҙы гел генә ыңғайға көйләп, изгелеккә йөҙ тотоп йәшәй. Йәй көндәре бигерәк рәхәт уның янында. Беҙҙе үҙе менән сәхрәгә алып сыға: еләк-емеш тирәбеҙ, дарыу үләндәре йыйып киптерәбеҙ, бесәнгә йөрөйбөҙ. "Эшләгәнең беҙгә булһа, өйрәнгәнең - үҙең өсөн",-тип ҡабатларға ярата ул. Үҙе бер ваҡытта ла буш ултырмай: бәйләм бәйләй, тәмле итеп бешерәнә йә мал-тыуарын, ҡош-ҡортон ҡарай. Әле мин ял көндәре өләсәйем янына барған һайын, кис ултырып, уның менән икебеҙгә лә, шулай уҡ әсәйемә, һеңлеләремә, яҡын туған апайҙарыма мәрйен-тәңкәләрҙән бик матур итеп түшелдерек, хәситә эшләү менән мәшғүлбеҙ.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✔Рәсәй Милли медицина палатаһы ойоштороусыһы һәм президенты, күренекле Совет һәм Рәсәй педиатры һәм хирургы, "Донъяләғы балалар докторы" Леонид Рошаль Башҡортостанға килде. Ул республикала тормош кимәле күрһәткестәренең күтәрелеүен, Башҡортостан райондарында фельдшер-акушерлыҡ пункттарын индереү буйынса ыңғай тәжрибәне билдәләне. Уның фекеренсә, был Рәсәйҙең башҡа төбәктәре өсөн яҡшы өлгө булып тора ала.

✔Башҡортостанда Рәсәй Фәндәр академияһының үҙ вәкиллеге асылыуы мөмкин. Был турала академия президенты Александр Сергеев белдерҙе, тип яҙа ТАСС. "Ҡайһы бер төбәктәр Рәсәй Фәндәр академияһы вәкиллектәрен асыуҙы һорай. Беҙ ошондай өс-биш вәкиллек ойошторорға тейешбеҙ. Алтай крайынан, Башҡортостандан, Якутстандан һәм тағы бер нисә төбәктән ғаризалар бар. Быны кампанияға әйләндерергә теләмәҫ инек, беҙгә бер нисә ыңғай миҫал кәрәк", - тип Александр Сергеевтың һүҙҙәрен килтерә агентлыҡ.

✔"Росстат" белгестәре 2018 йылдың ғинуарында Рәсәй төбәктәрендә халыҡтың тәбиғи үҫеше тураһында мәғлүмәтте яңыртты. Статистикаға ярашлы, Башҡортостанда йылдың тәүге айында 4 125 бала донъяға килгән - был 2017 йылдың ошо уҡ осорона ҡарағанда 134-кә күберәк. Төбәктә үлем осраҡтары менән динамика күҙәтелә: 2018 йылдың ғинуарында 4 535 кеше баҡыйлыҡҡа күскән, былтыр иһә 5 079. Ғинуар айында Башҡортостанда 1319 пар никах теркәгән, 1305 ғаилә тарҡалған.

✔Башҡортостандың Эшҡыуарлыҡ һәм туризм буйынса дәүләт комитеты хәбәр итеүенсә, 1 марттан "Башҡортостан микрокредит компанияһы" автономлы коммерцияға ҡарамаған ойошмаһы микрозаймдар буйынса ставкаларҙы кәметә. Республикала кесе эшҡыуарлыҡҡа микрофинанс ярҙамы күрһәтеү һөҙөмтәләрен иҫәпкә алып, Рәсәйҙең Иҡтисади үҫеш министрлығында ағымдағы йылда "Башҡортостан микрокредит компанияһы"на эшҡыуарҙарҙы финанслау күләмен арттырыу өсөн федераль бюджеттан 51,8 миллион һум аҡса биреү тураһында ҡарар ҡабул ителде.

**"Башинформ"дан.**

✓ **81 миллион һумдың 47 миллионы - ауыл мәҙәниәт йорттарын яңыртыуға, 30 миллион самаһы - бәләкәй ҡалаларҙағы театрҙарға ярҙам итеүгә һәм 5 миллионы балалар һәм йәштәр өсөн театрҙарҙы үҫтереүгә йүнәлтелә.**



ҠЫҪҠАСА

# БАЛАЛАР ҘА ҠЫУАНЫР

✓ **Башҡортостан Башлығы күбеһенсә әсәләр эшләгән ойошмаларҙа һәм предприятиеларҙа бала ҡарау буйынса корпоратив төркөмдәр ойоштороурға тәҡдим итте.** Был фекерҙе ул республиканың Ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығы коллегияһында белдерҙе. "Был әсәләргә эш менән бала тәрбиәләүҙе бер юлы алып барырға мөмкинлек бирә. Унышлы тәжрибә М.Акмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетында һәм Республика кардиология диспансерында бар", - тине Рөстәм Хәмитов. Һәм ул Башҡортостан Профсоюздар федерацияһына һәм республиканың Эш биреүселәр союзына был тәжрибәне өйрәнергә һәм профилле министрлыҡтар, ведомстволар менән берлектә ошондай эште ойошторорға йөкләмә бирҙе.

✓ **Балалар баҡсаларында өҫтәмә урындар булдырыуға Башҡортостан 1,3 миллиард һумдан ашыу ала.** Аҡса ике айҙан өс йәшкәсә балаларға мәктәпкәсә белем биреү учреждениеларында урын булыу кимәлен күтәреү өсөн "Мәғарифты үҫтереү" федераль дәүләт программаһы сиктәрендә бүленә. Беренсе транш төбәк ҡаҙнаһына быйыл уҡ күсә, икенсеһе - 2019 йылда. Ил субъекттарына дөйөм бюджет-ара трансферттар күләме 49 миллиард һум тәшкил итәсәк, тип хәбәр ителә Рәсәй Хөкүмәте сайтында. Теге йәки был төбәккә бюджет трансферты күләме ясленәрҙә урын менән тәьмин ителмәгән ике айҙан өс йәшкәсә балалар һанынан, шулай уҡ балаға өс йәш тулғанға тиклем уны ҡарау буйынса ялда булыу осоро хаҡында страховкаланған кешеләр иҫәбе мәғлүмәттәренән сығып иҫәпләнгән.

✓ **Башҡортостандың Иҡтисади үҫеш министрлығы республиканың 100 йыллығына ҡарата юбилей проектына индерелгән социаль объекттар төҙөү өсөн подрядсылар һайлау буйынса 11 электрон аукцион уҙғарыу тураһында иғлан итте.** Планлаштырылған объекттар араһында - Әбйәлил районының Тупаҡ ауылында 60 урынлыҡ балалар баҡсаһы һәм 120 урынлыҡ мәктәп; Иглиндә 160 урынлыҡ балалар баҡсаһы менән берләштерелгән 640 уҡыусылыҡ урта мәктәп; Ҡырмыҫҡалы районының Прибельский ҡасабаһында 340 уҡыусылыҡ мәктәп; Бөрйән районының Иҫке Собханғол ауылында 90 урынлыҡ балалар баҡсаһы һәм 108 уҡыусыға иҫәпләнгән мәктәп. Шулай уҡ Белорет районының Үрге Әүжән һәм Баймаҡ районының Темәс ауылдарында модулле яңғын депоһын төҙөү күҙаллана.

✓ **Республиканың Транспорт һәм юл хужалығы буйынса дәүләт комитеты Өфөлә Зинин тимер юл аша сыға торған ерҙә күпер проектлауҙы һәм төҙөүҙе финанслау мәсьәләһен тикшерҙе.** Ҙур проекты 2018-2020 йылдарҙа тормошҡа ашырыу күҙаллана."Башинформ" агентлығы хәбәр иткәнсә, дүрт һыҙатлы юл проекты әҙер инде. Алдан урындағы халыҡ ҡала янының ғәйәт тиҙ үҫешеүен дәлилләп, тимер юл аша сыға торған ерҙә күпер һалыу үтенесе менән петиция төҙөнө. Зинин тимер юл аша сыға торған ер юлдың тығыҙ булыуы сәбәпле ул көндән-көн хәүефлерәк була бара. Нәҡ бында үлем осраҡтары менән йыш ҡына һәләкәттәр булып тора.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ҒАИЛӘ АБРУЙЛЫ БУЛҺА...



**Ғаиләнең абруйын күтәрмәй һәм ғаилә ҡиммәттәрен нығытмай тороп, балалы ғаиләләргә дәүләт ярҙамы саралары файҙаһыҙ буласаҡ. Ошо хаҡта Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов төбәк Хөкүмәте ултырышында белдерҙе.**

Төбәк етәксеһе статистика мәғлүмәттәрен килтерҙе, уға ярашлы, Башҡортостанда 1,2 миллионға яҡын ғаилә йәшәй, шул иҫәптән 18 йәшкәсә балалары булған 540 мең ғаилә. Уларҙан 340 мең ғаилә - бер, 164 мең - ике, 30 мең - өс, 7,5 мең дүрт һәм унан күберәк бала тәрбиәләй. Төбәктә 300 мең тулы булмаған ғаилә иҫәпләнә, уларҙан яңғыҙ әсәләр - 265 мең самаһы, яңғыҙ аталар - 30 мең тирәһе.

- Тотош ил буйынса ла һандар яҡынса шулайҙыр, моғайын. Быны донъя тәжрибәһе тип әйтергә мөмкин. Әммә уның бер ниндәй яҡшы яғы юҡ. Ошондай тулы булмаған һәр ғаилә - ул, әлбиттә, фажиғә, бала күңелендәге өҙгөләнеүҙәр, сабый тормошонда барлыҡҡа килгән ауырлыҡтар, - тип билдәләне Рөстәм Хәмитов.

- Балалар күп осраҡта атай тәрбиәһенән мәхрүм, улар матди яҡтан интегә, сөнки теләһә ҡайһы айырылышыу шунда уҡ бәләкәстәрҙең матди хәлен насарайтыуға килтерә. Ысынында иһә был ҡайһы берҙә беҙ иғтибар итмәгән һәм быны менән ысынлап шөғөлләнмәгән ғәйәт ҙур проблема. Шөғөлләнәсәкбеҙ.

бәр иттеләр ведомствола: көҙгөһөн рекордлы иген уңышы йыйып алыңды, әммә уға хаҡтар үҙ хаҡына тиерлек төштө. Тармаҡтың килемлелеген күтәреү өсөн яҙғыһын рапс, гәрсис, шипкән, етен сәсеүлектәре 2017 йылғы кимәлгә ҡарата 10 процентҡа арттырыласаҡ. Ҡуҙаҡлы культуралар (борсаҡ, әсе борсаҡ, соя һәм ноҡот борсағы) өлөшө 21 процентҡа күтәреләсәк. Ужым бөртөклө культуралар сәсеүлектәре яҡынса ике тапҡырға - 40 процентҡа артасаҡ, яҙғы культуралар 7 процентҡа аҙыраҡ буласаҡ. "Юғары килемле культуралар эске һәм тышҡы баҙарҙа ла һорау менән ҡулланыла. Уларға хаҡтар төшһә, уңышты малсылыҡҡа йүнәлтербеҙ һәм һөт, ит аша һеҙөмтә алырбыҙ. Ниһайәт, ҡуҙаҡлылар тупраҡтың торошона ыңғай йоғонто яһай", - тине июнь айында "Башинформ" агентлығында уҙған брифингта ауыл хужалығы министры һәм Башҡортостан Хөкүмәте вице-премьеры Илшат Фәзрахманов.

# АУЫЛ ХӘСТӘРЛЕКТӘРЕ



**Урал аръяғы аграрийҙары алдағы сәсеү кампанияһына әҙерлекте тикшерҙе. Уларға Силәбе өлкәһенән коллегалары ҡушылды. "2018 йылда табышлы культуралар" семинарын бөтәһе 60-тан ашыу предприятие һәм фермер хужалығы вәкилдәре тыңланы.**

Башҡортостандың Ауыл хужалығы министрлығы белгестәре юғары килемле техник (мал аҙығы һәм майлы) культураларҙы үҫтереү үҙенсәлектәре тураһында һөйләне. Былтырғы һөҙөмтәләр ауыл хужалығы тауарҙарын етештереүселәрҙе сәсеүлек майҙандары структураһын ҡайтанан ҡарарға мәжбүр итә, тип хә-

# МӘҘӘНИӘТ УСАҠТАРЫ ЯҢЫРТЫЛА

**"Бәләкәй Ватан мәҙәниәте" проектын тормошҡа ашырыу сиктәрендә Башҡортостанға федераль ҡаҙнанан 81 миллион һумдан ашыу аҡса бүленгән.**

Уның 47 миллионы - ауыл мәҙәниәт йорттарын яңыртыуға, 30 миллион самаһы - бәләкәй ҡалаларҙағы театрҙарға ярҙам итеүгә һәм 5 миллионы балалар һәм йәштәр өсөн театрҙарҙы үҫтереүгә йүнәлтелә. 2018 йылда Башҡортостан Республикаһында проектта 15 мәҙәниәт йорто, биш бәләкәй ҡалалар театры һәм өс балалар һәм йәштәр өсөн театр ҡатнаша. Партия проекты сиктәрендә ауыл мәҙәниәт йорттарын һәм 50 мендән кәм кеше йәшәгән тораҡ пункттарындағы мәҙәниәт йорттарын йүнәтеү һәм яңыртыу, театрҙарҙың матди-техник базаһын нығытыу, техник һәм технологик ҡорамалдар һатып алыу, бәләкәй ҡалалар һәм балалар һәм йәштәр өсөн театрҙарҙың репертуарын сифатлы итеп яңыртыу күҙаллана. "Берҙәм Рәсәй" партияһының "Бәләкәй Ватан мәҙәниәте" проектына урындағы халыҡ әүҙем йәлеп ителә, улар асыҡтан-асыҡ үҙ фекерен белдерә ала. Проекттың тағы ла бер бурысы - мәҙәниәт йорттарын һәм ауыл клубтарын яңыртыуға федераль, төбәк һәм урындағы бюджеттарҙан аҡса бүлеүҙе контролдә тотоу.

БЕЛМӘҺӘҢ - БЕЛ!

# МАЛАЙҘАР КҮБЕРӘК ТЫУА...



**Башҡортостанстат мәғлүмәттәре буйынса, республикала 2,2 миллион ҡатын-ҡыҙ (дөйөм халыҡтың 53 проценты) йәшәй. 1000 ир-атҡа уртаса алғанда 1134 гүзәл зат тура килә. Шул уҡ ваҡытта ир-ат һәм ҡатын-ҡыҙҙың йәш категорияһындағы нисбәт төрлөсә.**

Республикала элеккесә малайҙар күберәк тыуа (1000 малайға 940 ҡыҙ тура килә). 34 йәштән һуң ҡатын-ҡыҙҙың һаны арта. Олоғая барған һайын был айырма нығыраҡ һиҙелә бара. 70 йәштә инде ҡатын-ҡыҙҙар тиҫтер ир-егеттәренән 2,4 тапҡырға күберәк иҫәпләнә. Ҡатын-ҡыҙҙарҙың уртаса ғүмер оҙайлығы 76,8 йыл булһа, ир-аттарҙыҡы - 65,3.

Статистиктар билдәләүенсә, ҡатын-ҡыҙ республиканың хеҙмәт ресурстарының яртыһын тиерлек алып тора. Иҡтисадта эшләүселәрҙең 47 проценты - гүзәл зат. Эшләп йөрөүсе ҡатын-ҡыҙҙарҙың уртаса йәше - 40 йәш. 30 йәшкә тиклемге ҡатын-ҡыҙҙарҙың - 21,7, 30-55 йәшлектәрҙең - 68, 55 йәшлек һәм өлкәнерәктәрҙең 10,3 проценты эш менән мәшғүл.

Һаулыҡ һаҡлауҙа, социаль хеҙмәттәр күрһәтеүҙә, мәғарифта улар 84 процентты алып торһа, күмәртәләп һәм ваҡлап һатыу, ҡунаҡханалар, йәмәғәт туҡланыуы өлкәһендә - 64 процент.

## Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Йәй көнө "Һарытау һауа юлдары" компанияһы Өфөнән Ереванға тура рейстар аса. Билеттар һатыла башлаған да инде. "Өфө" халыҡ-ара аэропортынан Әрмәнстанға беренсе рейс шәмбе, 9 июндә, юллана. Осош киске сәғәт 11 тула 15 минутҡа билдәләнгән. Юлдағы ваҡыт - 3 сәғәт 20 минут. "Звартноц" аэропортынан самолет йәкшәмбе көндәрендә киске сәғәт 6 тула 10 минутта күтәрелә. Осоштар Ан-148 самолетында башҡарыла. Иҡе яҡҡа билет пассажирҙарға яҡынса 18 мең һумға төшә.

✓24 мартта киске 9-сы яртынан 10-сы яртыға тиклем донъяла бер сәғәткә утты һәм төп архитектура ҡомарткыларын яҡтыртыу ҡоролмаларын һүндереп торалар. Донъялағы "Ер сәғәте" тиган иң ҙур экологик акцияны Рәсәйҙең Тәбиғәт ресурстары һәм экология министрлығы һәм Мәскәү Хөкүмәте ярҙамында илдең Бөтә донъя ҡырағай тәбиғәт фонды ойоштора. Ул планетаның киләсәгенә вайымлылыҡ билдәһенә барыһын да бер сәғәткә утты һәм көнкүреш электр приборҙарын һүндереп торорға өндәй.

✓Баш ҡаланың Ростов урамы, 18-се һанлы йорт адресы буйынса Graviton спорт комплексы асылды. Өфөләр һәм баш ҡала ҡунаҡтары өсөн майҙаны 700 квадрат метрлыҡ Graviton спорт комплексында мини-футбол, кроссфит, һауа акробатикаһы, волейбол, баскетбол һәм башҡа спорт төрҙәре менән шөғөлләнеү майҙансыҡтары бар. Был үҙәкте ярыштар һәм күмәк кеше ҡатнашлығындағы саралар уҙғарыу өсөн файҙаланырға мөмкин. Тиҙҙән бында балалар өсөн спорт секцияларын асыу күҙаллана.

✓Башҡортостанда табипҡа яҙылыу өсөн берҙәм бушлай номер үҙгәрҙе. Ошо хаҡта республиканың Һаулыҡ һаҡлау министрлығынан хәбәр иттеләр. 20 февралдән төбәк бүлөмәһендә 09-383 урынына 13-01 һандарын йыйырға кәрәк. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, табипҡа электр поликлиника регистратураһында, doctor.bashkortostan.ru йәки gosuslugi.ru порталдары аша яҙылырға мөмкин.

✓Рәсәйҙә һәм Бойондороҡһоҙ Дәүләт Берләшмәһе илдәрендә туризм баҙарын тикшереү менән шөғөлләнгән "ТурСтат" аналитика агентлығы ил сәйәхәтселәре араһында иң танылған төбәктәр рейтингын баҫып сығарҙы. Башҡортостан Республикаһы унда 17-се урынды биләй. 2017 йылда төбәктә туристар ағымы 15 процентҡа артҡан һәм 2 миллион кешегә еткән.

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

**"Ҡатын-ҡыҙ - милләт әсәһе" II Республика конкурсының финалы йәмғиәттә ҡатын-ҡыҙҙарҙың абруйын күтәреүгә һәм уларға үҙҙәренең баһаһын аңларға, үҙ-үҙенә генә түгел, башҡаларға ла ышаныс өҫтәргә тағы бер этәргес булды. Был көндә сара уҙған Профсоюздар йорто ысын мәғәнәһендә һоҡланып ҡарап торорлоҡ сәскәле яланды хәтерләтте - йәш ҡыҙҙарҙан алып оло йәштәге инәйҙәргә тиклем һәр кемдән йылылыҡ, нәзәкәтлек, нур бөркөлдө.**



# ҠАТЫН-ҠЫҘ - МИЛЛӘТ ӘСӘҺЕ...



Тантананы асып, Башҡортостандың Башҡорт-ҡатын ҡыҙҙар йәмғиәте рәйесе, филология фәндәре кандидаты, проект авторы һәм уны тормошҡа ашырыусы Гөлнур Ҡолһарина конкурста ҡатнашыу өсөн 300 самаһы ғариза килеүен, республика район-ҡалаларынан ғына түгел, Рәсәй Федерацияһы төбәктәренән, хатта сит илдәрҙән дә теләк белдереүселәр булыуын билдәләне һәм бәйгенең төп маҡсатын асыҡлап китте: "Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары йәмғиәтенең концепцияһына әйләнгән, бер быуат элек арҙаҡлы башҡорт ҡыҙҙарының береһе, йәмәғәт эшмәкәре Рабиға Ҡушаеваның әйткән һүҙҙәре бөгөн дә актуаллеген юғалтмай. Ул заманында: "Ҡатын-ҡыҙ - милләт әсәһе. Милләтте тәрбиәләүсе лә, милләттең киләсәген билдәләүсе лә, уның бөгөнгө тормошонда ҙур роль уйнаусы ла ул - ҡатын-ҡыҙ", - тип әйтеп ҡалдырған. Шуға ла беҙ, ҡатын-ҡыҙҙарҙың йәмәғәт ойошмалары, йәштәребеҙҙе илһөйәр, телһөйәр, рухлы итеп тәрбиәләүҙе, үҙебеҙгә алмаш әҙерләүҙе бурыс итеп ҡуябыҙ..."

Икенсе тапҡыр ғына уҙғарылыуға ҡарамаҫтан, конкурсты барлыҡ милли йәмәғәт ойошмалары, шул иҫәптән "Берҙәм Рәсәй" партияһының төбәк бүлексәһе, БР Профсоюздар федерацияһы, БР рустары соборы, БР Татар ҡатын-ҡыҙҙары йәмғиәте, БР Мари ҡатын-ҡыҙҙары йәмғиәте, БР Халыҡтар Дуҫлығы йорто, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты күтәреп ала. Әлбиттә, еңеүселәр - тормоштары, хеҙмәттәре, фиҙаҡәрлектәре менән үҙҙәренең ошо исемдәргә лайыҡлы икәнен раҫлаған гүзәл заттар. Ләкин сараның үҙенсәлеге шунда булды - бер кем дә иғтибарҙан ситтә ҡалманы, барлыҡ ҡатнашыусылар ҙа Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары йәмғиәтенең Маҡтау ҡағыҙҙарын, ойоштороусыларҙың Рәхмәт хаттарын алып ҡыуанды. Ул ғына ла түгел, конкурсты үткәреүгә, ғөмүмән, ойошманың башҡа сараларын, съездарын, конференцияларын, түңәрәк ҡорҙарын ойоштороуға һәм уҙғарыуға ярҙам иткән ир аҫылдарына ла Маҡтау ҡағыҙҙары тапшырылды. Ни тиһәң дә, гүзәл зат ныҡлы терәккә, көслө яҡлауға һәм һәр саҡ ярҙам ҡулы һуҙырҙай, арҡа һөйәге булырҙай ир-азаматтарҙың булыуына мохтаж бит. Ә төрлө номинациялар буйынса еңеүселәр түбәндәгесә билдәләнде.

***"Ҡатын-ҡыҙ - әсә" номинацияһында:*** Рәмзиә Бәхтиева, башҡорт эстрадаһы йондоҙҙары әсәһе (Баймаҡ районы); Светлана Черных, һигеҙ бала, уңышлы спортсылар тәрбиәләүсе әсә (Туймазы районы); Гөлсәсәк Хөснөтдинова, өс бала әсәһе (Стәретамаҡ ҡалаһы); Зөлфиә Килдеғошова, "Тамыр" каналы йондоҙо Сәлимә Солтанморатова, өс баһадир малайҙың әсәһе (Өфө ҡалаһы); Мәрйәм Бураҡаева, билдәле яҙыусы һәм йәмәғәт эшмәкәре, 5 бала - билдәле яҙыусылар, сценарий авторҙары һәм режиссерҙар әсәһе (Өфө ҡалаһы).

***"Ҡатын-ҡыҙ - педагог" номинацияһында:*** Гүзәл Усманова (Көйөргәҙе районы); Рәйсә Күзбәкова (Өфө ҡалаһы); Ләйсән Усманова (Өфө ҡалаһы).

***"Ҡатын-ҡыҙ - ғалим" номинацияһында:*** Вилә Баймырҙина, педагогия фәндәре докторы (Стәрлетамаҡ ҡалаһы); Розалия Солтангәрәева, филология фәндәре докторы (Өфө ҡалаһы); Фирҙәүес Хисаметдинова, филология фәндәре докторы (Өфө ҡалаһы).

***"Ҡатын-ҡыҙ - оҫта" номинацияһында:*** Гүзәл Кәримова (Өфө ҡалаһы), Светлана Сәйетова (Әлшәй районы).

***"Ҡатын-ҡыҙ - оло быуын вәкиле" номинацияһында:*** Клара Абдуллина (Әбйәлил районы); Вәсилә Халиҡова (Стәрлитамаҡ ҡалаһы); Резедә Зарипова (Дүртөйлө районы); Альбина Исхаҡова (Өфө ҡалаһы); Ләлә Биишева (Өфө ҡалаһы); Азия Күсимова (Өфө ҡалаһы); Миңлевафа Зарипова (Балаҡатай районы); Роза Ғәббәсова (Архангел районы); Вәсилә Камалетдинова (Архангел районы).

***"Йәш йәмәғәтсе" номинацияһында:*** Гүзәлиә Тулыбаева (Баймаҡ районы); Шәүрә Йомағужина (Өфө ҡалаһы).

***"Бизнес-леди" номинацияһында:*** Алина Йосопова (Өфө ҡалаһы); Лилиә Хәмиҙуллина (Өфө ҡалаһы).

***"Ҡатын-ҡыҙ - мәҙәниәттә" номинацияһында:*** Инесса Миңнуллина (Ҡалтасы районы); Әнисә Зөбәйерова (Стәрлебаш районы); Рита Өмөтбаева (Өфө ҡалаһы).

***"Йыл өлгөһө" номинацияһында:*** Гөлфиә Янбаева - Башҡортостан Республикаһында ағинәйҙәр хәрәкәтен үҫтереүгә индергән өлөшө һәм этно саралар ойоштороғаны өсөн (Өфө ҡалаһы); Зәйтүнә Ниғәмәтйәнова - Башҡорт Википедияһын үҫтереүгә индергән өлөшө һәм Викиөләсәйҙәр төркөмөн ойоштороп, уны етәкләгәне өсөн (Өфө районы).

***"Ҡатын-ҡыҙ - лидер" номинацияһында:*** Гөлшат Әхмәтова (Стәрлетамаҡ ҡалаһы); Лариса Бауаддинова (Күгәрсен районы); Зоя Максимова (Ҡалтасы районы).

Еңеүселәрҙе һәм конкурс финалистарын башҡорт эстрадаһы йондоҙҙары Вилдан Яруллин, Зилиә Бәхтиева, скрипкасы Илшат Мөслимов, "Арғымаҡ" этно-рок төркөмө тәбрикләне. Ә конкурста ҡатнашыусылар матур тантананан һуң һәр ҡайһыһы ҡабат көндәлек эшмәкәрлегенә тотондо: һоҡландырғыс фиҙакәрлек!

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

МИНЕҢ ҠАТЫН-ҠЫҘЫМ



# МИНЕҢ СИКҺЕҘ ҒАЛӘМЕМ!

**...Өс-дүрт йәшлек сағымдан төн уртаһында үҙемдең иҙәндә уйнап ултырыуым, әсәйемдең өҫтәл лампаһы яҡтыһында дәфтәр тикшереүе хәтеремдә ҡалған. Уң яғында - тикшерелмәгәндәре, һулаҡайында - тикшерелгәндән бер өйөм. Шулай уҡ уның уҡытҡан мәктәбенә барғаным һәм уҡыусыларының минең ҡәҙерле кешемде хөрмәтләгәндәрен күреп һоҡланыу ҡатыш ғорурланыуым иҫемдә.**

Уҡытыусы, тәржемәсе, журналист, йәмәғәт эшмәкәре, Ишембайҙағы "Торатау" гәзитенең баш мөхәррире, Ишембай ҡала Советы депутаты һәм ҡала Советы рәйесенең урынбаҫары. Һәр ваҡыт - алдынғыларҙан, һәр саҡ хөрмәт-ихтирамға лайыҡ кеше булды әсәйем Хаят Йосопова. Хаҡлы ялда булыуына ҡарамаҫтан, әле лә, ҡул ҡаушырып ултырмай ул - Башҡортса Википедияға мәҡәләләр яҙа.

Эшенә нисек кенә башкөлләй суммаһын, ул бер ваҡытта ла үҙенең ҡатын-ҡыҙ тәбиғәтен юғалтманы. Беҙҙең өсөн һәр саҡ яратҡан әсәй, атайыбыҙға һөйөклө ҡатын булды. Атайым менән бигерәк иш килгән улар - береһен береһенән айырып телгә лә алып булмай. Шулай ҙа милләтебеҙҙә әсәй урыны башҡа: бәйғәмбәребеҙ Мөхәммәттән бер әҙәм: "Кем миңә иң яҡын кеше?" - тип һорағас, ул: "Әсәйең", - тигән һәм был яуапты бер-бер артлы өс тапҡыр ҡабатлаған. Юҡҡа ғына "Ожмах әсәйҙәрҙең аяҡ аҫтында" тимәгәндәр. Бөгөн әсәйем минеке һәм ҡустым менән һеңлемдеке генә түгел, балаларымдың, башҡа ейән-ейәнсәрҙәренең ҡартәсәһе, ике килененең һәм бер кейәүенең ҡәйнәһе. Ҡыҙым уның менән Ишембай урамдары буйлап йөрөп килһә, "Ҡартәсәйҙең ҡалай таныш-белештәре күп!" тип ҡыуанып ҡайта. Кәләшем унан беҙҙең ғаиләлә өйрәнелгән аш-һыуҙар, тәм-том серҙәрен отоп ала. Әсәйем, кәрәккәндә, тормош тәжрибәһенә таянып, урынлы кәңәштәрен дә бирә.

Әсәйем тураһында һөйләгәндә, уға был матур сифаттарҙы һалған һәм өйрәткән ҡартәсәй-өләсәйҙәремде лә йылы хәтирәләр менән иҫкә төшөрәм. Әсәмдең әсәһе - өләсәйем Хәжәр Ишембаева аҫаба Юрматы байҙары тоҡомонан. Ул ижтимағи тормошта әүҙем ҡатнашҡан, Иҫке Ишембайҙың "7-се ноябрь" колхозын ойоштороусыларҙың береһе булған, Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән бүләкләнгән һәм СССР Колхозсыларының беренсе съезы делегаты итеп һайланып, Надежда Крупская менән ике тапҡыр осрашып һөйләшкән.

Әсәйемдең ҡәйнәһе - ҡартәсәйем Шәһәрбостан Ишбирҙина Баймаҡ районының бәләкәй генә Әмин ауылында 40 йыл уҡытыусы булып эшләгән дәүерендә күпме малай-ҡыҙҙы оло юлға сығарған, тәрбиә биргән. Һәр ваҡыт комсомол секретары, депутат булып, райондың вәкәләтле органдарында ағза булып торған.

Бала ваҡытымдан һоҡланғанға, уларҙың ҡурсыуында, мәрхәмәтендә йәшәгәнгә күрә, мин ҡатын-ҡыҙҙы күңеленә бөтөн донъя һыйған Ғаләм менән сағыштырыр инем. Үҙемдең дә орсоҡтай ҡыҙым үҫә, киләсәктә уның да, ҡартәсәһенең, әсәһенең тик матур һәм ыңғай сифаттарын ғына үҙендә туплап, кемдеңдер сикһеҙ Ғаләме булыуын теләйем.

**Ғәзиз ЙОСОПОВ.**
**Өфө ҡалаһы.**

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Йөрәк

❖ Йөрәгем сирләмәһен, тиһәң, уны калий һәм магний менән туҡландыр. Стаканға бүлмә температураһындағы һыу ҡойоп, 1 балғалаҡ алма һеркәһе һәм 2 балғалаҡ бал ҡушып болғатырға. Шуны иртәнсәк ас ҡарынға эсергә. Ярты сәғәттән ашарға мөмкин. Был шифалы һыу йөрәк-ҡан тамырҙары эшмәкәрлеген дә, нервыларҙы ла дауалай, холестеринды ла түбәнәйтә, аш эшкәртеүҙе лә яйға һала.

### Етен орлоғо

❖ Ашыҡ-бошоҡ ашау, тәмәке тартыу кеүек ғәҙәттәр ашҡаҙанда оҙайлы гастрит барлыҡҡа килеүгә этәрә. Быяла банкаға 1 ҡалаҡ етен орлоғон һалып, өҫтөнә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, һыу ҡуйырғансы 20 минут тирәһе болғатырға, иҙгеләргә. Шуны етен орлоҡтары менән бергә эсергә. Ашҡаҙандағы ауыртыу тиҙ үтә, тимәк, ашҡаҙан тыныслана.

### Ҡыҙыл сәй

❖ Ҡан баҫымы юғары булғанда ҡыҙыл сәйҙе һыуытып эсергә кәрәк. Ауылдарҙа күренгәне юҡ, ҡала кибеттәрендә каркаде тигән сәй бар, уны судан раузаһы ла тиҙәр. Ошо сәйҙе эсергә кәрәк.

### Баш ауыртыуы

❖ Тормош бит, төрлө хәлдәр була, уй-хәсрәттән баш ныҡ итеп ауырта башлай. Шул мәлдә үләндәр ярҙамға килә. 4 бөртөк ҡомалаҡ тубырсығын, 3 ваҡланған бөтнөк япрағын, 4 киҫәк ваҡланған валериан тамырын, 3 бөртөк дарыухана ромашкаһын алырға ла, өҫтөнә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, 30 минут тирәһе төнәткәс, һөҙөргә. Көнөнә 3 мәртәбә, ашарҙан ярты сәғәт алда яртышар стакан эсергә. 4-5 көн яйлап эсергә һәм 2 аҙна ял яһарға. Артабан тәнәфестәрҙе 15-20 көнгә оҙайтырға. Әгәр баш ауыртыуы бөтһә, курсты улай оҙаҡ дауам итмәһәң дә була.

### Аҡ шыршы майы

❖ Көслө йүткергәндә пипетка менән телдең төбөнә 3-5 тамсы май тамыҙырға. Дауаланыу курсы 7 көнгә тиклем.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

***✓ Уҡытыусым менән мин бөгөн дә бәйләнеште өҙмәйем, һаман да кәңәштәренә мохтаж тоям үҙемде. Юл төшкәндә гел үҙенә саҡыра, шуға ла бер туған апайым йортона барғандай, махсус үҙенә төбәп бара ла төшәм.***

*ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...*



# МӨХӘММӘТ БӘЙҒӘМБӘР

## Мосолмандарҙың Мәккәгә барғаны

...Мәҙинәгә ҡайтып барғанда Мөхәммәт бәйғәмбәр өммәттәштәренә иң ҙур яңылыҡ хәбәр итә. Оҙаҡламай улар Хәйбәр оазисына һуғыш менән барасаҡ. Бында уның менән бергә ғибәҙәт ҡылырға килеүселәр генә ҡатнашасаҡ, башҡа береһен дә үҙҙәре менән алмаясаҡтар. Был хәбәрҙән һуң мосолмандарҙың күңеле күтәрелә. Сөнки Хәйбәр оазисы, беренсенән, ҡөрәйштәрҙән ҡала мосолмандарҙың иң яман дошмандарының береһе була, күсмә ырыуҙарҙы Мөхәммәт бәйғәмбәргә ҡаршы ҡотортоп, ҡорал менән тәьмин итә улар; икенсенән, Хәйбәр - иң бай оазистарҙың береһе була, походта ҡатнашыусы һәр яугир дан ҡаҙанасаҡ, бынан тыш, иҫ китмәле байлыҡ алып ҡайтасағы көн кеүек асыҡ була.

Ҡөрәйштәр Мәккә янындағы һуғыштан ҡурҡып, Хәйбәрҙәге союздашына хыянат итеп, Мөхәммәт бәйғәмбәр уларға ҡаршы һуғыш башлаған осраҡта ҡыҫылмаҫҡа һүҙ биргән булып сыға. Килешеүҙең был өлөшө ҡағыҙға теркәлмәй.

Мәҙинәгә ҡайтыу менән походҡа әҙерлек башлана. Мөхәммәт бәйғәмбәр, һүҙендә тороп, Хәйбәр оазисына үҙе менән бергә Мәккәгә барыусыларҙы ғына ала. Хәйбәр оазисында бик күп кеше йәшәй. Ләкин ундағы эшһөйәр халыҡ байтаҡ һуғыштарҙа сыныҡҡан мосолман ғәскәренә ҡаршы тора алмай. Ҡаршылыҡ күрһәткән ҡәлғәләр көс менән алына, кешеләре ҡоллоҡҡа һатыла. Ҡаршылыҡ күрһәтмәгән ҡәлғәләрҙең халҡына оазисты ҡалдырып китергә мөмкинлек бирелә. Мосолмандарға ҡаршы иң оҙағы Хәйбәрҙең үҙәк ҡәлғәһе ҡаршылаша. Ләкин уныһын да мосолмандар тик ун көн эсендә яулап ала. Был һуғышта мосолмандар егерме биш кенә кешеһен юғалта. Хәйбәр оазисынан төньяҡтараҡ урынлашҡан һәм ҡөрәйштәр менән бергә мосолмандарға ҡаршы көрәш алып барған Фудак оазисынан илселәр килеп етә. Оазистарына теймәүҙе үтенәләр, шуның өсөн йыл һайын табылған уңыштың яртыһын биреп торорға вәғәҙә итәләр. Мөхәммәт бәйғәмбәр риза була.

Һуғыш тамамлана. Табыш иҫ китмәле ҙур була. Бөтөн оазис Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең яугирҙарына тороп ҡала. Ләкин яу һөнәренең бар нескәлектәрен өйрәнгән, яуҙарҙа сыныҡҡан был яугирҙар ер эштәре менән шөғөлләнергә теләмәй. Быны оазисты ташлап киткән нәҫелдәрҙең аҡһаҡалдары ла аңлай. Шуға ла улар Мөхәммәт бәйғәмбәргә килеп, Фудак оазисы шарттарында халыҡты кире ҡайтарырға рөхсәт һорай. Мөхәммәт бәйғәмбәр ризалаша.

Хәйбәр халҡын еңеү тантанаһына оло мәжлес ойошторола. Был мәжлестә ҡол ҡатындарҙың береһе, үлтерелгән туғандары өсөн үс алып, Мөхәммәт бәйғәмбәрҙе ағыулап маташа. Унық алдына ағыу һалынған һарыҡ ите килтереп ултырта. Мөхәммәт бәйғәмбәр итте ауыҙына ҡабып сәйнәй бирә лә, ят тәм тойоп, кире төкөрә. Янында ултырған Бишра ибн әл-Барый исемле мосолман иттең икенсе бер киҫәген йотоп өлгөрә һәм шунда уҡ йән бирә.

Мөхәммәт бәйғәмбәр үлемдән ҡотола. Тик бынан һуң унық һаулығы ҡаҡшап ҡала һәм хәле яйлап ҡына насарая башлай.

**(Дауамы бар).**

*МИНЕҢ ҠАТЫН-ҠЫҘЫМ*

# КҮҢЕЛ ТҮРЕМДӘГЕ ГӨЛЛӘМӘМ...



**Ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙҙы мин тормош түребеҙҙә балҡып, күҙ яуын алып торған сәскә гөлләмәһенә оҡшатам. Төрлөһө бар унда: алы-ҡыҙылы, зәңгәре, һарыһы... Баҙрап торған раузалары, көйәҙ лилиәләре, баҫалҡы ромашкалары, оялсан миләүшәләре... Хас та янныбыҙҙа йөрөгән, ғүмер буйы аралашҡан, бергә эшләгән йә тормош юлдашы итеп һайлаған гүзәлдәребеҙ инде!**

Әҙәм балаһы яҡшыға ла, матурға ла тиҙ өйрәнә, тиҙәр. Беҙ, ир-егеттәр, тормошта йыш ҡына ана шул гүзәллекте күреп, баһалап, сәскәгөлдәребеҙҙе гел генә балҡытып торорға онотоп та киткеләйбеҙ, буғай. Шуға ла әле бына тәүге яҙ байрамы - ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ көнө уңайынан уларҙың барсаһына ла изге теләктәремде еткерергә форсат тыуыуына шатланам. Беренсе кластан алып Баймаҡ интернат-мәктәбендә тәрбиәләндем, шунлыҡтан, был көндө икенсе әсәйемә әүерелгән ҡәҙерле уҡытыусыларым, тәрбиәселәрем, башҡа хеҙмәткәр апайҙар күҙ алдыма килеп баҫа. Ғөмүмән, үткән быуаттың беҙ уҡыған 60- 70-се йылдарында үҙ эштәрен яҡшы белгән, кешелекле, мәрхәмәтле апайҙар эшләй торғайны был уҡыу йортонда. Минең шуҡлыҡтарға ла түҙгәс, иң сабыр, изге күңелле ләрҙән булған улар! Шуҡлыҡ, тигәнем дә балаларса берҡатлылыҡ, тик тормаҫлыҡ ҡына ине. Ә яман ҡылыҡтар, аңлы рәүештә тәртип боҙоу тигән нәмә, ғөмүмән, юҡ ине интернатта. Тәрбиә кимәле лә юғары булған, тимәк. Йәнә лә беҙҙе кеше итергә, белем бирергә йән атып, көнө-төнө тиерлек эргәбеҙҙә булған апайҙарыбыҙ абруй һәм дә ихтирам менән файҙаланған, шуға ла беҙ, малайҙар, мөмкин тиклем уларҙың кәйефен ҡурсылағанбыҙ. Мәҫәлән, шул йылдарҙа ла, аҙаҡ та оҙаҡ йылдар уҡыу-уҡытыу буйынса директор урынбаҫары булып эшләп, хаҡлы ялға киткән Рәүфә Харрас ҡыҙы Бикбирҙинаны нисек тыңламайһың инде! Һәр хәлдә, ул алып барған география дәресен көтөп ала инек. Ябай, кеселекле, шул уҡ ваҡытта ҡәтғи һүҙле, ғәҙел был уҡытыусым менән мин бөгөн дә бәйләнеште өҙмәйем, һаман да кәңәштәренә мохтаж тоям үҙемде. Юл төшкәндә гел үҙенә саҡыра, шуға ла ҡатыным менән бер туған апайым йортона барғандай, махсус үҙенә төбәп бара ла төшәбеҙ, бик шатлана Рәүфә апай, һөйләшеп һүҙҙәр бөтмәй. Унық һеңлеһе Рима апай шулай уҡ беҙҙә тәрбиәсе булды, әсәләре Хәйбә инәй ҙә ғүмере буйы интернатта эшләне: өр-яңы кейем склады мөдире булып, беҙҙе сынъяһау итеп кейендереп ебәрер ине. Шәп саҡтары булған интернаттың!

Башҡорт теленән - Ғәрифә апай, рус теленән - Мәүжиҙә һәм Зәкиә апайҙар, химия, биологиянан - Гөлсара апай, математика-геометриянан - Лотфиямал апайҙарҙың дәрестәре әле лә иҫтә. Ысын мәғәнәһендә педагог-профессионалдар ҡулында уҡыу бәхете тейгәнен, ҡыҙғаныҫҡа, һуңлабыраҡ аңлағанбыҙ икән, тип тә ҡуям. Ә ашханабыҙ хужабикәһе Хәлиҙә апайҙы нисек онотаһың! Уҫалыраҡ булһа ла, ғәҙел, нескә күңелле ине. Ата-әсәһенән, өйөнән айырылып, ошонда уҡып йөрөгән балаларҙы бик йәлләй, ярата торғайны. Бешергәне телеңде йоторлоҡ, сифатлы. Беҙҙең ашағанды үҙе сығып ҡарап ултырырға яратты, тәрилкәндә ризыҡ ҡалдырһаң, әсәйҙәрсә шелтәләп тә алыр ине. Ә аҡ халатлы, оҙон толомло, фәрештәләй сибәр фельдшерыбыҙ Хәлисә апайҙы кемебеҙ генә хәтерләмәйҙер! Ошо исемлеккә бергә уҡыған класташ ҡыҙҙарҙы ла өҫтәһәм, әлеге әйткән гөлләмә килә лә сыға инде! Ә был гөлләмәлә иң матуры, иң наҙлыһы - ҡатыным Венера булыр. Сибәрлеге өҫтөнә алсаҡлығы, уңғанлығы менән яуланы ул күңелемде заманында. Әле лә шулай булып ҡала. Өс ул тәрбиәләп үҫтереп, башлы-күҙле иттек. Бергә күтәрешһәң, тормош йөгө лә еңелерәк, осрап торған хәсрәттәргә лә бирешмәйһең. Шуға күрә барлыҡ ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙҙы ла байрам менән тәбрикләп, тормоштарында гел ыңғайға көйләнеш, матурлыҡ, сәләмәтлек теләйем.

**Әхмәтйән НАЗАРОВ,**
**Баймаҡ интернат-мәктәбенең 1970 йылғы сығарылыш уҡыусыһы.**
**Учалы районы.**

*ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...*



# ИРКӘ ҺҮҘЕҢ ЙӘЛЛӘМӘСЕ...

**"Башҡорт атын маҡтар, этен маҡтар, ҡатынын маҡтамаҫ" тиһәләр ҙә, ғәзиз ҡатыныңдан йән аҙығы булған йылы һүҙҙе йәлләүҙе аңламайым мин. Ҡатын-ҡыҙҙың тәбиғәте менән дә үтә лә нескә һәм хисле булыуын иҫбатлап тороу кәрәкмәйҙер, улар бер һүҙҙән, бер иркә ҡараштан сәскә ата, унан шул яҡшы кәйефе менән бөтөн өй эсен бәхетле итә ала торған сихри заттар бит.**

Яҙмыштар ҡыҙыҡ бит ул, боронғолар әйтмешләй, бер-береһенә яҙған кешеләр ниндәй генә юлдарҙан киткәндә лә, уларҙың һуҡмағы үҙ белдеге менән килеп киҫешә. Беҙҙең дә шулай булды. Кәләшем Зөһрә Мәғәсүм ҡыҙы Өфөлә Республика дауаханаһында минең ике туған апайым менән эшләй. Апайым операция шәфҡәт туташы булған был ҡыҙҙы оҡшатып, килен итергә хыяллана. Хәл белергә һуғылған мине лә, әйҙә бер уңған ҡыҙ менән таныштырам, тип тартҡылай. Мин баш тартам. Үҙемә кәләште үҙем һайлап аласаҡмын, тип эре һөйләшәм. Шулай бер районға ҡайтырға сыҡтым. Автобусҡа билеттар юҡ, ваҡыт һуң. Һуңғы сиктә ҡиммәт хаҡҡа бер шәхси автобусҡа саҡ эләктем. Шунда ингәс тә бер ҡыҙҙы аңғарып ҡалдым, быға күҙ ҡырыйы менән ҡарап бара торғас, тамам ғашиҡ булдым. Әгәр башҡа берәйһе ошондай хәлде һөйләһә, моғайын, көлөр инем. Ултыра торғас, был ҡыҙҙың телефонына шылтыраттылар. Таныш исем, таныш адрес хаҡында һөйләшә былар. Ҡыйыулыҡ табып, һүҙ ҡуштым. Һөйләшеп киттек. Баҡһаң, осраҡлы рәүештә икебеҙ бер адресҡа, әлеге апайыбыҙға китеп барабыҙ икән. Апайым күптән таныштырам тигән шәфҡәт туташы булып сыҡты был.

Хәҙер инде 14 йыл шул ҡыҙ минең һөйөклө ҡатыным, балаларымдың әсәһе. Ярайһы ғына йәшәп ташлаған кеүек булһаҡ та, мин уға тап шул саҡтағыса яратҡан күҙҙәр менән бағам. Миңә ундағы бар нәмә лә оҡшай, үҙ, хатта бер аҙ пырылдап ҡыҙып китә торған яғы ла бик яҡын. Тура һүҙле булыуы, ярҙамсыллығы, туғандарымды тартып тороуы, өлгөрлөгө, яҡшы әсәй була белеүе - барыһы ла унық асылын биҙәп тороусы матур яҡтары ғына. Ҡалала үҫһә лә, ауыл ҡатыны ролендә гөрләтеп донъя көтә. Килен булып төшкән йылды уҡ ҡул салғыһы менән ҡолас ташлап бесән сабып аптыратҡайны барыбыҙҙы ла. Бөгөн дә ул ҡар өҫтөндә ҡаҙан ҡайнатыр, итәк тултырып балалар үҫтерер, иренә терәк-таяныс була белер башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙҙың бер өлгөһө булып тора.

Ҡатыныңа ҡайырылып ҡара әле һин дә, дуҫ. Ул да һинән ошондай иғтибар көтәлер бит. Әйт иркә һүҙҙәреңде, йәлләмә, һәм өйөгөҙгә бәхет килер.

**Фәнил БҮЛӘКОВ.**
**Учалы районы Имәнғол ауылы.**

ЙОЛАҢДАН ЙҮН ТАП!

# ЙӘЙ ТАШЫ ҺӘМ...

## ямғыр саҡырыу йолалары хаҡында

Оло йәштәгеләр араһында әлегә тиклем теләк теләү йолаһына ғына түгел, шул йолаға бәйле йәй ташының көсөнә ышаныу ҙа йәшәп килә. Сибайҙа нәшер ителгән "Атайсал" гәзитендә шул ҡалала йәшәүсе А. Моталовтың Иҫке Сибай ауылынан алыҫ түгел ерҙәге яңғыҙ таш, боронғолар әйтеүенсә, "сәнскән таш"-тың фотоһы менән уның хаҡында мәҡәләһе баҫылып сыҡҡайны. Автор унда үткән быуаттың 50-се йылдарында Сибай ҡалаһының элекке урынында әлеге "сәнскән таш"тарҙың бик күп булыуы, хатта уларҙың аллея рәүешендә теҙелеп киткәл мәлен бәйән итә. Үкенескә күрә, был ата-бабаларыбыҙҙан ҡалған таш ҡомарткыларҙы таусылар ҡалаһы Сибайҙы төҙөгән сакта ҡеүәтле техника менән ҡырағайҙарса аҡтарып алып, емереп бөткәндәр. Аллеяларҙың береһе тау битләүендә, әлеге Горный урамындағы магазин ултырған урында булған. Әлеге мәҡәлә эҙе буйлап Иҫке Сибай ауылында йәшәгән ҡарттарҙан һорашып сыҡҡас, шул асыҡланды: элек башҡорттар баяғы "сәнскән таш" янында теләк теләү йолаһы үткәрер булғандар. Ҡөрьән уҡып, Хоҙайҙан ямғыр һорап, шул ташҡа һыу һибеп, үҙҙәре лә бер-береһен һыу менән ҡойондорошҡандан һуң, ҡорбан салып, ит бешереп, бер-береһен һыйлағандар.

Яҙыусы Лира Яҡшыбаеваның билдәле дин әһеле, күрәҙәсе һәм халыҡ табибы Мөжәүир хәҙрәт хаҡындағы яҙмаларында ла йәй ташына ҡағылышлы эпизод бар. Бер йылы шулай Сибай ҡалаһында ғына түгел, тотош өлкәлә ай буйы туктамай ямғыр яуа. Быйың сәбәбен Сибай ҡалаһындағы ниндәйҙер объектты төҙөгәндә йәй таштарының береһе урынынан ҡуҙғатылған, тип фаразлай халыҡ. Мөжәүир хәҙрәт һәм Сибайҙың өлкән кешеләре кәңәше буйынса, ҙур ғына бер таш кире урынына ҡайтарып ҡуйыла һәм шул ғәмәлдә ҡылғандан һуң ямғыр яуыуҙан туктай, тиеләр.

"Киске Өфө" гәзитендә сығышы менән Баймаҡ районынан булған философия фәндәре докторы, профессор Самат Мөхәмәтйәнов Баҡмал исемле өләсәһенең 1919 йылда йәй ташын табып алыуы һәм уға бәйле артабанғы



ваҡиғалар тураһында бик матур һәм мауыҡып уҡырлыҡ иҫтәлектәрен баҫтырып сығарғайны. Баҡмал өләсәй һөйләүенсә, һыуға барғанында ул Саҡмағош тип аталған йылғала төрлө төҫтәр менән емелдәп ағып килгән йәшкелт-аҡ бер ташты тотоп ала. Шул саҡ ҡапыл ғәрәсәт сығып, көслө итеп ямғыр ҡоя башлай һәм туктамай ай буйы яуа ла яуа. Йәй ташын тотоп алыуын ишетеп ҡалған оло ауылдаштары Баҡмал инәйгә (ул ваҡытта йәш кенә киленгә) уны кире урынына илтеп һалырға ҡушалар. Ташты кире илтеп, йылға һыуына төшөрөү менән ямғыр ҙа туктай.

Элегерәк Ейәнсура районына ҡараған, 1960 йылдарҙа Ырымбур өлкәһе Ҡыуандыҡ районына күсерелгән Баҡатар тигән башҡорт ауылы кешеһе Ф. Илбулдиндың йәй ташына бәйле башҡорттарҙың ырым-йолалары хаҡында иҫтәлектәре "Башҡортостан" гәзитендә донъя күргәйне. Ошонда уҡ авторҙың Баҡатар ауылы янындағы тау башында табылған йәй ташының фотоһүрәте лә баҫылды. Ф. Илбулдиндың һөйләүе буйынса, элек үҫерган ырыуы башҡорттары ошо таш ярҙамында ямғыр яуҙырыр йәки оҙаҡҡа һуҙылған яуынды туктатыр булған. Быйың өсөн улар ҙур ҡаҙанға һыу тултырып, унда йәй ташын төшөргән һәм эргәһенә усаҡ яғып, Хоҙайҙан ямғыр теләгән йәиһә уны туктатыуҙы һорағын.

Бер ваҡыт "Киске Өфө"-лә Күгәрсен районынан Миңнулла Әлимғолов Шәмиғол хәлфә тураһындағы яҙмаларын баҫтырғанйы һәм шунда бер ваҡиғаны тасуирлап, ғәҙәти булмағанырак рәүештәге йәй ташының фотоһүрәтен дә баҫтырғайны. М. Әлимғоловҡа ул таш ҡыҙыҡ ҡына килеп эләгә: көслө ел һәм ҡойма ямғыр аҫтында тороп ҡалған егет арҡаһына ниҙер килеп бәрелеүҙән әйләнеп ҡараһа, ҙур булмаған сәйер формалағы бер ташты күрә. Эргәһендә килгән изге әүлиә Шәмиғол хәлфә был таштың ябай ғына түгеллеген, бөтөн эштәрҙә лә уңыш килтерер тылсымы барлығын һәм уның Аллаһ тарафынан ебәрелгәнен, Миңнулланың ташты үҙендә ҡәҙерләп һаҡларға тейешлеген аңлата. Был осраҡта ла таштың ямғыр, һыу менән бәйле булыуын күрәбеҙ.

Үҙемә иһә этнографик экспедицияла йөрөгәндә табын ырыуы башҡорттары йәшәгән Ғафури районының Ерек ауылынан алыҫ түгел Арҡа тип йөрөтөлгән бер урында ошонда йәшәгән башҡорттарҙың күрһәтеүе буйынса ике йәй ташын фотоға төшөрөп алырға тура килде. Бындағы халыҡтың һөйләүе буйынса, йәй ҡоро килгән йылдарҙа өлкән йәштәгеләр йыйылып, ошо таштар янына барып, уларҙы таҙартып, йыуып, өҫтөнә һыу ҡойоп, һары май һылап, Хоҙайҙан ямғыр һорар булғандар. Был таштарға сәбәпһеҙҙән тейергә, уларҙы урынынан ҡуҙғатырға ярамай, киреһенсә, уларҙы һаҡлап, ҡараштырып торорға кәрәк, тип һөйләнә боронғоно белгән, ихтирам иткән Ғафури районының табын башҡорттары.

Йәй ташы хаҡында башҡорттарҙың ырым-ышаныуҙары Абдулҡадир Инан теркәп ҡалдырған башҡа төрки телле халыҡтарҙың шундай уҡ йолаларынан бигүк айырылмай, тиергә була. Төркиҙәрҙең ямғыр яуҙырыу көсөнә эйә булған йәй ташы тураһында X-XI быуаттар арауығында Урта Азияла йәшәгән билдәле ғалим әл Бируни (973-1048): "Бер төрки миңә ямғыр яуҙыра торған таш килтереп бирҙе. Мин уны ҡабул итеп алырмын һәм ҡыуанырмын, тип уйлағандыр, күрәһең..." - тип яҙып ҡалдырған.

Боронғо төркиҙәрҙәге ямғыр яуҙырыу көсөнә эйә булған Йәй ташы хаҡындағы мәғлүмәттәр Урта быуатта йәшәгән Көнсығыш авторы Ибн әл-Факиһ-әл-Хәмәҙәни хеҙмәттәрендә лә урын алған. Был автор: "Төрки илдәренең бер мөғжизәһе - ямғыр, ҡар, боҙ йәки үҙҙәре ни теләй, шуны яуҙыра ала торған таштары. Был таштар уларҙа ҙур әһәмиәткә эйә һәм киң таралған", - тип яҙып ҡалдырған.

Төрки телле халыҡтарҙың барыһында ла йәй ташы, бер аҙ фонетик айырымлыҡтарын иҫәпкә алмағанда, бер үк атама менән "дьада - яда - сата - джайташ - йәй таш" тип атала.

С.Е. Малов, В.Н. Басилов кеүек билдәле совет ғалимдары, "йәй таш" һүҙенең "йәй", "дьята", "яҙа" өлөшө төрки телдәренә иран телдәре төркөмөнә ҡараған Авеста телендәге "даьда" ("тылсым" "күрәҙәлек") һүҙенә барып тоташа, тигән ҡараштa. Быйың менән килешергә лә булыр ине, әммә төрки теле халыҡтарҙа "йәй таш" тураһында әлегәсә һаҡланған мәғлүмәттәр, уларҙың оҡшашлығы был һүҙе төрки телдәренән үҙенән аңлатырға кәрәктер, тигән фекер тыуҙыра. Мәҫәлән, башҡорт телендә, "яҙа", "яҙылыу" һүҙҙәре "асылыу, йәйелеү" мәғәнәһен бирә. Башҡорт телендәге миҙгелде аңлатҡан "Йәй" һүҙе үҙе лә ошо "йәйелеү", "киңәйеү", "асылыу" менән бәйлелер. Башҡорттар әле булһа көндөң аяҙайтып китеүен "көн яҙылып китте", тиҙәр, йәғни был һүҙбәйләнеште "көн асылып китте" тигән мәғәнәлә ҡулланалар. Ошо йәһәттән төрлө төрки телдәрендә таралған "дьата, яда, сата, йәй" терминдарының көн торошо менән бәйле булыуы, уның менән идара итергә тырышып ҡулланылыуын күрергә булалыр.

Шулай итеп, был ямғыр яуҙырыу менән бәйле башҡарылған йоланың һәм уны үтәгәндә ҡулланылған "йәй" ("яҙа") ташына бәйле инаныуҙары бөтөн төрки халыҡтары араһында ла әлегәсә тотороҡло йәшәп килеүе был йоланың, инаныуҙарҙың дөйөм төрки тамырҙан булыуына бер ишаралыр кеүек.

**Зәкирйән ӘМИНЕВ, этнограф.**

**(Аҙағы. Башы 9-сы һанда).**

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



Йәдкәр БӘШИРОВ

# БӨЙӨК БАШҠОРТ ИЛЕ

## Башҡорт-болғар концепцияһы

Исемдәре беҙҙең көндәргә тиклем килеп еткән ҡайһы бер шәхестәр башҡорттарҙың да, болғарҙарҙың да рухи мираҫын тәшкил итә. Уларҙың береһе - башҡорт Яҡуп ибн Ноғман әл-Болғари, Биләр ҡалаһында йәшәп,1165 йылда вафат булған. Уның "Болғар тарихы" тигән хеҙмәте Истанбулда 1942 йылда нәшер ителгән. Ислам энциклопедияһына индерелгән. "Киссаи Йософ" әҫәре авторы, әйле башҡорт ырыуы вәкиле Ҡол Ғәли 1172 йылда тыуған, уның ата-әсәһе улдары йәшәгән Биләр башҡорт ҡалаһына йәшәргә килә. Ҡол Ғәли 1242 йылда 70 йәшендә вафат була. Ҡол Ғәлиҙән шәжәрәһен уның варисы, мулла Тажетдин Ялсығол (1768-1838) төҙөй. Унда беҙ түбәндәге юлдарҙы уҡыйбыҙ: Ҡол Ғәлиҙән Мирғәли тыуа. Мирғәлиҙән Миршарийәр, унан Мирсәйет тыуа, уның заманында Мирсәйеттән дә ғилемлерәк һәм изге эштәр башҡарыусы кеше булмай. Ул белмәгән фән ҡалманы, һәр береһенә үҙенең тәфсирен яҙҙы. Унан Нурсәйет тыуҙы, Нурсәйет егерме өс йыл хан булып торҙо... Артабан уның шәжәрәһен мулла Ялсығол дауам итә, ул Әй йылғаһы буйында йәшәй. Башҡорт шағиры һәм ғалимы Тажетдин Ялсығол әл Башҡорди үҙен "болғарлы иштәк" тип атаған, йәғни уның ата-бабалары Волга буйы болғарҙары һаналып, үҙҙәрен иштәк тип йөрөткән. Тажетдин мулланан XVIII быуат аҙағы- XIX быуат башы тарихсыһы Баһауетдин хәҙрәт тыуған.

Болғар һәм Башҡорт иле төрки телле халыҡтар донъяһында лайыҡлы урынды билгән күренекле шәхестәр тыуҙырған. Уларҙың араһында атаҡлы башҡорт мәғрифәтсеһе, шәрҡтә өйрәнеүсе ғалим, дин белгесе Ризаитдин Фәхретдин (1859-1936) бар. Ул көнсығыш телдәрен (ғәрәп, төрөк, фарсы) һәм урыҫ телен яҡшы белгән. Һамар губернаһының Бөгөлмә өйәҙендә тыуа, һуңынан Өфөгә йәшәргә килеп, Ырымбур мосолман дини идаралығында хеҙмәт итә. 1906-1918 йылдарҙа "Ваҡыт" гәзитендә эшләй, артабан "Шура" журналында (Ырымбур) баш мөхәррир урынбаҫары булып тора. 1922 йылда Эске Рәсәй һәм Себер мосолмандарының Үҙәк диниә идаралығы мөфтөйө булып китә.

Монгол осорона тиклем Волга буйы Болғарынан һәм Башҡорт иленән үҙ заманының илдәре һәм ваҡиғалары хаҡында хеҙмәттәр ҡалдырған күп һандағы күренекле шәхестәр сыҡҡан. Танылған ғалимдарҙың, яҙыусыларҙың һәм шағирҙарҙың бер нисә исемен килтереп үтәм:

- Абдаллах ибн Башту Хазари: "Киҫекбаш китабы" (931 й.); "Хазар тарихы";
- Хужа-Әхмәт әл Болғари (XI б.): "Болғар тарихы"; "Баргырия (Болгария) юлы";
- Хәмит бин Иҙрис Ғабдрахман бин Ғауфтан (XI-XII б.б.): "Хәмит әл-Болғари китабы" (1099 й.); "Болғар байрамдары баҡсаһындағы ял" (1106 й.);
- Сөләймән бин Дауыт Һыуар ас-Саҡсин әл-Болғари - шағир;

**(Дауамы бар).**

*✓ Ижади ҡатын-ҡыҙ булып, хис-тойғоларға бирелеп, илһам сығанағы эҙләп көн итһәм дә, ярайһы уҡ көслө рухлы ҡатын ул мин. Үҙем көслө булғас, янымда булырға тейеш ир-егеттең тағы ла көслөрәк булыуын теләйем.*

# ТӘНЕҢДЕ йәнеңде

**Бөгөн ҡатын-ҡыҙ матурлығын баһалау ҙа яңыса ҡараш алды булһа кәрәк. Улай тиһәң дә... Ниндәй генә заманда ла ул гүзәллекте шул сибәрлек, аҡыл, сәләмәт рух һәм тән билдәләйҙәр инде. Әммә бөгөнгө күҙлектән үҙ-үҙеңде тәрбиәләй белеү, кейенеү, стиль формаларын тотоу, биҙәнеү, биҙәүестәрҙе ҡуллана белеү кеүек төшөнсәләр ҙә ҙур роль уйнай. Был юлы ошо хаҡта һәм ҡатын-ҡыҙ тормошона бәйле башҡа төшөнсәләр тураһында әңгәмә алып барыусыларыбыҙ "Сәләмәт ғаилә" медицина үҙәге етәксеһе Зилә АКСЕНОВА һәм стилле башҡорт кейемдәре, биҙәүестәр эшләү оҫтаһы Сәрүәр АСЛАЕВА булыр.**

**Әңгәмәбеҙ матурлыҡ темаһына бағышланғас, баштан уҡ асыҡлап китәйек: һеҙ ниндәй осраҡта ҡатын-ҡыҙға "матур" тигән тамға баҫыр инегеҙ?**

**Зилә Аксенова:** Беҙ хәҙер һәр нәмәнең ике яҡлы икәнен аңларлыҡ йәшкә еткәнбеҙ. Матурлыҡ та ике яҡлы күренеш. Халыҡ әйтмешләй, төҫө барҙан төңөлмә, йәғни тышҡы матурлыҡтың күҙ биҙәге икәнен дә инҡар итмәйбеҙ. Күҙ алдыңа килеп баҫҡан сибәр, матур кешене күрмәй ҙә, һоҡланмай ҙа булмайҙыр. Был - беренсе сиратта. Икенсе сиратта иһә уның был тышҡы ҡиәфәтен эске донъяһы йәки тулыландыра, йәки юҡҡа сығара. Артабан инде һин был әҙәмде ошо тотош барлығы менән ҡабул итәһең йәки кире ҡағаһың. Эске тулылығы булмаһа, ары һин уның матурлығын күрмәйһең дә.

Матурлыҡты баһалауҙың киләһе баҫҡысы - сәләмәтлек. Әлеге лә баяғы рух һәм тән һаулығы. Һау булмаған кеше матур була ла алмай. Хатта матур төҫлө кеше лә сәләмәт булмағанда бөтөнләй икенсе сырайҙа, ҡиәфәттә булып китә. Ниндәйҙер ерең ауырта йә булмаһа күңелеңдә йән ауырыуы бар икән, һиндә тышҡы ҡиәфәт ҡайғыһымы инде! Ә инде тәнеңдә таҙалыҡ, күңелең көр икән, был эске нур үҙенән-үҙе тышҡа бәреп сығып, эргә-тирәләгеләргә лә яҡшы энергия булып таралаҫаҡ. Бындайҙарға башҡалар ҙа тартыла, уның ыңғай эмоцияларынан, таҙа аураһынан көс-дәрт алырға теләүселәр аҙ булмай.

Тағы ла, нисек кенә тапалған фраза булмаһын, шуны әйтәм: ҡатын-ҡыҙҙың шәхси бәхете, ғаиләһенән, иренән, балаларынан уңыуы уның уй-хыялдары йәшәйеше менән тап килгән булыуы ла бик мөһим. Сөнки бер ҡыҙ ҙа йәшлегендә, мин ғүмеремде кемдер менән көрәшеп үткәрәйем йәки бесәйҙәр аҫырап, үҙем өсөн генә йәшәйем, тип хыялланмай. Һәр ҡыҙ баланың да күңелендә саф мөхәббәт, ышаныслы ир-егет, сәләмәт балалар һәм бөтөн ошо камиллыҡты һыйҙырыр йылы йорт һүрәте ята. Ир-егет күҙлегенән, бәлки, былар үтә ябай һәм бер ҡатлы һымаҡтыр, әммә ҡатын-ҡыҙ өсөн хыялдарҙың тормошҡа ашыуы бик мөһим. Ошондай ҡатын-ҡыҙ ҙа матур була. Улар бәхетенән балҡып, үҙен ҡарап, йылылығы менән бүлешеп йәшәй белә.

**Сәрүәр Аслаева:** Һәр йәштең дә үҙ матурлығы була, тип иҫәпләйем мин. Ҡыҙ бала үҙенең йәш, саф тышҡы ҡиәфәте, тәжрибәһеҙ, бер ҡатлы эске донъяһы менән матур. Ғәҙәттә, уларға нимә кейһә лә килешә, хатта бер аҙ ҡылансыҡлыҡ та, еңел-елпелек тә, көләкәслек тә биҙәй уларҙы. Ҡатын кешене тотанаҡлыҡ, иплелек һәм самалылыҡ күркәмләйҙер. Бында кәүҙә яғын самалау ҙа инә. Юғиһә, йыш ҡына ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ тормошҡа сыҡһа, үҙҙәрен ҡарарға онота ла ҡуя. Унан инде олоғая барған инәйҙәрҙең дә матурлығы була. Мин, мәҫәлән, бигерәк тә шул инәйҙәрҙең бөхтә, тәрбиәле, урынлы кейенгән, биҙәнгәндәрен яратам.

Һәм бына әңгәмәсем Зилә менән дә килешәм: эске торошонда тәртип тота алған кешенең тышы ла күркәм була. Тәнен артыҡ аҙыҡтан, ялҡаулыҡтан азат итә белгәндәр йәнен дә, телен дә бысраҡлыҡтан һаҡлаясаҡ һәм, әлбиттә, ул кейем-һалымына ла, биҙәүестәренә лә, биҙәнеүенә лә иғтибарлы буласаҡ.

**Үҙегеҙҙе генә түгел, башҡа ҡатын-ҡыҙҙарҙы ла матурыраҡ, камилыраҡ итеү өсөн ниндәйҙер эштәр башҡараһығыҙ һеҙ, шулай бит? Йәғни, үҙ ҡулдарығыҙ менән матурлыҡ булдыраһығыҙ. Нимәнән ғибәрәт был шөғөлдәр? Һәм ни өсөн һеҙ тап ошо юлды һайланығыҙ?**



**Сәрүәр Аслаева:** Бәләкәстән, үҙемде белә-белгәндән тегенәм, һүрәт төшөрәм. Әсәйем мин тыуғас, минең бала аҡсаһына тегеү машинкаһы һатып алған һәм шуны һәр саҡ "был һинеке" тип әйтә килде. Шунлыҡтан, нисә йәшемдә ул машинка артына ултырғанымды аныҡ ҡына әйтә лә алмайым. Һәр хәлдә, бик бәләкәй булғанмындыр, буйым етмәй, көсөм етмәй ыҙалағанымды хәтерләйем. Бала саҡта өйҙә бер үҙем ҡалғанда ҡурсаҡтарға күлдәк тегеп ҡыялам, әсәйемдең кәрәк тауарҙарына ла тейеп ҡуямдыр инде, әрләнеп тә торам, әммә был шөғөлдө ҡуймайым. Әле уҡымағанда уҡ берәй журнал-фәләндә ҡатын-ҡыҙҙың кейеменә оҙаҡ текәлеп ултырам, уларҙың беҙгә ят булған күлдәктәрен сәйерһенеп өйрәнәм. Унан уларҙы үҙем төшөрөп ҡарайым. Был ҡыҙыҡһыныу аҙаҡ ғәҙәткә әйләнеп китте һәм миндә ул бөгөн дә бар. Ят кейемде күреү менән башта күҙем менән "фотоға төшөрәм", унан ҡағыҙға эшләп ҡуям.

Ошо урында үҙемдең үтә лә тәбиғәтте яратыуымды әйтеп үткем килә. Яңғыҙым урман-ҡырҙарға сығып китеп, хыялланып, илһамланып йөрөүем, бәлки, сәйерерәк тә күренәлер. Әммә был минең асылым ине. Күгәрсен районының тәбиғәте, Мораҙым ҡаялары, ер-һыуы бала сағымда, йәшлегемдә булмышымды тултырған бер моң шикелле булды. Йөрөп ҡайта ла йығылып ятып һүрәт төшөрә инем. Рәссам булырға хыялландым. Әммә атай-әсәйем "Беҙҙә һүрәт төшөрөү хупланмай" тип ҡаршы төштө. Тик мин һаман ныҡыш булып, мәктәпте тамамлағас, рәссамлыҡҡа уҡып сыҡтым. Унан Башҡорт дәүләт академия драма театрында бутафор булып хеҙмәт юлын башланым.

Шунда артистарҙың боронғо башҡорт костюмдарын реставрациялап, йүнәтеп-тулыландырып-рәтләп ултырыу миндә милли кейемдәргә ҡыҙыҡһыныу уятты. Тора-бара тарихты, архив материалдарын өйрәнеп, үҙем дә был кейемдәрҙе тегә башланым. Иң беренсе заказ биреүселәрем "Каруанһарай" төркөмө булды. Үҙем уларҙан бер генә йәшкә өлкән булһам да, ул саҡтағы әле студент ҡына егеттәр: "Апай, ярҙам ит әле", - тип мөрәжәғәт иттеләр. Ярты йыл тирәһе китапханаларҙа соҡона торғас, егеттәргә ете ырыуҙың ете үрнәк костюмын тектем һәм 90-сы йылдарҙа улар башлап минең өлгөләрҙә сәхнәгә сыҡтылар.

Унан Стәрлетамаҡ драма театры эшкә саҡырҙы. Унда ла милли кейемдәр тектем, биҙәүестәр эшләнем, грим менән яңы образдар яһау серҙәрен өйрәндем. Ун биш йыл ошо өлкәлә, шунан бер аҙ ательела эшләгәс, хәҙер үҙемдең эш менән шөғөлләнәм. Йәғни, милли кейемдәрҙең сәхнәгә ярашлыларын ғына түгел, ә тормош-көнкүрештә яраҡлыларын да тегәм. Унан уларға ярашлы биҙәүестәр: ҡашмауҙар, алҡалар, сәсүрместәр һәм уларҙың күн варианттарын да яһайым. Башҡорт халҡында күн материалға хөрмәт ҙур булған һәм был әле лә шулай.

Туҡһанынсы йылдарҙа бер журналист "Ниндәй хыялың бар?" тигән һорау биргәндә мин "Ҡала урамында милли кейем кейеп һәм милли биҙәүестәр тағып йөрөү" тигәйнем. Бөгөн шул хыялымды тормошҡа ашыра алам - әле көн һайын плащ урынына кейеп йөрөрлөк итеп елән ижад итәм.

## СӘРҮӘР АСЛАЕВА:

*Мин тәбиғәтем менән иркле, азатлыҡ һөйгән кешемен. Ижади эшем өсөн дә уйҙарымдың, хыялдарымдың иркле булыуы кәрәк.*

**Зилә Аксенова:** Мин бала саҡтан табип булырға хыялландым. Бер туған апайым уҡытыусы булырға ҡарар итте. Тик яҙмыш беҙҙең хыялдарҙы бутап ташлап, ул - табип, ә мин уҡытыусылыҡҡа уҡырға индек. Биолог-химик мин. Тик булмышым был ҡалыпҡа ғына һыйманы, нимәләрҙер эҙләп-эҙләнеп, яңылыҡтар көҫәп тик йөрөнөм. Ун биш йыллап Башҡортостан Президенты хакимиәтендә лә эшләргә тура килде, шәхси балалар баҡсаһы асып ҡарау тәжрибәм дә булды. Шулай эҙләнеү барышында массаждар курсына барып юлыҡтым. Үҙем өсөн, ғаилә өсөн файҙалы булыр, тип уҡып сыҡтым да, кинәт ошо өлкәлә үҙемде асҡандай булдым. Йөрьәт итеп, ошо йүнәлештә эш асырға уйланым. Дәүләт эшен ташлауыма туғандарым, әхирәттәрем бер төптән ҡаршы төштө, "Бынау заманда... өс бала менән... нимә уйлап..." тип, шәхси эш асыуҙан дүндерергә өгөтләне. Тик мин бер нәмәгә ҡарамай, 42 йәштә яңы тормош башланым. "Сәләмәт ғаилә" тип аталған медицина үҙәге астым һәм кешеләргә матур булыу өлгөләрен күрһәтергә ҡарар иттем. Етәксе булып ҡына ултырмайым, биткә массаж яһайым һәм ошо тәңгәлдә белемемде, оҫталығымды камиллаштырғандан камиллаштыра барам. Мәскәү, Екатеринбург, Ҡаҙан ҡалаларында уҡып алдым. Массаж эшләп кенә ҡалмайым, косметологтарҙы, массажсыларҙы уҡытам.

Саҡ ҡына элеккерәккә ҡайтһаҡ, бына мин йәшерәк саҡта утыҙ, утыҙ биш йәштәге ҡатын-ҡыҙ инде оло һанала һәм уның төҫ-йөҙө лә ярайһы уҡ ололарса була ине. Бөгөн ҡырҡ йәшлек ҡатын-ҡыҙ ҙа әле ҡыҙҙар төҫөндә ҡала ала. Был кейем һәм прическанан ғына тормай. Йәш көйө ҡалырға теләгән ҡатын-ҡыҙ мотлаҡ бит тиреһе тураһында ла хәстәрләй. Мәҫәлән, фейс-фитнес тигән бер ысул бар. Йәғни, бит мускулдарына күнекмәләр яһатыу ул. Биттәге мускулдарҙы ла хәрәкәттә тоторға кәрәк бит. Ошо көндәрҙә Мәскәүҙә Халыҡ-ара фейс-фитнес академияһында уҡып, тренер танығлығы алып ҡайттым һәм үҙемдең салонымда фейс-фитнес буйынса ла клуб асып ебәрҙем. Косметикаға һәм пластик операцияларға мөрәжәғәт итеүҙән тыш, бит-йөҙҙө йәшәртеүҙең тағы ла бик күп серҙәре барлығын күрһәткем килә ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙға.

**Беҙҙең башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары бына һеҙ алып барған ике өлкәгә лә мөрәжәғәт итәме, үҙ-үҙҙәрен биҙәргә, матурларға, сәләмәт итергә ынтылыштары, теләктәре бармы уларҙың? Нисек баһалайҙар улар үҙ тороштарын һәм һеҙ нисек баһалайһығыҙ? Профессиональ күҙлектән ҡарап анализлағыҙ әле?**

**Сәрүәр Аслаева:** Беҙ, башҡорт-ҡатын ҡыҙҙары, ысынлап та үҙебеҙҙе бик хәстәрләп бармайбыҙ. Бигерәк тә ауыл ерендә тыуып үҫкәндәр. Төрлө милләт халҡынан торған артистар араһында эшләгәндә лә шуны аңғарҙым: башҡорт артистары уларҙы сәхнә өсөн биҙәгәндә лә тартына. Мәҫәлән, рус апайҙары биҙәндергәндә, бөхтәләгәндә, матурлағанда кинәнеп китеп ултыра. Беҙҙекеләр, нишләптер, иғтибарҙы күберәк кейемгә йүнәлтә, ә ҡалғанында артыҡ эштәре юҡ. Ә асылда ул кейем бит һылап-һыйпалған йөҙлә, ҡупшыланған сәсле һәм башҡа биҙәктәргә төрөлгән һомғол кәүҙәлә күпкә яҡшыраҡ күренә. Шул уҡ биҙәүестәрҙе лә миҫалға килтерә алам. "Нимәгә кәрәк ул?" тип ебәреүселәр ҙә юҡ түгел. Замансa күлдәк өҫтөнә һалынған этно йәки милли биҙәүестең үҙе үк бер нәзәкәтлек икәнен аңлатырға тура килә күп осраҡта. Икенсе яҡтан, һин әлеге беҙҙең космик һәм нанотехноологиялар заманында үҙеңдә бәләкәй генә бер миллилек биҙәгән йөрөтәһең. Был тамырыбыҙ менән бәйләп торған нескә генә бер еп кеүек миңә. Тик бында ла шаштырып ебәрмәйек, көнсығыш бейеүселәренеке һымаҡ ялтырауыҡтарҙы түш тултырып тағыу яҡлы түгелмен. Үҙебеҙҙең стиль, биҙәктәр, формалар тотолһон биҙәүестәрҙә. Был бик мөһим.

**Зилә Аксенова:** Мин үҙ күҙәтеүҙәремдән сығып, ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ бер аҙ үҙенә ҡул һелтәп ҡуйҙы, тиер инем. Замандар ҙа еңел түгел. Көн итеү өсөн ҡатын-ҡыҙ көнө-төнө хеҙмәт итергә мәжбүр. Күптәрҙең матурлыҡ салондарының ишек тотҡаһына ла ҡағылғаны юҡтыр. Тик бына һуңғы йылдарҙа йәш ҡатын-ҡыҙҙарҙың әүҙемләгән тоям. Үҙ ҡиәфәттәрен йәштән ҡайғырта башлағандарҙың һаны күбәйә. Улар эштән тыш, фитнес клубтарҙа шөғөлләнергә

**✓ Беҙҙең милләт ҡатын-ҡыҙы шундай оло йөрәкле әсәй була белә. Ул балаһы өсөн уйлап та тормаҫтан утҡа инә, һыуға төшә торған йән. Был - беренсенән, икенсенән, башҡорт ҡатындары бик тоғролар.**



лә ваҡыт таба, массаждан да баш тартмай, ғаилә ағзаларын да сәләмәт тормошҡа көйләй. Миңә килгән башҡорт ҡатындары менән мотлаҡ бит-йөҙҙө матур һаҡлау тураһында башҡортсалап һөйләшеү алып барам, массаж серҙәрен асам, кәңәштәр бирәм. Улар шунан "Тукта, мин әсәйемде лә алып киләйем әле" йәки "Ҡәйнәмә лә әйтәйем әле" тип ҡабынып китәләр. Бына шулай йәш быуын өлкән быуынды тәрбиәләй башланы. Ҡыҙым йә һеңлем кәңәш итте, тип тартынып ҡына килеп ингән оло апайҙар массаж һәм файҙалы кәңәштәр алып ҡына түгел, күңелдәре үҫеп, рухтары күтәрелеп сығып китәләр. Ҡатын-ҡыҙҙа үҙ-үҙенә ышаныс артырыу, уның һоҡланғыс яҡтарын күрә белеү, маҡтау ҙа файҙалы бит ул.

Салонға килгән ҡатын-ҡыҙҙың башҡорт икәнлеген аңғарһам, мин үҙем дә асылып, кинәнеп китәм, һәр ваҡыт ташламалар яһайым, бөтөн теләктәрен дә үтәргә, уға ысынлап та сан булалар. Балалар быны бәләкәй саҡтарында уҡ аңғара һәм тора-бара үҙҙәре үк әсәйҙәрен йәмғиәт тупаҫлығынан һаҡлай-ҡурсалай башлай.

Тәрбиәмдә үҫкән ике улым, инәнән күргән тун бескән, тигән шикелле, икеһе лә рәссамдар. Береһе үҙенең "Мин һүрәт төшөрәм" тигән балалар һүрәт төшөрөү студияһын асып, ошо өлкәлә йәш быуынды тәрбиәләй. Икенсеһе институтты тамамлап, әлеге көндә хәрби хеҙмәт үтә. Мин уларҙы бәләкәйҙән эшкә өйрәтеп, эргәмдә ҡуша болғандырып йөрөтөп үҫтерҙем. Малайҙар тип ҡарап торманым, ҡамыр тотһам, ҡамыр тотторҙом, заказ алһам, береһе машинкала тегенә, икенсеһе биҙәктәрен төшөрә башлар ине. Ир, ғаилә башлығы буласаҡ кешеләргә бер һөнәр ҙә артыҡ булмаясаҡ, тип өйрәттем. Улар хәҙер татлы итеп ашарға ла бешерә, ағас менән дә, тимер менән дә эш итә белә, техниканы ла аңлай һ.б. Тормошта ҡатын-ҡыҙға йөк түгел, ә терәк, кәрәк була ҡыҙҙар үҫтереүсе ата-әсәләргә бер кәңәшем бар: ҡыҙҙарға ҡаты булмағыҙ, уларҙы кәмһетмәгеҙ. Киреһенсә, артыҡ осондормай ғына уларҙы йомшаҡ, йылы һүҙҙәр эсендә йөҙҙөрөп йөрөтөп үҫтерегеҙ. Мин ҡыҙҙарымдан "Һин шундай матурҡайһың, инде аҡыллыһың, сәсең бик ҡупшы, күҙҙәрең йондоҙ кеүек, һин минең күбәләгем, ҡошсоғом һ.б." тигән һүҙҙәрҙе йәлләмәйем. Нимәнелер уңышһыҙ эшләп ташлағанында ла: "Мин һине был эш өсөн түгел, ә ошолай булғаның өсөн яратам бит",- тип йыуатам. Ҡыҙҙар өсөн бындай һүҙҙәр, йылы ҡараш, йомшаҡ мөнәсәбәт, иркәләү бик мөһим. Үҙемдең хәтеремдә әсәйемдең: "Йыуантыҡһың, кем ҡарар икән?"- тип шаяртыуы ауыр бер тойғо булып ҡалған. Шул һүҙ арҡаһында мин нисә йылдар тартынып, оялып йөрөнөм. "Ҡыҙҙы ҡырҡ урында тый" тигәндә беҙҙә хата аңлап ташлай ҡайһы берҙәр. Был тәртип нормаларын аңлата, ә бала-

икенсенән, башҡорт ҡатындары бик тоғролар. Әлбиттә, был бал мискәһенә дегет булыусылар ҙа юҡ түгел, әммә холҡобоҙҙа был һыҙаттың умыртҡа һөйәге булып ятҡанын беҙ беләбеҙ. Өсөнсөнән, башҡорт ҡатындары бик ғорур, улар хыянатты, алдаҡты, кәмһетеүҙе күтәрә алмай. Был үҙе үк уны түбәнлектәрҙән бейегерәк итә. Дүртенсенән, беҙ эшкә талымһыҙбыҙ. Үҙебеҙҙе йәлләп, назлап, аяп тормайбыҙ. Тотабыҙ ҙа йәбешеп эшләй башлайбыҙ. Ныҡышбыҙ. Һына һалып, ебей һалып бармайбыҙ. Бөтөн был төшөнсәләр әлеге лә баяғы холоҡтоң ҡатылығынан киләлер. Әммә мин ошо ҡатылыҡ артында милләтте милләт итеп һаҡлаусы бер нәмә яталыр, тип уйлайым.

**Сәрүәр Аслаева:** Мин үҙем, мәсәлән, йошағыраҡ, назлыраҡ, иркәрәк булырға теләр инем. Хатта шулай булғанда, яҙмышымдағы күп хаталарҙы ситләп тә үтер инем, тим. Әммә холоҡто беҙгә Хоҙай үҙе һала һәм беҙ унан ҡаса алмайбыҙ. Ошо лоҡ гүзәллегенә килгәндә, ниндәй генә ҡаты ҡатындың да йомшаҡ һәм гүзәл яҡтары бар икәнен уның яҡындары белә. Хатта был тормошта мин бик ҡаты булып күренгән ҡатын-ҡыҙҙың асылда шундай изге йөрәкле, киң күңелле булғандарын беләм. Күп йомшаҡтарға ҡарағанда улар күпкә ышаныслыраҡ та, арҡаланырлыҡ, ауыр саҡта таянырлыҡ та булалар. Былар буш һүҙ түгел, барыһы ла тормошта һыналған, меңәр ҡат һыналған төшөнсәләр.

▸ **Бая матур олоғайыу тураһында әйтә ҡуйғайныҡ. Һеҙгә, әлбиттә, был хаҡта уйларға иртә, әммә был ғүмере булған һәр кемгә лә килә торған осор. Һеҙ үҙегеҙҙең олоҡта нисек булыуығыҙҙы, ниндәй тормош алып барыуығыҙҙы теләр инегеҙ? Алла бирһә, мин, ҡартайғас, тип башлайыҡ...**

**Сәрүәр Аслаева:** Алла бирһә, мин, ҡартайғас... ошо шөғөлөмдө тағы ла төплөрәк, киңерәк

# АРТЫҠ АҘЫҠТАН,

## быcраҡлыҡтан һаҡла!



***ЗИЛӘ АКСЕНОВА:***

*Башҡорт ҡатындары бик ғорур, улар хыянатты, алдаҡты, кәмһетеүҙе күтәрә алмай. Был үҙе үк уны түбәнлектәрҙән бейегерәк итә.*

файҙа килтерергә тырышам. Был сифат беҙҙең, бер милләттән булған халыҡтың, ҡанындалыр, күрәһең.

▸ **Ҡатын-ҡыҙҙың ниндәйҙер матурлыҡҡа, илаһилыҡҡа ынтылып йәшәүе уның эргә-тирәһендәгеләргә йоғонто яһаймы икән? Уның тәрбиәһендәге балалар ниндәй булып формалаша? Яныңдағы ир кешегә ниндәй роль бүленә? Ниндәйҙер юғары хистәргә ымһынып, улар ысынбарлыҡтағы тормоштан айырылып китмәйме - нисек уйлайһығыҙ?**

**Сәрүәр Аслаева:** Ижади ҡатын-ҡыҙ булып, хис-тойғоларға бирелеп, илһам сығанағы эҙләп көн итһәм дә, ярайһы уҡ көслө рухлы ҡатын ул мин. Үҙемдең эске көсөмдө самалай алам. Үҙем көслө булғас, янымда булырға тейеш ир-егеттең тағы ла көслөрәк булыуын теләйем. Минең ярҙамға һәм йыуатыуға мохтаж ирҙе мин ни эшләтәйем? Уға бирер энергиямды балаларыма биреүем яҡшыраҡ түгелме ни?

Мин тәбиғәтем менән ирекле, азатлыҡ һөйгән кешемен. Ижади эшем өсөн дә уйҙарымдың, хыялдарымдың ирекле булыуы кәрәк. Бындай ҡатын-ҡыҙға сәләмәт һәм дөрөҫ тормош алып барыу мөһим. Сөнки ул балаларын ҡулынан тотоп өйрәтеп, мыжып, вәғәз уҡып ултырмаясаҡ. Балалары уның йәшәйешенә ҡарап өйрәнәсәк. Һәм ошо ваҡытта был йәшәйештең дөрөҫ ҡоролған булыуы ҙур роль уйнай. Ә инде эске донъя, күңел торошона килгәндә, матурлыҡҡа ғашиҡ кешеләрҙә күҙгә салыныр боҙоҡлоҡ та булмай ул. Улар үҙҙәре бала йәнле, нескә, тиҙ йәрәхәтләнеп барыу-белегеҙ, ул ниндәй осраҡта ла һеҙгә мөрәжәғәт итерҙәй булһын, тип ҡабатлайым. Үҙем ошо тәңгәлдә ауырлыҡтар кисергәс, улдарымдың һайлаған ҡатындарын бәхетле итерҙәй ирҙәр булыуын бик теләйем.

**Зилә Аксенова:** Алда әйткәнсә, мин һәр ваҡыт эҙләнеү һәм үҫеш юлында булдым. Күп ҡатын-ҡыҙҙарға хас булған эш-өй-баҡса маршруты ғына мине ҡәнәғәтләндермәй ине. Шул уҡ ваҡытта йәнәшәмдә булған ир кешенең дә бер урында тапаныл, ҡатып ҡалыуы менән риза булманым. Ундай кешегә минең ҡыҙыҡһыныуым юғалды ла ҡуйҙы. Нисә йылдар янында талпынып-талпынып өҙгөләндем дә, бер үҙем остом да киттем. Бәхеткә янымда өс ҡыҙым бар. Мин үҙем йомшаҡ, һығылмалы, йәлләй һалып бара торғанмын. Шул яҡтарым арҡаһында йыш ҡына утты үҙемә йүнәлтәм дә ҡуям. Әммә ниндәй генә хәлдә лә көлдән бар була торған йәнем бар, Аллаға шөкөр.

Милләтебеҙ ҡатын-ҡыҙҙарындағы ҡатылыҡты хупламайым. Ул ҡатылыҡ булырға тейеш, тик уны һин үҙең генә белергә тейешһең. Ул эстә, бик тәрәндә йәшерелгән булырға тейеш. Һүҙҙә лә, төҫтә лә, хәрәкәттә лә ул бер нисек тә сағылмаһын. Ул иһә һинә һынмаҫҡа, тура юлдан яҙылмаҫҡа һәм күңелеңә һалынған матурлыҡты ғүмер буйына тота белергә ярҙам итһен. Өс ҡыҙ әсәһе булараҡ, ның күңелен, рухын үҫтереүҙә сикләүҙә түгел.

Балаларың менән мөнәсәбәт тота белеү - ул үҙе матурлыҡ. Балаң менән нимә тураһында булһа ла һөйләш. Аҡсаң булмаһа ла, уға әллә нимәләр алып бирмәһәң дә, һин уның күңелен аулай алаһың. Дуҫ бул уға. Атай-әсәй булыу ашатыу-кейендереү, һин теләгәнсә эшләтеү-йәшәтеү һәм әрләп-тыйып тороу тигәндә түгел, ә баланың ҡанаттарын нығытыу һәм осорға өйрәтеү тигәндә аңлата. Үҙ фекере булған, ижади ҡомары сикләнмәгән, ҡурҡмаған, баҫылмаған балалар ғына камил шәхес булып формалаша ала. Ә һин уны әүәләүсе ҡул булма, уға үҫеп китә алырлыҡ тупраҡ ҡына бул.

▸ **Матурлыҡтың иң ҙур күрһәткесе - холоҡ, тиелә. Дөйөм алып әйткәндә, башҡорт ҡатынының холҡон гүзәллек өлгөһөнә индереп буламы?**

**Зилә Аксенова:** Һис шикһеҙ. Беҙҙең милләт ҡатын-ҡыҙы шундай оло йөрәкле әсәй була белә. Ул балаһы өсөн уйлап та тормаҫтан утҡа инә, һыуға төшә торған йән. Был - беренсенән,

холҡом менән мин алһыҙ-ялһыҙ эшләп, ике баламды аяҡҡа баҫтырғанмын, уларҙы әҙәм араһында әҙәм булырлыҡ итеп тәрбиәләгәнмен. Ошо холҡом менән урамда ҡалған урындан фатир йүнәтеп кергәнмен, ошо холҡом менән йәмғиәттә хөрмәт-абруй ҡаҙанғанмын. Ошо холҡом менән киң күңелле лә, изге лә, йомарт та була беләм. Шуға, беҙ уға зарланмайыҡ, шөкөр, тиәйек.

Борон-борондан башҡорт ир-егетен ҡатын-ҡыҙ тәрбиәләгән. Ғөмүмән, ерҙәге барыһын да - кешеләрҙе лә, хайуандарҙы ла әсә тәрбиәләй. Был - тәбиғи. Ирҙәр бала тәрбиәһендә ҡатнашмай, тигән фекер хаталыр ҙа, бәлки. Ир-егеттең был йәшәйештәге функцияһы саҡ ҡына башҡараҡ. Тәбиғәт бит беҙҙе үҙе шулай яралтҡан. Ҡатын-ҡыҙ баланы ҡорһағында етлектереп тыуҙыра, баға, үҫтерә, тәрбиәләй, бөтөн тереклек итеү серҙәренә төшөндөрә, күңелен байыта, рухын нығыта һәм ҙур донъяға сығарып ебәрә. Тимәк, уның холҡонда йомшаҡлыҡ та, ҡатылыҡ та булырға тейеш. Ҡатылыҡ булмаһа, беҙҙең ҡулда ниндәй ирҙәр үҫәсәк? Ә инде хо-

итеп йәйелдереп ебәрергә хыялланам. Ейәндәр ҡараусы өләсәй генә түгел мин. Уларға һөнәр өйрәтеүсе иптәш, дуҫ, яҡын кеше булыр инем. Минең әле лә тормошҡа зарланып ултырырға ваҡытым юҡ, ҡартлыҡта иһә, ғүмер тағы ла ҡыҫҡара төшкәндә, күп нәмәгә өлгөрөп ҡалырға теләр инем, тип уйлайым. Урамдарҙа милли кейемдә генә йөрөгән ҡупшы әбей булғым килә. Ҡала халҡының, балаларҙың күҙе шуға өйрәнһен. Милли кейемдәрҙе сәхнә биҙәге генә итмәйек, көнкүреш варианттарын тегеп алып, иркен кейенеп йөрөйөк. Ҡартлыҡҡа минең пландарым бына шулай.

**Зилә Аксенова:** Алла бирһә, мин, ҡартайғас... һаман шул күңел талабы артынан эйәргән ҡатын-ҡыҙ булып ҡалырға теләр инем. Үҙемә оҡшағанды ғына башҡарырға, күңелемә ятҡанды ғына һөйләргә, аяғым тартҡан ергә генә барырға. Йөрәгемдә лә бикләмәйем, ялҡынлы хистәргә лә, тетрәндерер һөйөүгә лә асыҡмын. Олоғайыу ул тышҡы күренеш кенә, ә эске донъя олоғаймайҙыр ул, тип уйлайым. Мин үҙемдә бер нисек тә мыжыҡ, ауыр әбей итеп күҙ алдына килтермәйем. Һаман ошолай илһамланып йәшәргә һәм йәшнәргә иҫәбем.

### ШУЛАЙ ИТЕП...

**Күреүегеҙсә, ҡатын-ҡыҙҙың матурлығы күп яҡлы. Уларҙа, ярылған көҙгө ярсығында ҡояш нуры уйнап-сағылған шикелле, мең төрлө хистәр балҡый-нурлана. Бер генә нурҙы тотоп алып, береһендә генә йылынып та булмағандай. Шул уҡ ваҡытта ул нурҙарҙы тоймау ҙа мөмкин түгел. Улар бер өлөштө генә түгел, тотош ерҙе, донъяны яҡтыға, биҙәккә, йылылыҡҡа, назға сорнай. Ҡалайтаһың, беҙ, ҡатын-ҡыҙҙар, шулайбыҙ инде...**

**Миләүшә ХӘБИЛОВА**
**әңгәмә ҡорҙо.**



Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА

# ҺИГЕҘЕНСЕ МАРТ

(Хикәйә)

Әсәйемдең якты иҫтәлегенә бағышлайым...

Әхирәтемдең серенән аяҡ аҫтымдағы ер уйылып киткәндәй булды:

- Әсәйең ауырлы?..

Аңлаһам да ҡабатлап һорайым:

- Кемдең әсәһе? - Үҙем уның әсәһе юҡлығын беләм дә инде.

- Һинеке...

Шул мәл был күпте белгән һәм һәр нәмәне әллә ҡайҙан иң беренсе ишетеп ҡала торған әхирәтемде күрәлмаҫ хәлгә еттем.

- Алдама! - тип екереп, икенсе партаға күсеп ултырҙым. Ул минең арттан күсә:

- Алдамайым. Кисә еңгәм әйтте.

Еңгәһе әйткәс - все, кәпис, тип уйлайым. Кәйефем бөтөү генә түгел, эсемдә буран ҡуба.

Ауырлы! Әпәт! Былай ҙа анау өсәүһен күтәп урамға ла сығалмайым!

Минең хәлемде уҡытыусы аңғарып ҡала.

- Нимә булды? Ауырып киттеңме әллә? - ти.

- Ҡоҫҡом килә, - тим шым ғына.

Ул килеп маңлайыма йылы усын ҡуйып ҡарай.

- Былай температураң юҡ... тик ҡалай сикәләрең яна, - унан китап-дәфтәрҙәремде йыйып, сумкама һала. - Бар, әсәйең эргәһенә инеп сыҡ.

Әйберҙәремде күтәрешеп алып барышырға класташ малайымды эйәртә лә, мин тышҡа сығыу менән унан сумкамды һыпыра тартып алам:

- Кит мынан.

Әсәйем мәктәп күршеһендәге генә медпунктта эшләй. Ауыл халҡы телендә - враш. Унда барып еткәнсе, мин инде буҙлайым. Илап барып инәм дә, сумкамды бер яҡҡа ырғытып, быймаларымды икенсе яҡҡа һелтәп сисәм. Өҫтәл артында яҙышып ултырған әсәйем, ҡағыҙҙарынан айырылып аптырап ҡарай:

- Нимә булды?

Төпкө бүлмәнән санитаркаһы сыға. Уны күргәс, вис әйтеп һалырға тип аҫҡан ауыҙымды ябам, тик илауҙан туҡтап булмай.

- Һуғыштыңмы? - Инәй мине төпкө яҡҡа әйҙәй, ундағы сәй эскән өҫтәлдәренә алып килә, ашарға һалып бирә. Эргәбеҙгә әсәйем сыға, башымды тотоп ҡарай, бармаҡ баштары менән тамағымды һәрмәй ҙә, битемде һөртә:

- Етәр, илама, бар танауыңды һеңгереп йыу.

Улар мине һуғышҡан икән тип уйлай. Гел малайҙар менән һуғышып йөрөгәс.

- Әйт, кемеһе шуларҙың? Хәҙер ул кейәнкегә иң ҙур укылды һалабыҙ, - тип шаяртып әүрәтеп ҡарай санитарка, тик мин улар менән һөйләшмәйем. Яратмайым! Икеһен дә!

...Көн аҙағында әсәйем уятып алып ҡайтып китә. Шунда ҡаҡ тапчанда йоклап киткәнмен икән. Ҡайтҡас та яҙылмайым. Әсәйемә бөтөнләй ҡарамайым. Уның был һатлыҡйәнлеген ғәфү итер хәлем юҡ. "Балалар менән ауыр-ауыр" ти үҙе, үҙе тағы бәпәй алырға уйлай. Башы эшләмәйме әллә уның, тип эстән әрләп ҡара янам. Шуға бөгөн ул мал ҡарап, һыу ташып, тамаҡ йүнәтеп алғансы, бәләкәстәрҙе күтәүҙән бөтөнләй үк баш тарта алмаһам да, ҡарышып, яҡшылап күҙ-ҡолаҡ булмай ултырам. Шул сәбәпле, яңы атлап йөрөгән берәүҙе урындыҡтан аҙа баҫып ҡолап та төшә. Һыны ҡата, маңлайы күбеп китә. Мин уны йәһәт кенә тымыҙа алмаҫымды белеп, күтәреп алам да, тәҙрә төбөндә әҙер ятҡан биш тинлек баҡыр аҡса менән ороһона баҫам. Бәпәй тағы ла ярный төшә. Ҡулымды алмайым, шулайтһаң, шеше тиҙерәк ҡайта. Бала күтәп, уларҙы аунатып-ҡолатып үҫтереп барғас, белеп бөткәнмен. Тәҙрә быялаһы ситендәге боҙға, йәй һыу бағына, тинлек һалып ҡуям. Шул һыуыҡ менән баҫырға кәрәк.

Ул тамаҡ бешергәндә лә һөйләшмәйбеҙ. Хәтәр ҡыйын. Башҡа ваҡытта ошо мәл иң күңелле була торғайны. Мейестә сытырлап ут яна, әсәй бешерә, һин урындыҡта бәләкәстәр менән "һуғыша-һуғыша" дәрес әҙерләйһең. Шул арала әсәй менән һөйләшеп-көләшеп алаһың. Атай өйҙә булһа, был бәйнәттәрҙе уға тапшырып уҡ ҡуяһың, өҫтөндә аунашһындар әйҙә. Ә бөгөн... был бәхет юҡҡа сыҡҡан. Һәм ҡабат бер ваҡытта ла кире ҡайтмаясаҡ.

Шундайға барып етәм, кискә сәйгә килмәйем. "Яҡ" тип йөҙөмдө борам. Бәләкәстәрҙе ашатып ултырған әсәйемдең түҙемлеге бөтә:

- Нимәгә илашаһығыҙ? - Ишектән быу болото менән ингән әсәйем, ҡосағындағы утынын мейес алдына һалып, беҙҙең янға ашыға. Ҡулымдағы бала уны күргәс тағы ла тыпырсыныбыраҡ үкһей, мин уны тағы ла нығыраҡ ҡосаҡлап һелкетәм. Асыуҙан һелкетәм. Быны күргән әсәйем көйөп китә:

- Нишәп ул һәтте итәһең? - Бейәләйҙәрен сисеп, баланы алып, яурынына баҫа, унан ороһон күреп ҡала. - Әпәт ҡолаттыңмы? Төнәге күге китмәгән, тағы шул ере менән төшкән!

Тегене тынысландырып, кире урындыҡҡа ебәрә лә, ашығып сығып китә. Быны ул быҙауҙы индереп килә. Көсө етмәй. Мал булған нәмә тулап ҡарыша. Ҡойроғонан, муйынсаһынан тотоп әләктереп тартып, артынан этеп ҡарай. Унан күтәреп маташа. Юҡ, атламай был тупһа аша. Әсәйем тирләп-бешә, "Сәсрәгере" тип быҙауҙың арҡаһына шапылдата һуғып ала. Мин урындыҡта бала тотоп тик ултырам. Ярҙам итмәйем. Бығаса индерешә торғайным, бөгөн - юҡ. Яуызлығымдан тантана итеп ултырам. Шулай була ул, бәпәй алғасың...

Быҙауҙы этеп-төртөп индереп, ояһына ҡуйғас, хәле бөтөп, ишек төбөндәге эскәмйәгә ултыра әсәйем. Күҙен йомоп, соңҡаһын стенаға терәп, оҙаҡ ҡына ултыра шулай. Унан һыу эсә лә, бәрәстәрҙе ташый башлай.

- Ултыр йәһәт кенә! Минең менән һуғыштыңмы ни? Ул ниндәй бөтмәҫ үсегеү?

Мин иһә шуны ғына көткәнмен:

- Һуғышманым мин!

- Атыу нимештәнең?

- Эштәмәнем! - көслөрәрәк сыкты, ахыры, тауышым, әсәйем боролоп аптырап ҡараны.

- Кемгә үпкәләйһең һуң алайғас?

- Һиңә!

- Бәтәс... миңә нишәп?

- Бәпәй алғасың! - Был яуаптан һуң зыулап төп яҡҡа сығып китәм дә, караватҡа йөҙтүбән ауам. Все! Әйтелде. Хәҙер хет нимә булһа ла булһын.

Ҡүпмелер ваҡыттан һуң, тегеләрен түйындырып бөткәс, әсәйем сығып эргәмә ултыра, иплэп кенә яурынымдан бәпләй. Көрһөнә лә, гәйепле тауыш менән:

- Илама юҡҡа, - ти.

Сәсәй-сәсәй ирешәм:

- Надайыл миңә был баллар! Үҙең шулар маҙа тейең, үҙең алаһың...

Ул мине ҡосаҡларға итә, ҡарышам.

- Туғандарын улай тип әйтмәйҙәр инде, улар һине ярата ла инде, тыуһа, быныһы ла яратасаҡ.

- Яратмаһын! Тыумаһын әйҙә! Беҙ и так һигеҙ штук!

Әйтмәгәнмен, минең бит әле дүрт оло ағайым бар, улар ҡырҙа уҡыуҙа.

Бынығына яуабы юҡ әсәйемдең. Былай ғына тынысландыра алмаҫын аңлаптыр, үҙ мәшәҡәттәренә тотона. Тегеләрен йоҡларға һала, бәләкәсен сәңгелдәктә бәүетеп йырлағанында былары ла ойоп китә. Йоҡлаған булып алдап ятҡан мине лә күтәреп, һеңлем эргәһенә шылдыра. Унан ҡаҙанында имшегән һыуы менән кер йыуып, һабынлы йыуынтыһына түрбаш яҡты һөртөп ала. Һуңғы тапҡыр күҙемде асып ҡарағанымда, мейес алдына сүгәләп, күмер ашап ултыра (Шул күренеш бөгөн дә күҙ алдымда).

Бынан аҙаҡ ғүмерҙең нисегерәк аҡҡанын хәтерләмәйем, әммә шул бала тыуған көндөң 8 март булғанын беләм. Әсәйемдә был бәпәйгә бик алдан һалдылар (43 йәштә булған икән). Оҙаҡ ятты. Атайым менән донъя күтәп арып бөттөм. Бығаса әсәй эштә, мин уҡыуҙа булғанда балаларҙы көтөшкән күрше әбей ярҙамлаша ла ул, тик инде бигерәк ҡарт. Бәләкәстәр уны тыңламай, йүгереп китһәләр, тота алмай, тегеләр ялтанып ҡасалар, шуға ҡайһыларын бәйләп ҡуя. Ойоктарҙы ҡушып, баланың биленән урата ла, осон урындыҡ тәңгәлендәге стенаға ҡаҡҡан сөйөнө эләктерә. Былар урындыҡта иркен ултырып уйнай, ә төшөп китә алмай. Кис һалышҡанда ла, өс-дүрт йәшлектәрен дә нығытып ҡармап төрә лә ҡуя. Шулайтһаң, нығ йоклай, өшөмәй ҙә, ти инде. Миңә ни - ҡалай ҙа ярай, йоклаһалар булды, тәндә һәт йә сәй һорап торғоҙмаһындар ғына.

Байрам көн иртә менән иҙән йыуып бөтөп кенә барһам, күрше еңгәй килеп инде лә, атайыма:

- Һөйөнсө! Улығыҙ бар, - тине.

Усаҡ тирәһендә болғанып йөрөгән атайым нисектер уңайһыҙланып ҡына:

- Э-эй, ҡыҙ бумаған икән, - тип, барып шифоньерҙан бер төргәкте алып һөйөнсөләүсегә тотторҙо. Шул төргәкте әсәйем миңә ҡырҡ күрһәтеп һалғайны, мин үҙ сиратымда атайыма ҡырҡ күрһәтеп әйттем һәм быны ул маҡсатына етте.

Төштән һуң хәбәр килде, атайымды әсәйем эргәһенә балнисҡа саҡырттылар. Өйҙә апай тейеш кешене ҡалдырып, икебеҙ ҡуналтаҡ биларуста сығып киттек. Мине ниңә эйәрткәндәрен аңламайым, әммә унда артыҡ эшем юҡ, өй мәшәҡәттәренән ҡасып китеп барыуым.

Үҙәккә барып етеп, балнис тупһаһына баҫҡас, ҡапыл ғына йөрәгемде шом биләп алды. Беҙҙе сисендереп, палатаға индерҙеләр. Унда әсәйемдең һеңлеһе, тағы ла башҡа апайҙар бар. Барыһы ла аҡ халатта. Шул саҡ әсәйемде күреп шаҡ ҡаттым. Күҙ алдымда сикәләре эскә батып, ҡап-ҡара булған бер ят ҡатын ята ине. Күҙҙәре йомоҡ. Нисек эргәһенә алып килеп ултырткандарын белмәйем. Быңа ул ыҙалап ҡына күҙҙәрен асты ла, алмаһын ғына шылдырып, башта атайыма, унан миңә ҡарап алды. Атайым ҡалайтҡандыр инде, мин түгелеп илап та ебәрҙем:

- Әсә-әй! Әсә-ә-әй....

Бер аҙҙан телен саҡ ҡыбырлатып әйтте:

- Бәпәйҙе апайың алыр... - Үҙенең һеңлеһен әйтә инде, - һеңлеңде лә ул ала... Һин ҡустыларыңды ҡара... ташлама...

Аҙаҡ, илауым шарылдауға күскәс, кемдер мине күтәреп, коридорға алып сыкты, атайым ултырып ҡалды. Шул төндә мин балнис эскәмйәләрендә бер ятып, бер уянып йөрөп таң аттырҙым. Палаталарҙан сыҡҡан ҡатын-ҡыҙ сәй эсерҙе, кеме кәнфит, кеме перәник һондо. Ун бер йәшлек кенә булһам да бындағы ҡатындарҙың барыһы ла бәпәй артынан килгәнен аңланым шул саҡ. Ҡорһаҡлылары ла, биләүле төйөнсәктәрен тотоп йөрөгәндәре лә бар ине. Һәм әсәйемдең хәле лә шул бәпәйгә бәйлелеген төшөндөм. Шул саҡ "Бәпәй булмаһын" тигәнем иҫемә төшөп, тирләгәнсе, һушым китә яҙғансы ҡурҡтым. Мин шулай тип әйткәс, әсәйем үлергә ята! А-а-аһ! Әсәйем үлә инде!

Ошо төндә мин нық ҙурайҙымдыр, тип уйлайым. Янып-һүнеп, бешеп-туңып, хәтерем инәле-сығалы булып таң аттырҙым. Әсәйемдең үлемен көтөп ултырып...

Киләһе көн, төнгә ҡаршы, беҙ ҡайтыуға сыҡтыҡ. Палатаға һуңғы инеүемдә әсәйемде йоклай тинеләр. Үлмәгән. Йоклай ғына. Өҫтөмдән тау төшкәндәй еңеләйеп, хатта һикерә-һикерә сығып киттем. Донъя яҡтырҙы. Һауа бейегәйҙе. Әсәйем тере!

... Бәпәй күтәреп йөрөйөм. Ҙур кәүҙәле, туп шикелле балаға саҡ көсөм етә. Уныһының йә ултыра белмәгән, йә яткыһы килмәгән сағы. Ҡулымда, беләктәремдең хәлен алып, улай-былай әйләнгеләй, лапаҫ аҫтында һыйыр һауып ултырған әсәй янына ынтыла. Әсәйем тауыш бирә:

- И-и, бәпесемде! Хәҙер-хәҙер бөтә! Хә-әҙер...

Унан һөттө аласыҡҡа алып китә. Артынан эйәрәм. Үҙем уның ҡалынайып киткән кәүҙәһенә ҡарап киләм дә, ихлас итеп әйтеп ҡуям:

- Беҙҙең тағы бәпәй булһа... булһын әйҙә, әйме.

Был һүҙҙәрҙән ул рәхәтләнеп көлә. Мин дә көләм - бәхетемдән.

✓ *Йәш ғаиләләргә хөкүмәт тарафынан бирелгән ярҙамдарҙы алыуҙы бер аҙ ябайлаштырһындар ине. Сөнки, ҡарап торһаң - ярҙам бар, ә уны алыу - оло бәлә. Ә былай, ауылда йәшәү күңелле лә, рәхәт тә. Йыбанмаһаң, хөрриәт ул ауыл!*



*БАШҠОРТ ҒАИЛӘҺЕ*

# ЙЫБАНМАҺАҢ, ХӨРРИӘТ УЛ АУЫЛ!

## Ауылда ғаилә булып йәшәү ҙә - хөрриәт!

**Кешелек донъяһы барлыҡҡа килгәндән алып яралған Ер йөҙөндә ишле ғаилә, ир һәм ҡатын мөнәсәбәттәре. Беҙҙең кеүек мосолман халыҡтарында инде бигерәк тә өйләнеү, ғаиләле булыу алға ҡуйыла. Халҡыбыҙ элек-электән йәштәрҙе бала саҡтан йәрәштереүгә, ишле ғаилә булдырыуға ҙур иғтибар бүлеп, киләсәк быуындар өсөн яуаплылыҡ тойоу ғына кеше шәхесен тәрбиәләй ала, тигән дөрөҫ фекерҙә булған.**

Ғаилә ҡиммәттәре бөгөн дә, Аллаға шөкөр, юғары баһалана. Ғаиләле булыу, үҙ-ара мөнәсәбәттәр тотоп йәшәй белеүҙең статусы ҙур. Дәүләтебеҙҙә ғаиләләрҙе яҡлаусы төрлө программалар, ярҙамдар бар, йәғни ғаиләләр беҙҙә хөкүмәт тарафынан да яҡлаулы, ҡурсыулы. Быйыл, мәҫәлән, йыл үҙе үк Ғаилә йылы итеп иғлан ителеп, бик күп күркәм эштәргә, башланғыстарға сәбәпсе булды. Шуларҙың береһе - Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты, Башҡортостан Республикаһы Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының мәҙәни, социаль һәм рухи үҫеш буйынса "Ағинәй" төбәк йәмәғәт ойошмаһы тарафынан ойошторолған "Ғаилә - туған тел һаҡсыһы" тигән бәйге. Ул үткән аҙнала баш ҡалала гөрләп үтте. Конкурс башта республикабыҙ райондарында ойошторолоп, уларҙан иң көслө берәр ғаилә һайлап алынып, еңеүселәр финалға республика кимәлендә сыҡты. Береһенән-береһе күркәм утыҙлап ғаилә килгәйне конкурсҡа. Егермеләп ғаиләгә төп тамаша башланғанға тиклем үк тамашаһылар алдында үҙ һүҙҙәрен әйтеп, әҙерләгән программаларынан өҙөк тәҡдим итеп, үҙҙәрен таныштырыу мөмкинлеге бирелде. Улар ҙа конкурс дипломдары һәм иҫтәлекле бүләктәр менән бүләкләнде. Ә ун ғаилә - Стәрлебаш районы Елембәт ауылынан Фирүҙә һәм Флорид Иҫәнсуриндар, Әбйәлил районы Буранғол ауылынан Гөлйөҙәм һәм Рәмил Вәлиевтар, Иглин районы Аҡбирҙе ауылынан Римма һәм Шайморат Тимербулатовтар, Благовещен ҡалаһынан Зифа һәм Илшат Байморатовтар, Сибай ҡалаһынан Зөбәржәт һәм Шамил Күсәмишевтар, Мәләүез районы Боһорман ауылынан Флүрә һәм Фәйез Бикташевтар, Миәкә районы Илсеғол ауылынан Нәсимә һәм Ғәзинур Шәйәхмәтовтар, Йылайыр районы Йылайыр ауылынан Айгөл һәм Илфат Такаловтар һәм Хәйбулла районы Әбүбәкер ауылынан Әлфиҙә һәм Ғәлимйән Ултраҡовтар төп еңеүселәр булып, төрлө номинациялар буйынса билдәләнеп, сығыштары менән төп тамашаны йәмләне. Әйткәндәй, парҙар үҙҙәре генә килмәгән, һәр ғаиләлә өсәр-бишәр бала, олатай-өләсәй булып, сәхнәне тултырып йөрөнөләр.

Ниндәй генә шөғөлдәре булманы ғаиләләрҙең! Йырлау, ҡурай-ҡумыҙҙа уйнау, бейеү хаҡында һүҙ ҙә юҡ. Бына бит, милләтебеҙҙә ҡурай һәр ғаиләнең биҙәге булыу кимәленә етте. Был үҙенә күрә бер ғорурлыҡ!

Бәйге барышында ғаиләләрҙең һәр береһе янына барып, һорашып, серләшеп алыу йәйин да таптыҡ. Бәйгелә ҡатнашыусы ғаиләләрҙең һигеҙендә бер көтөү мал-тыуар тотола икән. "Өс һыйыр һауам, алты һыйыр аҫырайбыҙ", - тип баҫалҡы ғына йылмайып яуаплай ҡатындар. Уларға өҫтәп һәр береһендә йыйтыҡ, баҡса, күпләп ҡош-ҡорт, ҡайһыларында умарталыҡтар. Әлбиттә, былай донъяны бары тик парлап, күмәк көс менән генә алып барыу мөмкин. Һәм шуныһын аңғармау мөмкин түгел: етеш, хәлле был ғаиләләрҙә ир абруйы ла юғары. Башҡорт ир-егеттәре артыҡ һөйләшеп бармай, бигерәк тә журналист менән, ә ҡатындары һәр бер фекерен иренең ымы-ҡарашы аҫтында йөпләтеп кенә ысҡындыра. Шулай булырға тейештер ҙә. Был - башҡорт ғаиләһе кодексы.

***Йылайыр районы Йылайыр ауылынан Айгөл һәм Илфат Такаловтар*** ғаиләһен табып, оҙон-оҙон үҫмер егеттәр һәм шулар йәшендәгеләй генә булып күренгән ҡыҙҙан барып: "Был ғаиләнең әсәһе ҡайҙа икән?"- тип һораным. Рәхәтләнеп көлөшөп алдылар. Баҡтиһәң, ғаилә хужабикәһе ошо йәш ханым - биш бала әсәһе икән. Шунда уҡ ошо һорауҙы бирҙем:

- Нисек былай матур һәм йәш ҡала алдығыҙ? Ни тиһәң дә, ҡандай ҙур егеттәрҙең әсәһе!

- Ғаиләм-егеттәрем мине ярата һәм һаҡлай. Башҡа артыҡ бер серем дә юҡ, - тип ихлас йылмая Айгөл.



Илфат Такалов Йылайыр районы буйынса һаҡлыҡ банкы директоры, ә Айгөл үҙе районның ЗАГС бүлеге белгесе. Бына шундай яуаплы һәм етди һөнәр эйәләре булыуға ҡарамаҫтан, улар республика кимәлендәге һәм райондарындағы бар мәҙәни сараларҙа ла ҡатнашырға, ғаиләне рухи яҡтан да үҫтерергә ваҡыт табалар.

"Ғаиләлә кем баш?" тигән һорауға ир кеше өҙөп кенә: "Әлбиттә, мин - атай кеше!"- тип яуапланы. Улдары өсөн яуаплылыҡты ул тулыһынса үҙ иңенә алған. Уларҙы хеҙмәт, спорт һәм атай хәстәре менән тәрбиәләй.

- Биш бала табыу өсөн дә батырлыҡ кәрәк. Һеҙҙең ғаиләлә кем батыр? - тигән мәрәкәле һорауға Такаловтар бер-береһенә ҡарап йылмайышты. Унан әсәй: "Һәр балабыҙ был донъяға теләп алынған, һәр береһен беҙ көтөп алдыҡ, һөйөүгә төрөп кенә үҫтереп киләбеҙ. Ҙур ғаиләлә балалар ҙа тәрбиәле була бит ул. Ана, күрһәгеҙме, ололарының ҡулдарында бәләкәстәре. Уларға бәләкәстәрҙе ҡарағыҙ, тип әйтергә лә кәрәкмәй. Улар шулай хәстәрле һәм иғтибарлы булыуҙы белеп үҫә", - тип аңлатып ҡуйҙы.

***Мәләүез районы Боһорман ауылынан Флүрә һәм Фәйез Бикташевтар*** 25 йыл бергә ғүмер итәләр, ғаиләлә биш бала тәрбиәләнә. Бикташевтар ғаиләһе тулыһынса мәҙәниәт өлкәһендә хеҙмәт итеүселәр вәкиленән. Йырлау, бейеү, гармунда уйнау бында үҙешмәкәр генә түгел, ә профессиональ кимәлдә инде. Фәйез Бикташев Республика гармунсылар конкурсында еңеүсе булған кеше.



- Фәйез ағай, ауылдарҙа ир-егеттәргә эш юҡ, шуға улар эскелеккә һалыша, тигән фекер менән килешә алаһығыҙмы? - тигән мәғәнәле һорау менән мөрәжәғәт итәм ғаилә башлығына.

- Юҡ, килешмәйем. Эш булмауы, киреһенсә, кешене эҙләнергә мәжбүр итергә, хәрәкәткә килтерергә тейеш. Мин үҙебеҙҙең ауылда эшһеҙлектән эсеп ятҡан кешене белмәйем. Һәр береһе мал-тыуар көтөп, баҡса үҫтереп көн итергә тырыша. Ундайҙар булһа, ғаиләһе булмаған, яуаплыһыҙ кешеләр генә була ала.

- Флүрә апай, һеҙҙең ғаиләлә тәрбиәгә алынған бала үҫеп килә. Үҙегеҙҙә дүрт бала булып та, ниндәй ниәт менән һеҙ бишенсегә бала алдығыҙ?

- Бәләкәс балам менән дауаханала ятҡайным. Шунда күрше палатала алты айлыҡ ҡына сабый ташландыҡ булып сыҡты. Ауырый теге бала, температураһы көслө. Иламай ҙа бахырҡай, ҡарауһыҙ булыуға күнгән, күрәһең. Шуны йәлләп, ҡулыма алдым да... баш тарта алмаҫымды аңланым. Дауахананан сығып, һабантуйға ҡайтып киттем. Йөрөйөм, эсем боша. Ҡалған бәләкәсте уйлайым. Флүр ағайың шунда "Ни булды?" тип һорай. Һөйләп бирҙем, үҙем илайым. Шунан ул да, өлкән балалар ҙа бер ауыҙҙан: "Әйҙә, барып алайыҡ!" - тинеләр. Хәҙер шул бәләкәскә 14 йәш.

***Хәйбулла районы Әбеш ауылынан Әлфиҙә һәм Ғәлимйән Ултраҡовтар*** был сараға улдары һәм килендәре менән килгәндәр. Мәҙәниәт өлкәһе хеҙмәткәрҙәре. 27 йыл бергә ғүмер итеп, өс бала үҫтергәндәр. Ҡартатай менән ҡартәсәй булыу бәхетенә ирешеп, йәш быуынды ла милли традицияларҙа тәрбиәләйҙәр.

- Ауыл йәштәренең тормошон нисек һүрәтләр инегеҙ? Ауырмы уларҙың йәшәйеше? Ауылда ҡаламы йәш ғаиләләр?



- Ауылда йәштәргә эш аҙ, шуныһы ғына бәлә. Мал, баҡса, әлбиттә, ҙур ярҙам, әммә был йыл әйләнәһенә табыш бирмәй. Ир-егеттәр күпләп ситкә китеп эшләргә мәжбүр. Һәм ошо күренештең төрлө бәләләр алып килеүе билдәле. Ә былай йәштәр бөгөн аңлы, егәрле. Эскелеккә лә ҡаршы тора белә улар. Бөгөн күп йәш ғаиләләр быны ни икәнен дә белмәй. Сөнки - аҡыллылар, - тине Әлфиҙә Ултраҡова.

- Ике улығыҙ үҙ аллы ғаилә ҡорған. Егеттәрҙе ғаиләгә ылыҡтырыуға, ғаиләгә яуаплы була белеүгә нисек өйрәтергә була?

- Бары үҙ өлгөндә генә. Һүҙ менән генә әйтеү улар өсөн миҫал булып тора алмай. Мин үҙем атай тәрбиәһендә үҫтем, уның бергә йөрөтөп эшләткән, аңлатҡандарын бөгөн дә иҫләйем. Унан килә, малайҙарым үҙемдән өйрәнде. Техника ятатам һәм улдарым да шул өлкәне яҡшы төшөндө. Хәҙер мин уларға кәңәш менән мөрәжәғәт итәм.

Эш рәтен белгән, хеҙмәт менән тәрбиәләнеп үҫкән малайҙар бер ерҙә лә юғалып ҡалмай ул. Ә инде үҙенең күңеле яткан ҡыҙға өйләнгәндә улар, мотлаҡ, уны бәхетле итергә ынтыласаҡ, - тине атай кеше.

Ғаиләнең ҡартәсәһе, 82 йәшлек Еҙбикә инәй ҙә һүҙгә ҡушылып, шулай тине:

- Алты бала үҫтерҙек. Әле кинйәбеҙҙең ғаиләһендә йәшәйем. Бында шул йәштәрҙе күтәрмәләү өсөн килдем. Балаларымдың кәртәләре тулы мал, йоҡлап ятмайҙар. Эштән киләләр ҙә, мал ҡарап, баҡса тәрбиәләп, бала-саға менән булып йөрөйҙәр. Мин шуларға күҙ-ҡолаҡ булып ултырам. Белмәгәндәрен минән һораған булалар, белгәнемсә өйрәткән булам. Ҡарт әбей, тип, ситкә типмәйҙәр, хөрмәттә йәшәп ятам, Аллаға шөкөр.

- Инәй, бына һеҙ балаларығыҙға "Өйлән, ғаиләле бул" тип әйттегеҙме?

- Әйтмәй һуң. Малайҙар хеҙмәттән ҡайтыуға, ҡыҙҙар үҫеп етеүгә, башлы-күҙле итергә тырыштыҡ. Ҡатынлы ул - ҡараулы, ирле ҡыҙ хужалы бит. Парлы кешеләр бер-беренә күңелен баҫа, уртаҡ балалары булып, шуларға әүрәй. Яңғыҙ башҡа ниндәй генә уйҙар килмәҫкә мөмкин? Шуға, балаға бәләкәйҙән ғаилә рухын һеңдереп үҫтерергә кәрәк. Хоҙай беҙгә шулай ҡушҡан, шул юлды ыҡыуып йәшәргә кәрәк...

***Баймаҡ районы Буранбай ауылынан Гөлдәр һәм Руслан Ҡотоевтарға:***

- Ғаиләлә балаларға иң беренсе ниндәй талаптар ҡуйыла? - тип өндәштем.

- Иң беренсе талап - уҡыу һәм хеҙмәт. Биш бала үҫтерәбеҙ. Улар ғаиләгә ярҙам да булырға тейештәр. Мал араһында, өйҙә ҡул араһында ата-әсәнең ҡайһы бер мәшәҡәтен уртаҡлашырға тейештәр инде. Беҙ шулай үҫтек, балаларға ла шундай талап, - тине Гөлдәр Ҡотоева.

- Эшҡыуарлыҡ менән шөғөлләнгән ғаилә, тинеләр. Эшҡыуарлыҡтың ниндәй төрөн үҙ иттегеҙ?



- Һауын һыйырҙар көтәбеҙ. Һөт продукцияһы тапшырабыҙ. Йылыныҡы йылына, айыныҡы айына килем килеп тора. Был эшкә бөтә ғаилә егелгән, бергә ҙә ситтә ҡалмай. Балалар йыр-бейеүгә лә әүәҫ, әммә мин ғаиләне туйындырыусы төп көс тә булырға тейеш, тип киләм. Йырлау өсөн икмәк тә кәрәк, - тип һөйләп китте Руслан Ҡотоев. - Бөгөн балаларҙы нисек тә юғары белемгә эйә итеү өсөн һуңғы малдарын һатып, өҙгөләнеп уҡыта күптәр. Унан ул бала юғары белемен тормошта ҡуллана алмай булып сыға. Ҡалала аҙ ғына эш хаҡына, аслы-туҡлы йөрөгәнсе, ауылда ниндәй ҙә шөғөл менән көн итһендәр ине.

Нимә әйтергә теләйем, йәш ғаиләләргә хөкүмәт тарафынан бирелгән ярҙамдарҙы алыуҙы бер аҙ ябайлаштырһындар ине. Сөнки, ҡарап торһаң - ярҙам бар, ә уны алыу - оло бәлә. Ә былай, ауылда йәшәү күңелле лә, рәхәт тә. Йыбанмаһаң, хөрриәт ул ауыл!

**(Дауамы 16-сы биттә).**

ИНТЕРНЕТТАН



# ГҮЗӘЛ ЗАТ...
## бәхетлерәк

■ Насар йоҡлаһаң, йоҡлап китә алмай яфаланһаң, ауыр юрған ябынып йоҡларға кәңәш итә белгестәр. Бындай юрғандарҙың файҙаһы балалар араһында үткән тикшеренеүҙәрҙә күптән раҫланған. Юрғанға баҫылыбыраҡ ятыу кешенең һине ҡосаҡлауына тиң, ти улар. Был ваҡытта организмда хатта кортизол күләме түбәнәйә, серотонин менән мелатонин күбәйә, йөрәк һуғышы тыныслана, ҡан баҫымы төшә. Кортизол юғары булһа, кешене йоҡоһоҙлоҡ ыҙалата, бындай кешеләр депрессияға бирелеп бара. Ә серотонин "эске сәғәттәр" ритмын яйға һала, мелатонин йоҡлап китергә ярҙам итә. Юрған ауыр булһа, йоҡо яҡшыраҡ туяҫаҡ.

■ Британия ғалимдары 6 йыл дауамында халыҡтың бәхет кимәлен сағыштырған. Унда ҡатнашыусылар тормош менән ҡәнәғәт булыуҙары, хәүефтәре тураһында һөйләгән. Асыҡланыуынса, ҡатын-ҡыҙҙар араһында үҙен бәхетле итеп тойоусылар һаны күберәк булып сыҡҡан. Ни өсөн ир-егет үҙен йышыраҡ бәхетһеҙ тоя - быны сәбәбен ғалимдар билдәләй алмаған. Һорауҙарға бер үк кешеләр яуап биргәнлектән, уларҙың яуаптарын сағыштырырға мөмкинлек булған. Йылдан-йыл гүзәл зат үҙен бәхетлерәк тип иҫәпләгән, әммә хәүеф тойғоһо ла үҫә барған. Белгестәр быны ғаиләләге матди хәлдең яҡшырыуы менән аңлата. Тимәк, ғаилә етеш йәшәй икән, ҡатын да бәхетле. Быға тиклем телефонға, компьютер уйындарына күп ваҡыт бүлеүсе үҫмерҙәрҙәрҙең үҙен бәхетһеҙерәк тойоуы тураһында асыш яһалғайны. Электрон ҡоролмаларҙың күбәйеүе үҫмерҙәр араһында бәхет кимәленең түбәнәйеүе менән тура килде, тигән фекерҙә ғалимдар. 1990 йылдарҙа үҫкәндәр менән сағыштырып ҡарағанда, 2000 йылдан һуң тыуыусылар араһында тормоштары менән ҡәнәғәт булмаусылар һаны күберәк. Уларҙың үҙбаһаһы ла түбәнерәк булып сыҡҡан.

■ Европа илдәрендә офис хеҙмәткәрҙәре араһында тороп эшләү модаға инә. Хатта өҫтәлдәр ҙә махсус рәүештә бейек итеп яһала. Улар шул рәүешле аҙ хәрәкәтләнеүҙең кире эҙемтәләрен кәметергә ынтыла. Австралия ғалимдары билдәләүенсә, тороп эшләгән саҡта кешенең интеллектуаль мәсьәләләрҙе сисеү һәләте түбәнәйә икән. Һынауҙар мәлендә 20 кеше 2 сәғәт дауамында тороп эшләй. Бынан һуң ғалимдар уларҙың сәләмәтлек торошон тикшерә һәм бер нисә мәсьәлә сисергә тәҡдим итә. Һөҙөмтәлә, өҫтәл артында тороп эшләүҙең веналар тулышыуына килтереүе һәм арҡала ауыртыуҙар барлыҡҡа килеүенә этәреүе асыҡлана. Ҡатнашыусыларҙың мәсьәләләрҙе сисеү һәләте лә түбәнәйгән була. Әлегә тороп эшләүҙең бер ыңғай яғы ла билдәләнмәгән. Ғалимдар ултырып эшләргә мәжбүр булыусыларға ял минуттары ойоштороп, тороп йөрөп алырға кәңәш итә. Был көнө буйы тик тороуға ҡарағанда күпкә файҙалыраҡ.

АҒИНӘЙҘӘР ҠОРО

**Республика ағинәйҙәре үткәргән бөтә сараларҙың да юғары кимәлдә ойошторолоуына, уларҙың ябай ғына бер кисәне лә йәмле, күңелдәрҙе нурландырған яҡты байрамға әйләндерә белеүенә күнегеп бөткәнбеҙ хәҙер. Шундай тәү ҡарамаҡҡа ябай, әммә ихлас күңелдән ойошторолған "Йылҡы ите йәшәтер, ҡыр сейәһе йәшәртер" тип исемләнгән байрам Йылайыр районы Юлдыбай ауылында үткәрелде. Был байрамға Сибай, Өфө, Учалы ҡалаларынан, Баймаҡ, Әбйәлил, Ейәнсура, Хәйбулла, Мәләүез, Күгәрсен, Бөрйән райондары ағинәйҙәре ҡунаҡ итеп саҡырылды.**

# ХӘҠИҠӘТ - УЛ БЕҘҘЕҢ АСЫЛЫБЫҘ,
## был донъяла башҡорт ҡатыны булып йәшәүебеҙ

Йылайыр районының "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы ағзалары ҡунаҡтарҙы Юлдыбай ауылы мәҙәниәт йортона саҡырып көтөп торған һәм һәр кемде ишек төбөнән үк йыр-моң менән ихлас әйҙүкләп ҡаршы алды. Башҡорттоң ҡунаҡсыллыҡ йолаһына тоғро ҡалып, ҡунаҡтарҙы түргә үткәреп сәй менән һыйлап, төп байрам үтәсәк тамаша залына саҡыра торҙолар. "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһының һәр сараһы ана шул асыҡ йөҙ күрһәтеп, күңел йылыһы өләшкән ҡатын-ҡыҙҙарҙың бергә йыйылып, бер-береһенең уңышына, өҫтәлыйына, тәжрибәһенә һоҡлана белеүе менән йөрәккә үтеп инмәле килеп сығалыр ҙа әле. Ошо уйҙар менән мәҙәниәт йортонаң фойеһына килеп индек тә, аптырап ҡалдыҡ. Фойела Йылайыр ағинәйҙәренең күҙҙең яуын алырҙай сағыу ҡул эштәре, гөл-сәскәләр сигелгән таҫтамалдар, сағыу төҫтәге ҡорамалар, семәрле кейеҙҙәр, балаҫтар, сөм-ҡыҙылдан селтәрҙәр, ҡашмауҙар һәм тағы әллә күпме оҫтабикәнең күңел йылыһын һалып эшләгән әйберҙәре һәм йәй һәм көҙ айҙарын хәтерләтеп, танауҙы ҡытыҡлаған аш-һыу күргәҙмәһе ҡуйылғайны. Ишеккә иң яҡын торған оҫтабикә Нурия Мәхмүтова менән һөйләшеп киттек. "Мин бала саҡтан ҡорама эшен беләм, башта ҡартәсәйем, унан һуң әсәйем ҡорама ҡора торғайны. Уларҙан өйрәндем эшкә. Балаларҙың кейеме күп, шуларҙы әрәм итеп ташламайым, уларҙан матур ғына ҡорама килә лә сыға. Өләсәйем беҙ бәләкәй саҡта киндерҙе лә эшкәртеп, ашъяулыҡ, таҫтамалдар һуға торғайны. Был оҫталыҡ тоҡомдан киләләр, тип уйлайым", - тине Юлдыбай ауылының 81 йәшлек ил инәһе Нурия Мәхмүтова. Унаң эргәһендәге өҫтәлдә Юлдыбай ауылының "Кәнифә" ҡул эштәре оҫталары клубы етәксеһе Хафиза Амантаеваның ҡул эштәре урын алған. Ул үҙе менән икенсе синыфта белем алып йөрөгән ейәнсәре Фәниә Шәрипованы ла килтергән. Һигеҙ йәшлек ҡыҙыҡай байрамға килгән инәйҙәргә сағыу мәрйендәрҙән сәсмәүер йыйып, оҫталығын күрһәтеп ултырҙы. Сәсмәүерҙәрҙе ул бүләккә эшләй икән, тағы ла мәрйендән беләҙектәр теҙергә лә әүәҫ булып сыҡты Фәниә. "Ауылдаш ҡатын-ҡыҙҙар ошолай ҡул эштәрен өйрәнергә теләп, түңәрәк төҙөнөк тә, хәҙер аҙна һайын йыйылышып ултырабыҙ. Беҙгә әсәй-өләсәйҙәр шөғөлөн өйрәнергә теләп, хаҡлы ялда булғаны ла, мәктәп уҡыусылары ла килә. Беҙ өләсәйҙәрҙең эшен, тәңкәле кейемдәрен тотоп ҡарап, күреп үҫкәнбеҙ. Балалар ҙа беҙҙән шулай ҡарап үҫһен, башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының матди ҡомартҡылары аша рухи тәрбиә лә алһын, тигән теләктән сығып эшләйбеҙ", - тине ағинәй. Әйтергә кәрәк, Йылайыр ҡыҙҙары мәрйендән эшләнгән әйберҙәрҙе генә түгел, хатта балаҫ һуғырға ла бик оҫта икән. Етенсе синыфта белем алған Юлдыбай ауылы ҡыҙы Яҙгөл Өмөтбаева төҫлө ептәрҙән балаҫ һуға. Унаң сағыу ҡул эше генә түгел, станогы ла үҙенсәлекле булып сыҡты. Сөнки был станок керҙе киптерергә элә торған тимер ҡоралдан яһалған, балалар өсөн ҡулайлы ла, күтәреп йөрөтөргә лә әллә ни ауыр түгел. Артабан Байғужа, Яманһаҙ, Йомағужа, Һултантимер, Ҡашҡар, Сиҙер, Сәлим, Матрай, Һынташ ауылдарынан килгән оҫта ҡуллы ағинәйҙәрҙең күргәҙмәгә ҡуйылған ҡул эштәрен, башҡорт халҡының милли аш-һыуҙары өлгөләрен ҡарап һоҡландыҡ.

Байрамдың төп сәбәпсеһенә - йылҡы итенән бешерелгән милли аштарға үҙенә айырым бер урын бүленгән. Сиҙер ауылы ағинәйҙәре бешереп әҙерләгән аштар төрлөлөгө менән хайран итте. "Бөгөн беҙ үҙебеҙҙең милли ризыҡтыбыҙ - йылҡы итенән бешерелгән төрлө аштарҙы ололап, башҡаларға күрһәтергә тип байрам ойошторҙоҡ. Бында йылҡының ҡарыны, ялы, ҡартаһы, бауыры, ҡата баш ите лә бар. Ҡаҙының төрлөһөн алып килдек, бына быныһы ыҫланған ҡабырға ҡаҙыһы, уны алыҫ юлға, яуға йөрөгәндә алыр булған боронғолар. "Ите иткә, һурпаһы биткә" тигән халыҡ, беҙ бөгөн һалмаһын бешереп, һурпаһын да килтерҙек. Әйткәндәй, йылҡы һурпаһы яңы ғына бала тапҡан әсәләр өсөн бик файҙалы. Ә ҡымыҙыбыҙ кеше организмына кәрәкле ниндәй матдәләргә бай булыуын, ниндәй сырхауҙарҙан дауалауын бөтәһе лә белеп тора", - ти Сиҙер ауылы ағинәйе Фәниә Ишбулатова.

"Йылҡы ите йәшәтер, ҡыр сейәһе йәшәртер" тигән байрамдың тантаналы өлөшөндә саҡырылған ҡунаҡтарҙы Йылайыр районы хакимиәте башлығы урынбаҫары Александр Коротков сәләмләне. Ҡайһы бер башҡорттарға ҡарағанда ла саф башҡорт телендә яҡшыраҡ һөйләшкән Александр Васильевич район етәкселеге ағинәйҙәрҙең бөтә башланғыстарын да хуплауы тураһында әйтте: "Башҡорт халҡы өсөн бик кәрәкле эш эшләйһегеҙ, йәш быуынға үҙегеҙ белгәндәрҙе өйрәтеүегеҙ яҡшы. Шулай ҙа бына ошондай йыйылыштарға ситтән күберәк ҡатнашыусылар йәлеп итһәгеҙ, үҙегеҙҙең эште күрһәтә йөрөһәгеҙ, тағы ла отошло булыр ине. Сөнки башҡорт халҡының борондан килгән йолалары, ғөрөф-ғәҙәттәре, үҙенсәлекле аш-һыуҙары, йә башҡа төрлө милләткә хас булған әйберҙәр тураһында күберәк кеше белергә, беҙҙең бренд итеп ҡабул итеп өйрәнергә теләйеш", - тине ул.

Йылайыр районы ағинәйҙәре тамашасыларға йыйнаҡ, моңға, бейеүгә тулып торған бик матур тамаша күрһәтте. Унаң эстәлеге тулыһынса йылҡы ма-



**✓ Рәсәйҙә яңғыҙ, тормош ярайһы ғына ҡаҡҡылаған, йәки яҡындары тарафынан рәнйетелгән, хыянат кисергән һәм шуға күп нәмәнән баш тартырға мәжбүр булған, бөтөн нәмә ауырлыҡ менән бирелгәндәргә "көслө ҡатын" тип атайҙар.**



лына һәм ҡыр сейәһенә бағышланған йолаларҙан, йырҙарҙан, бейеүҙәрҙән, шиғри һәм мәғлүмәти сығыштарҙан тупланған булыуы менән һәр кемдең күңеленә ятты. Имаметдин Торсонбаев Йылайыр районында 1935 йылда төҙөлгән 109-сы йылҡысылыҡ заводы, ундағы малдарҙың Ҡыҙыл Армия өсөн өйрәтелеүе, әлеге көндә лә район территорияһында ат тотҡан, фермер хужалыҡтары булдырған егәрле ир-егеттәр булыуы тураһында һөйләне. Ә бына Һултантимер ауылынан Фәниә Ғәлиәкбәрова йылҡы итенең файҙаһы, Мәргизә Ғәлиәкбәрова ҡаҙы төрҙәре, уны эшләү серҙәре, Гөльямал Ғәлиәкбәрова ҡымыҙ яһау нескәлектәре, Әлфиә Торсонбаева ҡылған, усаҡ, ҡыр сейәләре тураһында бик ентекле мәғлүмәт бирҙе. Уларҙың сығыштарын Һултантимер, Ҡашҡар ауылының һәүәскәр йырсылары һәм бейеү ансамблдәре ҡеүәтләп торҙо. Тамаша аҙағына яҡынлашҡас, Йылайыр районы ағинәйҙәре килгән ҡунаҡтарына күҙ нуры һалып, йөрәк йылыһы биреп эшләгән ҡул эштәрен бүләк итте. Иллә-мәгәр, сағырылған ағинәйҙәр ҙә буш ҡул менән килмәгән, күстәнәстәрен йыр-моңға төрөп тапшырҙылар. "Һәр кем тырышты, үҙ өлөшөн индерҙе был байрамды ойоштороуҙа, - ти Матрай ауылы ағинәйе Рәйсә Мелкоедова. - Сөнки ошондай ҡорға йыйылған ҡатын-ҡыҙҙар тағы ла халҡыбыҙ өсөн файҙалы эштәр атҡарырға дәртләнеп, яңы көс туплап ҡайта".

Ағинәйҙәр йыйыны шулай йырмон, бейеү менән генә үтә икән, тип уйлай күрмәгеҙ, уларҙың һәр эшенең нигеҙендә етди сәбәп, изге ниәттәр ята. Был юлы ла Йылайыр районы ағинәйҙәренең төп маҡсаттары үҙ тәжрибәһен күрһәтеп, башҡа райондарҙан килгән ҡатын-ҡыҙҙарҙың әйтер һүҙен тыңлап ҡалыу ине. Шуға ла байрамдың тантаналы өлөшө тамамланғас, залда йыйылған халыҡ фекер алышырға, кәңәшләшергә тороп ҡалды. Хәйбулла районы ағинәйҙәре ут күршеләренә елле генә кәңәштәрен, матур теләктәрен еткерҙе. Баймаҡ районынан килгән ағинәйҙәр ғаилә нигеҙен нығытыу, тәрбиә башы балаға ниндәй исем ҡушыуҙан башланыуы тураһында һөйләне һәм йәш ғаиләләргә быны аңлатыу зарурлығын билдәләне. Хәҙер ҡайһы бер райондарҙа ағинәйҙәр мәсеттәрҙә никах уҡытҡанда ла ҡатнашып, йола гәмәлдәрен үтәй икән. Был эш Учалы районында яйға һалынған, Хәйбулла, Әбйәлил, Баймаҡтар ҙа ҡалышмай. Ейәнсура районы ағинәйҙәрен эскелеккә һалышҡан кешеләрҙе тура юлға баҫтырыу мәсьәләһендә башҡаларҙың тәжрибәһе ҡыҙыҡһындырҙы. Кәңәшләшкән, фекерләшкән һуҙҙәр күп булды, әммә бөтәһе өсөн дә бәйел Бөрйән районы ағинәйҙәренең ҡорама ҡорауға арналған проекты өсөн БР Ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡҡа социаль ярҙам күрһәтеү министрлығының аҡсалата грантын отоуы ҡыуаныслы хәбәр булып яңғыраны. Һәр район "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы ағзаларының ошондай гранттарға тәҡдим итерлек эштәре күп. Мәсәлән, Йылайыр районы ағинәйҙәренен иң киткес нескә, осҡа итеп һығылған ҡатын-ҡыҙҙар өсөн палантиндары үҙе генә ни тора! "Сиҙер ауылы ағинәйҙәре миңә шундай иҫтәлекле бүләк бирҙе, улар үҙҙәре фабрика тауарынан да былайыраҡ итеп палантин һуҡҡандар, йоҡа ғына, иҫ киткес йомшаҡ, йылы. Ағинәйҙәргә уңыштар теләйем, сөнки улар был эште башлап ҡына тора икән, тинеләр", - тине Мәләүеҙ районы һәм ҡалаһы "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе Асия Латипова.

Байрам сараһы тамамланып, ҡунаҡтар юлға сығыр алдынан Йылайыр районы "Ағинәй" ойошмаһы етәксеһе Миләүшә Моратова менән һөйләштек.

- Башҡа райондарҙың "Ағинәй" ойошмалары үткәргән йыйындарында гел ҡатнашабыҙ, был юлы уларҙы үҙебеҙгә лә саҡырып алайыҡ тип хәл иттек. Бөгөн районыбыҙҙың барлыҡ ауылдарында ла тиерлек "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы уңышлы эшләп килә. Йылайырҙа бөтәһе лә йылҡы малы көтә, беҙҙең өсөн йылҡы итен әҙерләү, ризыҡ яраштырыу ғәҙәти хәл булып тойолһа ла, башҡалар өсөн ҡыҙыҡлы булыуы бар, тип уйлап, башҡорт халҡының йылҡы итенән бешергән милли аштарын бренд кимәленә күтәреүгә бер аҙым булһын, тип үткәрҙек бөгөнгө байрамды. Йылҡыны нәҡ ғинуар-февраль айҙарында, ҡыштың иң һыуыҡ көндәрендә һуйғас, ағинәйҙәрҙе ошо мәлгә саҡырҙыҡ. Беҙ кәнәғәт ҡалдыҡ, ҡунаҡтарыбыҙ ҙа күңелдәре булып, аралашыуҙан йәм табып ҡайтҡандыр, тип ышанам, - тине Миләүшә Шаһыбал ҡыҙы.

ШУЛАЙ ИТЕП...

**Йылайыр ағинәйҙәре байрамды асҡанда күптәргә таныш шул риүәйәтте иҫкә төшөрҙө: "Хоҙай Тәғәлә байрам өләшкән урынға Башҡорт һуңлап ҡына килеп еткән. Уға бер байрам да ҡалмаған, Хоҙай уға: "Ярай, ҡунаҡ килгән һайын өйөңдә байрам булһын!" тигән..." "Был риүәйәттең шундай дауамы ла бар, - тине кисәнең аҙағында Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының мәҙәни, социаль һәм рухи үҫеш буйынса "Ағинәй" төбәк йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы Янбаева. - Хоҙай Тәғәлә кешегә гел генә уйнап-көлөп, байрам итеп, гәмһеҙ йәшәмәһен өсөн оло бер бурыс та йөкмәткән: Хәҡиҡәт тигән бер көстө уйлап сығарған һәм кеше тиҙ генә табып алмаһын, уны эҙләү йәшәйешенең мәғәнәһен тәшкил итһен өсөн Хәҡиҡәтте унын йөрәгенә йәшергән... Беҙҙең өсөн Хәҡиҡәт - ул асылыбыҙ, был донъяла башҡорт ҡатыны, ошо милләттең аҫыл заты булып йәшәүебеҙ, балалар үҫтереүебеҙ. Алты йыл эсендә эшләгән эштәребеҙҙең һөҙөмтәһен күрә башланыҡ, ошоноң менән бәхетле булып, йәнәшәләгеләргә һоҡландырып йәшәйек". Республика ағинәйҙәре эшмәкәрлегенең йүнәлешен ошонан да тапҡырыраҡ итеп билдәләп тә булмайҙыр...**

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

МИНЕҢ ҠАТЫН-ҠЫҘЫМ



# ҺӘР БЕРЕБЕҘ...

## үҙенсә көслө

**Әсәйем һәр ваҡыт минең өсөн көслө ҡатын-ҡыҙ өлгөһө булды. Бөтөн ауырлыҡтарҙы еңә алған, бер нәмәгә ҡарамайынса көслө булып ҡала белгән гүзәл зат ине ул. Бер нисә эштә эшләне. Шәхси эшен дә бер нисә ҡабат яңынан башлап яйға һалырға тура килде уға.**

Үҙемдең йортом булһын, тип аҡса йыйҙы. Бер кемдән бер нәмә һораманы, кәмһенмәне, башын юғары күтәреп йәшәне. Иректе, көслө, уҙаллы булды. Мин дә әсәйемә оҡшап, үҙаллы булғым килә ине. Һөнәрем, алған белемем, үҙе иҫән саҡта әсәйемдең терәк булыуы миңә был юҫыҡта ҙур уңыштарға өмөт бағларға мөмкинлек бирген кеүек ине. Бер нисә эштә эшләрмен, бөтөн нәмәне үҙем табырмын, үҙем булдырырмын тип уйланым, әммә бер ҡасан да кейәүгә сығып, өйҙә генә ултырырмын, тигән уй башҡа ла инеп сыҡманы.

Бөгөн мин ир ҡатыны, әсәй һәм бына бер нисә йыл рәттән декрет ялында ултырам. Уйлап йөрөгән уйҙарым менән ысынбарлыҡ тормошом тура килмәгәс, башта ҡурҡтым да. Эйе, мин бәхетле ҡатын-ҡыҙ, ирем яҡшы, етеш тормошта йәшәйбеҙ, Аллаға шөкөр, йортобоҙ бар. Әммә мин әсәйемә оҡшамағанмын, тигән уй йөрәкте өйкәй ҙә тора ине. Мин бөгөн яратҡан һәм яратылған, көсһөҙ һәм нескә күңелле ҡатын-ҡыҙ. Ошо халәтем үҙемә хатта оҡшай ҙа, былдай тормошта йәшәргә теләһә лә, бөтөн гүзәл заттың яҙмышы бер түгел. Күптәр был хаҡта хыялланырға ла ҡыймай. Мин "көслө ҡатын" тигән төшөнсәнең күп ҡырлы икәнен аңланым. Рәсәйҙә, ғәҙәттә, яңғыҙ, тормош ярайһы ғына ҡаҡҡылаған, йәки яҡындары тарафынан рәнйетелгән, хыянат кисергән һәм шуға күп нәмәнән баш тартырға мәжбүр булған, бөтөн нәмә ауырлыҡ менән бирелгәндәргә "көслө ҡатын" тип атайҙар. Рус мелодрамаларын ҡарағыҙ, уларҙың барыһы ла тиерлек ошондай сюжетҡа ҡоролған.

Көслө булыр өсөн яңғыҙ, ғорур, үҙаллы булырға, үҙеңдең проблемаларыңды үҙең хәл итергә өйрәнергә кәрәк икән, тип уйлай инем мин дә. Хәҙер был йөнәттән фекерем башҡараҡ. Иренең хыянаты асыҡланған хәлдә лә, ғаиләһен һаҡлап ҡалыу өсөн быны ғәфү иткән ҡатындар бар. Ғаиләһен карьераһынан өҫтөн ҡуйғандар бар. Иренең туғандары киләндәрен яратмай, тәрлө һүҙ ишеттереп торһа ла, ғаиләлә тыныслыҡ булһын өсөн быға түҙеп, өндәшмәгәндәр ҙә бар. Инвалид бала тапҡандан һуң, икенсегә бала табырға йөрьәт итеүселәр бар. Үҙ туғандарын ҡалдырып, иренең тыуған төйәгендә йәшәүселәр аҙмы ни? Үҙ ғүмеремдә быға оҡшаш күп миҫалдар күрҙем мин. Һәм "көслө ҡатын" тигән төшөнсәнең аныҡ сиктәре булмауын аңланым. Һәр ҡатын-ҡыҙ үҙенсә көслө. Бер нәмәгә ҡарамайынса, йәшәргә, йылмайырға көс тапҡан һәр беребеҙ көслө. Әсәйемдә бөгөн дә ҡатын-ҡыҙҙың иң камил өлгөһө, тип ҡабул итәм һәм уны нисек булған, шулай яратам. Унын көүек эшһөйәр, алсаҡ, ҡыйыу, күнел төшөнкөлөгөнә бирелеүҙе белмәс булғым килә. Әммә көслө ҡатын тип әйтһендәр өсөн генә тормош ауырлыҡтарын үҙ инеңмә өйөргә теләмәҫ инем. Минең әсәйем көслө булырға теләмәне, ул ысынлап та көслө булды. Ә мин үҙемде нисек бар, шулай ҡабул итергә өйрәндем. Әсәйемдең яҙмышынан үҙләштергән төп һабаҡ шул - ғаиләм имен, яраткан ирем янымда булһын, балалар атай һәм әсәйле үҫһен, ә мин яғымлы, хисле ҡатын-ҡыҙ булып ҡалайым.

**Әлиә ҒӘЛИМОВА.**
**Өфө ҡалаһы.**

УҢЫШ ҠАҘАН

# ЕҢЕЛ ЙӘШӘ!

### Нимә ул үҙеңде яратыу?

Ябай ғына итеп әйткәндә, үҙеңде яратыу - үҙеңде ғәфү итеү, әлегә тиклем көсөңдән килгәнсе дөрөҫ йәшәүеңде таныу ул. Һәр саҡ һәр нәмәлә үҙеңдең ғәйебеңде күреүҙән туҡтарға ваҡыт. Камиллыҡ тураһында онотоорға, әммә камиллашыуҙан туҡтамаҫҡа кәрәк.

Етешһеҙлектәребеҙҙе ғәфү итеп, беҙ автоматик рәүештә тирә-яҡтағыларҙың да шундай уҡ сифаттарын ғәфү итәбеҙ, йәғни үҙебеҙҙе урап алыусыларҙа сағылабыҙ. Әгәр тормошҡа ентекле ҡарағанда, ул беҙгә һәр саҡ ниндәй йүнәлештә үҫергә кәрәклеген әйтәсәк. Проблема үҙебеҙҙә. Шуға үҙебеҙҙе нисек барбыҙ, шулай ҡабул итергә өйрәнергә кәрәк. Балаларыбыҙ хаҡына булһа ла. Сөнки улар бит беҙҙең эҙҙәрҙән бара. Әгәр үҙебеҙҙе яратмаһаҡ, балаларыбыҙ ҙа үҙҙәрен яратмаясаҡ, уларҙың һөйөүе беҙгә лә етмәйәсәк.

Ҡыҫҡаһы, етешһеҙлектәребеҙҙе ғәфү итеп, тирә-яҡтағыларҙы ла тәнҡитләүҙән туҡтаясаҡбыҙ.

### Яҡыныңды нисек яратырға?

*Һөйөү ике кешене лә - тапшырыусыны ла, алыусыны ла дауалай.*
*Карл Меннингер.*

Минеңсә, яҡыныңды яратыу - ул: уларҙы ғәйепләмәү; уларға бер ниндәй ҙә ярлыҡ таҡмау; уларҙан бер нәмә лә көтмәү һәм талап итмәү.

Был өс ҡағиҙәнән һеҙгә тормоштоң рухи һәм психологик кимәлдә ҙур күнел ҡайтыуҙарынан һәм күңелһеҙлектәрҙән арынырға ярҙам итергә һәләтле стратегия барлыҡҡа килә.

Ҡайһы берҙә: "Әгәр мин теге йәки был кешенең ни өсөн минең менән шулай эре һөйләшеүен аңлай алһам, уның менән үҙемде хатта һәйбәт тотор инем", - тибеҙ. Бында ла барыһы ла киреһенсә. Кешегә яҡшы мөнәсәбәттә булырға ҡарар иткәс кенә уны аңлай башлайһын. Ғәфү итә белеү һәм ярата белеү - бер үк нәмә. Тап шул сәбәпле беҙгә бәләкәй балаларҙы яратыу ауырлыҡ тыуҙырмай, сөнки беҙ уларҙа сафлыҡ һәм самимилыҡ күрәбеҙ.

Һәр саҡ, ниндәйҙер хәл-торошта яратыуҙы һайлаһаң, үҫешеңдең һәм камиллашаһың, сөнки бер үк ваҡытта кешеләрҙе яратырға һәм күрә алмаҫҡа мөмкин түгел.

Ҡыҫҡаһы, кешеләрҙе нисек яратырға? Бары тик "яратам" тигәнде "ҡабул итәм" тигәнгә алыштырырға кәрәк. Бер ниндәй талапһыҙ яратыу - кешеләрҙе нисек бар - шулай ҡабул итеү ул.

### "Миңә нимәгә ғаилә?"

Ғаиләне беҙҙе талапһыҙ яратырға өйрәтеү өсөн уйлап тапҡандар. Коллегаларҙан, дуҫтарҙан мәңгелеккә китергә мөмкин. Әммә ғаилә менән улай килеп сыҡмай. Һинең барлыҡ ыңғай һәм кире яҡтарыңды белгән туғандарыңдан бер ҡайҙа ла ҡасып китеп булмай, шуға күрә, иртәме, һуңмы, барыбер уларҙы яратырға өйрәнергә тура киләсәк.

**Эндрю МӘТЬЮЗ.**
**(Дауамы бар).**

✓ ***Бәйғәмбәребеҙ: "Үҙегеҙ динле булығыҙ, шул саҡта ҡатындарығыҙ ҙа динле булыр; ата-әсәгеҙгә ҡарата илтифатлы, түбәнселекле булығыҙ, үсеп еткәс, үҙегеҙҙең балаларығыҙ һеҙгә ҡарата түбәнселекле булыр", - тигән.***



*БАШ ЭШЛӘТМӘК*

# БЕҘГӘ ӨЛГӨ УЛАР!




**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА төҙөнө.**

**8-се һандағы сканворд яуаптары. Горизонталь буйынса:** Завод. Ғәлимов. Маҡан. Хаким. Өрләк. Ударник. Көсөгән. Өлкәр. Салбар. Поезд. Тол. Әрмәк. Арес. Маяҡ. Ерһеҙ. Лавка. Оран. Күсәева. Еҙнәй. Шиллинг. Варшава.

**Вертикаль буйынса:** Кашперль. Хөсәйенов. Гайдамак. Ғали. Үтәшев. Мунса. Золом. Тәһүә. Ералаш. Ҡарабулатов. Район. Диван. Гоа. Өкө. Әсене. Литр. Әшнә. Көр. Күҙәй.

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1439 һижри йыл.*

| Март (Йомадиәл ахыр) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалка | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 12 (24) дүшәмбе | 6:11 | 7:41 | 13:30 | 17:41 | 19:11 | 20:27 |
| 13 (25) шишәмбе | 6:08 | 7:38 | 13:30 | 17:43 | 19:13 | 20:29 |
| 14 (26) шаршамбы | 6:06 | 7:36 | 13:30 | 17:45 | 19:15 | 20:31 |
| 15 (27) кесе йома | 6:03 | 7:33 | 13:30 | 17:47 | 19:17 | 20:33 |
| 16 (28) йома | 6:01 | 7:31 | 13:30 | 17:49 | 19:19 | 20:35 |
| 17 (29) шәмбе | 5:58 | 7:28 | 13:30 | 17:51 | 19:21 | 20:37 |
| 18 (30) йәкшәмбе | 5:56 | 7:26 | 13:30 | 17:53 | 19:23 | 20:39 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

*МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ*

## ӘСӘЙҘЕ ҠӘҘЕРЛӘ!

"Йәннәт, - тигән Бәйғәмбәр ғәләйһис-сәләм, - әсәләрҙең аяҡ аҫтында".

"Аллаһы Тәғәлә, - тигән ул, - бәндәләргә төрлө гонаһтары өсөн бирергә тейешле яҙаларын үҙ теләге менән Ҡиәмәт көнөнә тиклем ҡалдырып тора, ата-әсәгә баш бирмәү кеүек гонаһты ғына ярлыҡамай, яҙаһын был донъяла уҡ бирә". Сөнки ата-әсәне рәнйеткән кеше үҙен Аллаһҡа тиңдәш итеп тотоуға бәрәбәр.

Ислам ҡаршыһында ҡатын-ҡыҙҙың дәрәжәһе бигерәк тә оло. Ул - тәрбиәсе. Баланың, буй еткән кешенең, кешелектең күркәм холҡон ҡойоп ҡуйыусы зат.

Шуға ла мосолман уның үҙен дә күҙ ҡараһы һымаҡ һаҡлап тота, түбәнлеккә төшөүҙәрҙән, аҙғынлыҡҡа биреләүҙәрҙән, беҙҙең замандағы кеүек эсеү-тартыуҙарҙан ҡурсалап ҡына тора.

Бәйғәмбәребеҙ: "Үҙегеҙ динле булығыҙ, шул саҡта ҡатындарығыҙ ҙа динле булыр; ата-әсәгеҙгә ҡарата илтифатлы, түбәнселекле булығыҙ, үсеп еткәс, үҙегеҙҙең балаларығыҙ һеҙгә ҡарата түбәнселекле булыр", - тигән.

*ШАҒИР ӘРНЕЙ...*



## СЕБЕР КИТӘ ҠЫҘҘАР...

Себер китә ҡыҙҙар. Тыма йырҙар.
Етем тороп ҡала ғаиләһе.
Фәрештәһе өйҙөң сығып китә-
Аңламайым һис тә ғилләһен.

Ҡатын-ҡыҙың эшеме ней Себер,
Һеҙҙең өсөнмө ней һалҡындар?
Сит тарафта нимә юғалттығыҙ?
Аңлатығыҙ, зинһар, ҡатындар!

"Тел төбөндә белəм инде, ағай,
Рәнйетмәсе берүк нахаҡҡа.
Өйҙә генә бик тә ятыр инем
Эшем булып, ирем мал тапһа.

Хәйерле юл теләп, мәктәбенә
Оҙатыр ҙа инем алмамды.
Тел йоторлоҡ итеп өйҙә генә
Һалыр инем ошо һалмамды.

Рәхәтләнеп йырлай-йырлай йөрөп
Йыуыр инем керен, иҙәнен.
Үҙем бында эштә, ә күңелем
Өйҙә йәшәй. Шуны һиҙәмен.

Рәнйетмәсе, ағай, дөрөҫөн яҙ,
Вөғәҙә бир, ҡарап күҙемә.
Һин дә ашығаһың, минен дә шул
Ваҡыт ҡалмай бер ҙә үҙемә..."

...Ҡала урамдары бушап ҡалған.
Иҫерек ир һорай биш тәңкә.
Себер китә ҡыҙҙар. Тыма йырҙар.
Был шиғырым булды тиктәҫкә...

**Насип ҺАҠМАРОВ.**

*СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ*



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**10 март "Бәхет хаҡы"** (Х. Мөҙәрисова), музыкаль мелодрама 16+
**11 март "Зөләйха күҙҙәрен аса"** (Г. Яхина, Я. Пулинович) 16+
**13 март "Антигона"** (Ж. Ануй), драма 12+
**15 март "Руди - never off..."** (А. Абушахманов), Рудольф Нуриевтың ғүмер миҙгелдәре 12+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**14 март "Кыз урлау йәки башкирская пленница"** (М. Кәрим), музыкаль комедия 12+
**15 март "Диңгеҙ ярын иңләй ала эт..."** (С. Айытматов), драма 6+

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**10 март "Ай булмаһа, йондоҙ бар..."** (Т. Миңнуллин), драма 12+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**10 март "Лесная ярмарка"** (А. Рахманкулова). Башлана 12.00, 14.00 0+
**10 март "Тысяча и одна ночь"** (П. Васильев). Башлана 19.00 16+
**11 март "Большой секрет"** (А. Рахманкулова). Башлана 12.00, 14.00 0+

*ИҒЛАН*

В связи с утерей квитанции **27794118, 85675286, 27792878, 99025660** страховой компании Ресо-Гарантия, считать недействительными.

БАШҠОРТ ҒАИЛӘҺЕ

# ЙЫБАНМАҺАҢ, ХӨРРИӘТ УЛ АУЫЛ!

## Ауылда ғаилә булып йәшәү ҙә - хөрриәт!



(Башы 11-се биттә).

*Миәкә районы Нарыҫтау ауылынан Нәсимә һәм Ғәзинур Шәйәхмәтовтар* - уҡытыусылар ғаиләһе. Өс бала тәрбиәләйҙәр. Туған телде үҫтереү һәм пропагандалау - уларҙың тормош девизы.

- Атай абруйы тигән төшенсә бөгөн ниндәй кимәлдә ул? Ошо хаҡта уйланғанығыҙ булдымы?

- Беҙ үҫкәндә был төшенсә юғары ине әле, - ти ғаилә башлығы. -Атайҙың булыуы ғына ла ғаиләне тота, бәлә-ҡазаларҙан ҡурсалай ине. Бөгөн, үкенескә ҡаршы, яңғыҙ бала тәрбиәләгән ҡатын-ҡыҙ күбәйҙе. Атай ҡулын, ирҙәр ҡылыҡын аңлап етмәгән балалар үҙ тормоштарында ла шул уҡ хаталарҙы ҡабатлай. Күңелһеҙ күренеш, әлбиттә. Ғаилә институтын үҫтереүгә иғтибар тағы ла нығыраҡ артһын ине, тигән теләктәмен.

- Ниндәй ул ауыл ғаиләһе?

- Бына беҙҙе ошо конкурсҡа күршеләребеҙ ебәрҙе, тип әйтергә лә була, - ти Нәсимә Шәйәхмәтова. - Бер көтөү малдарҙы, донъяны ҡарап торорға ризалаштылар. Шундай улар ауыл ғаиләләре. Бер-береһенә битараф булмаған, ярҙамсыл халыҡ. Ҡалала күрше-тирәне белмәскә лә мөмкин. Ә ауылда улай булмай. Киреһенсә, йәшәй-йәшәй үҙ-ара туғанлашып, яҡынлашып бөтәһең. Бер һүҙ менән әйткәндә, ауыл ғаиләһе - ул егәрле, эшлекле, кешелекле ғаилә. Ошонан, ауыл өйөнә таныш булмаған кеше килеп инһә лә ашатып-эсереп ебәрәләр бит. Быҙна шулай...

**Әйткәндәй, әлеге ғаилә ағзалары менән танышыу башҡорт ғаиләһенең асылы, ихласлығы, фиҙаҡәрлеге, ҡото тураһында ниндәйҙер күҙаллау бирә, шулай бит? Киләсәктә бәйгелә ҡатнашҡан ҡалған ғаиләләр менән дә гәзит биттәрендә таныштырыуҙы дауам итәсәкбеҙ.**

**Лилиә ИСМӘҒИЛЕВА.**

МИНЕҢ ҠАТЫН-ҠЫҘЫМ

# ӘСӘЙ ҠӘҘЕРЕН БЕЛӘЙЕК!



**Кеше, ни эшләптер, әсәйҙең ҡәҙерен ваҡытында аңламай. Был, бәлки, тәбиғәттән шулай һалынғандыр ҙа. Әсәй (бөтә йән эйәләренең дә әсәләре) балаһын башта йөрәк аҫтында, унан ҡулда, етәктә йөрөтөп үҫтерә-үҫтерә лә, йәне өҙөлөп, уның уңыш-хәсрәттәрен, ҡайғы-шатлыҡтарын бергә кисерешә. Улар үпкәләй ҙә, йөҙ бора ла, хатта ныҡлап асыулана ла белмәй. Улар иң тоғро кешеләр. Әммә... беҙ быларҙы ололаған бара ғына аңлайбыҙ.**

Студент саҡта, ситтә уҡығанда, атайымды йышыраҡ телгә алғанмындыр, күрәһең, таныштарым ҡайһы саҡ: "Һинең әсәйең юҡмы әллә?" - тип тә һорап ҡуя ине. Мин тотлоғоп ҡалам, уңайһыҙ булып китә. "Бар, Аллаға шөкөр", - тим дә, үҙ алдыма: "Ысынлап та, нишләп әсәйҙе һөйләп өйрәнмәгәнмен ул?"- тип аптырайым. Инде нисә йылдар үткәс, үҙем әсәй булып күпмелер тәжрибә туплағас ҡына мин быныҡ асылын аңлайым. Әсәйем шул тиклем аҡыллы ҡатын булған икән. Ул ғаиләлә бер ҡасан да үҙенә иғтибар йәлеп итмәгән. Үҙен бер ваҡытта ла алға ҡуймаған, аҡыллыраҡ, тапҡырыраҡ итеп күрһәтергә ынтылмаған. Балалары, туғандары алдында атайыбыҙҙың, иренең абруйын күтәреп маташҡан да баһа. Атайыбыҙҙың күләгәһендә генә йәшәп, уның эштәрен, һүҙен алға этәргән, уға көс-дәрт биреп тороусы ныҡлы тыл булып ҡына ҡалған. Ниндәй генә һәләтле, дәртле шәхес булһа ла, иренең алдына сыҡмай, һүҙен йыҡмай йәшәй белгән.

Үҫә-үҫә, тормош күрә-күрә, әсәйемдең шул тиклем бай күңелле кеше икәнен белдем. Һис бошона белмәҫ (әллә үҙен шулай күрһәткән генәме - әле лә сер), ныҡлы характерлы, һәр нәмәгә юмор менән ҡараған кеше икән дә баһа. Ауыл ҡатынының ҡырылып ятҡан эштәренән йонсоп киткән сағында ла күңелен төшөрөп, зарланып ултырмай, шаярып-көлөп йөрөй. Үҙе һөйләүенсә, килен булып төшкән йылдарҙа (18 йәштә килен булған) бер көн эсендә ҙур өйҙө яңғыҙ аҡлап, шул көндә уҡ тәҙрә ҡорғандарын йыуып, үтекләп, кире элеп өлгөргән. Унан тыш балаларҙы, ирҙе ашата, кисен мал ҡаршылай, һыйыр һауа. Бөгөн беҙ, өс ҡыҙы шул эште күмәкләп бер көндә тамамлап ҡуя алмайбыҙ.

Әсәйемдең тағы ла бер ҡыҙыҡ ҡылығы бар. Ул йыш ҡына өйҙә мебелдәрҙе күсереп, ул-был нәмәне үҙгәртеп, яңы күренештәр яһарға ярата. Мәктәптән ҡайтыуыбыҙға, өйҙәге яңылыҡтарҙан аптырап китә торғайныҡ. Был да уның бәләкәй генә донъяһын үҙенә күрә ҡыҙыҡлы, төрләрәк итергә тырышыуы булғандыр.

Ауылға концерт-фәлән килһә, тиҙ генә эшен тамамлап, шарт-шорт әҙерләнә лә, мин йыйынғансы: "Ярай, ҡарт кешеләр уйлағансы, мин йөрөп киләйем", - тип сыға ла китә ине. Әле лә ауылдағы бар йәмәғәт эштәрендә ҡатнаша, милли кейемдәр тегеү, биҙәүестәр эшләү, ағинәйҙәр ҡорон йәнләндереү, экологик өмәләрҙә ҡатнашыу һ.б. уның өсөн ололарҙың сауаплы бурысы булып тора. Ысынлап та, ҫослоғона хайран ҡалмалы! Йәй беҙ йөҡонан тороуға бер күнәк еләк йыйып алып килгән саҡтары ла була. Өҫтәүенә, өҫтәлдә самауыр ҡайнай, ҡоймаҡ та бешкән. Шулай йүгермәләп йөрөгән арала, шаярып-көләүе етмәй, таҡмаҡлап йырлап, тыпылдатып бейеп тә алһа, мин уға ҡарап, йыш ҡына: "Бына ҡайҙа был донъяның энергияһы", - тип һоҡланып уйлайым.

Әсәйем Дамира Усманова ғүмер буйы Баймаҡ районының Сыңғыҙ ауылында почтальон булып эшләне. Ауыр сумкаһын иңенә аҫып, ауыл буйлап китер ине. Яңғыҙ әбейҙәргә туҡтап, кемеһенә һыу алып килеп, кемеһенең иҙәнен һөртөп бирел китә. Шуға ла ололар үтә яратты үҙен. "Килен, килен" тип өҙөлөшөп торҙолар. Хәҙер ул әбейҙәр ҙә юҡ, әсәйебеҙ үҙе шулар йәшенә етеп бара... Почтаһын таратып бөтә лә, сумкаһы буш ҡайтмаһын тип, магазиндан тәм-том йәки алма алып ҡайтҡан була. Унан уны беҙгә һәм атайыма таратып бирә лә: "Мин яратмайым, һеҙ ашағыҙ", - ти. Беҙ уны ысынлап әйтә икән тип алабыҙ ҙа ашайбыҙ. Үҫкәс кенә уның быларҙың барыһын да ярата-һын белдем. Әле үҙем иң тәмлене балаларымдың алдына шылдырып һалғанда, шуларҙы уйлап, күҙҙәремә йәш тулып китә. Мин хәҙер, йәшем арта бара, әсәйемде бик йыш һөйләйем, уның эштәрен, ғәҙәттәрен, әйткәндәрен хәтерләп, ҡабатлап алырға өйрәндем. Был да йәшәй-бара бирелә торған дәрес икән. Беҙгә ғүмер бүләк иткән, бәпләп үҫтергән, атайлы-өйлө итеп, ғаилә ҡиммәттәренә өйрәтә белгән оло йөрәкле әсәйҙәрҙе ҡәҙерләй белəйек. Был беҙҙең әлеге донъялыҡта атҡарырға тейешле изге бурыс.

**Резедә ВӘЛИЕВА.**
**Сибай ҡалаһы.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ҺҮҘЕНӘН ҠАЙТҠАН...

## ир түгел

Ҡайта сапҡан буҙ яман, ҡайтып килгән ҡыҙ яман.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл:"Бер саҡ суфый уҡытыусы уҡыусыларына ҡарап былай тигән:**

**- Мин ярлы һәм көсһөҙмөн, ғүмерем ахыры етеүен дә тоям. Мин һеҙҙе күп нәмәгә өйрәттем, ә һеҙҙең бурыс - минең ҡартлығымды тәьмин итерлек аҡса табыу...**

**- Беҙгә нимә эшләргә һуң, уҡытыусыбыҙ? - тигән уҡыусылары. - Был ҡалалағы халыҡ бик һаран, күмәкләп хәйер йыйырға сығып китһәк тә, етерлек сумманы йыя алмаясаҡбыҙ...**

**- Ә бит аҡса табыуҙың бер ниндәй мәшәҡәтһеҙ ысулдары ла бар, - тигән уҡытыусы, - уны аҡсаһы күп булғандарҙан тартып алырға ла мөмкин. Беҙ ул аҡсаға лайыҡлы түгелме ни? Тик минен үҙемдән урларға һәм таларға ҡулымдан килмәй, мин көсһөҙмөн һәм ҡартмын...**

**- Беҙ һеҙҙең өсөн барһын да эшләргә әҙербеҙ, - тип яуап бирә уҡыусылар, - беҙ йәшбеҙ һәм көслөбөҙ. Тик беҙгә ни эшләргә икәнен генә әйт...**

**- Ҡараңғы төшкәс, урамға сығып, берәү ҙә күрмәй торған бер аулаҡ урын табып, шунда йәшеренеп тороғоҙ һәм затлы кейенгән кеше күрһәгеҙ, уның ҡулынан аҡсаһын тартып алығыҙ. Тик физик көс ҡуллана күрмәгеҙ... - ти уҡытыусы.**

**Уҡыусылар бүлмәнән бүлмәгә сабышып, йыйына, шаулаша башлай. Тик бер уҡыусы ғына башын күтәреп тә ҡарамайынса, бер урында баҫып тороуын дауам итә.**

**- Күрҙеңме, миңә ярҙам итергә тигәс, ҡалай күҙҙәре янып китте уҡыусыларымдың. Ә һин ни эшләп тораһың? Һинең дә миңә ярҙам иткең килмәйме ни? - ти уға уҡытыусы.**

**- Ғәфү ит мине, уҡытыусым, - ти уҡыусы. - Минең һеҙгә ярҙам иткем килә, тик һеҙ тәҡдим иткән нәмәне ҡабул итә алмайым...**

**- Ни өсөн?**

**- Был ерҙә беҙҙе берәү ҙә күрмәгән урын юҡ. Хатта мин үҙем генә ҡалһам да, мин үҙемде үҙем күрәм бит. Юҡ, уҡытыусым, мин донъя буйлап хәйер һорап сығып китһәм китәм, әммә үҙемде бур итеп күрергә теләмәйем...**

**Был һүҙҙәрҙе ишеткәс, уҡытыусының йөҙө нурланып китә. Ул уҡыусыһын ҡосаҡлап ала һәм: "Мин бәхетле, мин оҙаҡ йылдар буйы өйрәткән аҡыллы бер генә уҡыусым булһа ла аңлаған!" - тип ҡысҡырып ебәрә. Быҙна шунда уның ҡалған уҡыусылары был һынау ғына булғанын аңлай. Был әҙһеҙ үтмәй. Ошонан һуң уҡыусылар ниндәйҙер ярамаған ғәмәл ҡылырға ниәтләгәндә гел генә әлеге уҡыусының "Мин бит үҙемде үҙем күрәм" тигән һүҙен иҫенә төшөрә һәм тыйылыр булған. Был уларҙы тамам камиллашыуға алып килгән".**

1582218911006

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**

«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Выпуск издания осуществлен при финансовой поддержке Федерального агентства по печати и массовым коммуникациям.**

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 7 март 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4587
Заказ - 423/03